***Тағы ла һынау мәле етте: матбуғат баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге ниндәй дәрәжәлә һеҙҙең күңелдәргә ята, ә уҡыусыларҙың туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә баһалай икәнен һынау мәле. Шулай итеп, 2009 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итеп, яҙылғандарға матур йөкмәткеле баҫманан тыш, ҡайһы бер бүләктәребеҙ ҙә булыуы тураһында хәбәр ебәрәбеҙ. Индекстар: 50665 - хаҡы 306 һум 84 тин, 50673 - хаҡы 294 һум 78 тин. Бергә ҡалайыҡ!***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

5 -11 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№36 (350)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Шәриғәт һәм тәриҡәт…**



Улар - айырылғыһыҙ төшөнсәләр

2

**Рух һәм үҙаң уятыусы…**



уҡыу йорттары

4

**Манҡортлоҡҡа илткән юл,**

йәки Эскелек фәлсәфәһе тураһында



8-9

**Бал муллығы…**



егәрлене табышы

15

**ТВ программа**

14

*БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# УЛАР БЕҘҘӘ ЕТӘҮ ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## аҙым һайын икән…

**"Башҡортостандың ете мөғжизәһе" конкурсын үткәреү уйы, әлбиттә, Рәсәйҙә үткән "Семь чудес России" конкурсынан һуң барлыҡҡа килгәйне.**

Хәтерегеҙҙә булһа, Рәсәй конкурсында беҙҙең Шүлгәнташ мәмерйәһе менән Торатауыбыҙ ҙа ҡатнашты, уларға тауыш биреү ул тиклем әүҙем бармаһа ла, дөйөм Рәсәй кимәлендә беҙҙең тәбиғәт объекттарының да ҡатнашыуы барыбер ҙә күңелдә бер ғәм һәм сәм уятты. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа Шүлгәнташ менән Торатау ише мөғжизәләр бихисап бит, тинек. Ниндәй дәрәжәлә бихисап икәнлеген, бына, "Киске Өфө" гәзите һәм "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы "Сәләм" ижад берекмәһенең берлектәге конкурсын иғлан иткәс, аңланыҡ. Бихисап ҡына түгел, аҙым һайын икән! Мөғжизәләр илендә йәшәйбеҙ икән!

Эйе, мөғжизәләр илендә йәшәйбеҙ. Шуға ла беҙгә хат яҙыусы, шылтыратыусы күпселек уҡыусыларыбыҙҙың бер фекере менән килешмәй булмай: Башҡортостанда ете мөғжизәне генә айырып ҡарау дөрөҫ түгел, ти улар. Уларҙың фекеренсә, һәр объект буйынса ошондай конкурс үткәреп була, мәҫәлән, "Башҡортостандың ете күле", "Башҡортостандың ете тау түбәһе" һәм башҡалар.

Киләсәктә, моғайын, шулай итербеҙ. Ә хәҙер ошо иғлан иткән конкурсты ослап ҡуяйыҡ. Башҡортостаныбыҙ өсөн визит карточкаһы булырҙай, уны донъяла танытырҙай, халҡыбыҙ өсөн үтә әһәмиәтле тәбиғи, мәҙәни, тарихи объекттарҙы барлау ине бит инде маҡсатыбыҙ. Һеҙ тәҡдим иткән объекттар араһынан тауыш биреү өсөн түбәндәгеләр һайлап алынды. Әйҙәгеҙ, әүҙем генә тауыш биреүҙә ҡатнашайыҡ. Тауыш биреү хаттар аша ла, редакция телефоны: **252-39-99, 246-03-24**, "Киске Өфө" гәзите сайты: www.kiske-ufa.ru, шулай уҡ "Сәләм" ижад берекмәһе телефоны: **251-73-91, 251-90-44**, "Сәләм" ижад берекмәһе сайты: www.saljam.ru аша ла атҡарыла.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



1 БАШҠОРТ БАЛЫ



2 БАШҠОРТ ҠЫМЫҘЫ



3 ҠУРАЙ



4 "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ



5 "ШҮЛГӘНТАШ" МӘМЕРЙӘҺЕ



6 АСЫЛЫҠҮЛ



7 ЯНҒАНТАУ



8 ИРӘМӘЛ



9 АҒИҘЕЛ



10 КРАСНОУСОЛ МИНЕРАЛЬ СЫҒАНАҠТАРЫ



11 САЛАУАТ ЮЛАЕВ ҺӘЙКӘЛЕ



12 БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ



13 КЕЙЕҘ



14 ДЕБЕТ ШӘЛ



15 МОРАҘЫМ ТАРЛАУЫҒЫ



16 ТОРАТАУ

ПАРАДОКС

# ШӘРИҒӘТ ҺӘМ ТӘРИҠӘТ...

## Улар - айырылғыһыҙ төшөнсәләр

**Яңыраҡ дингә йөҙ борған илле йәштәр самаһындағы урыҫса-башҡортса (50-50) һөйләшкән атай кеше ҡыҙының тәриҡәт юлына баҫыуы хаҡында миңә шулай аңлатып бирҙе: "Мы вместе пришли религияға. Хәҙер ҡыҙым в тарикат ходит. Егеттәр-ҡыҙҙар менән көнө-төнө зикр крутят (уң ҡулының бармағын әйләндереп күрһәтте). Ҡарап торғаным бар - зеүелдеге сығаралар..." Ошондай парадокс булырлыҡ аңлатма хаҡында миңә һөйләйем һуң? Сөнки һуңғы ваҡытта дин хаҡында алып барған һөйләшеүҙәрҙә, айырым сығыштарҙа, мәҡәләләрҙә шәриғәт менән тәриҡәтте икеһен ике төрлө төшөнсә итеп бутап ҡарауҙар йыш осрай башланы. Дини әҙәбиәткә таянып, үҙем аңлағанса ошо төшөнсәләр хаҡында фекер йөрөтөргә йөрьәт итәм. Кәмселек-хаталарымды Аллаһы Тәғәлә ғәфү итһен.**

### Тәриҡәт - Аллаһы Тәғәләгә юл

Дин ғилеменә ҡараған әҙәбиәттә шәриғәт, тәриҡәт, суфыйсылыҡ, Нәҡшбәндиә төшөнсәләре шул тиклем ҡатмарлаштырып бирелгән - уларҙың асылына төшөнөр өсөн академик белем талап ителгәндәй тойолоп китә ҡайсаҡ. Уларҙың барыһы ла урыҫ телендә, башҡорт телендәгеләре бөтөнләй юҡ.

Шәриғәт яҡлы күп кенә дин әһелдәре, ниндәлер, тәриҡәт юлында тороуҙы хаҡ мосолман өсөн ситен булған ғәмәл тип ҡарау яғында. Әммә Ҡөрьәндә һәм хәҙистәрҙә сағылыш тапҡан дини тәғлимәттән ниндәйен генә алып ҡараған саҡта ла, шәриғәт тә, тәриҡәт тә Аллаһы Тәғәләнән килә, тәриҡәт - Аллаһы Тәғәләгә илтеүсе юл, тигән аңлатма бирелә. Әгәр ҙә тәриҡәттә булған кеше Ҡөрьәндә һәм хәҙистәрҙә әйтелгәндән ситкә тайпылмай икән, уны тәриҡәтлектә ғәйепләп булмай. Шәриғәт ҡанундарына тап килмәгән күренеш тәриҡәткә лә ҡаршы килә. Шәриғәт менән тәриҡәт - улар икеһе бер бөтөн, уларҙы айырып ҡарау мөмкин түгел.



Тәриҡәт шәриғәтте байытыу өсөн хеҙмәт итә. Хәҙерге Дағстанда, мәҫәлән, шәриғәт таратыусы дин әһелдәренең барыһы ла - тәриҡәт юлында тороусылар. Тәриҡәт һәм шәриғәт имамы Абдул Шарьани үҙенең "Лавакихул әнүәр" тигән китабында "Әгәр ҙә кеше шәриғәт тураһында мең китап ятлап та, мөриттең уҡытыусыһы булмаһа, йәғни уның шәйехе булмаһа, ул - Аллаһы Тәғәләнән һәм уның Бәйғәмбәренән аҙашҡан һәм ситләшкән бәндә", тип билдәләй. Ете йөҙ йыл элек йәшәгән Зекрейә Ансари: "Тәриҡәт юлында тормаусы әлим май яҙылмаған ҡоро икмәккә оҡшаған", - тигән. "Тәриҡәт - Аллаһы Тәғәләгә яҡынлауҙың иң ғәҙел һәм иң дөрөҫ юлы. Ул бәйғәмбәрлекте яҡтыртыусы нур", тигән Имам Ғазали.

Күптәр шәриғәт менән тәриҡәтте айырып ҡарауҙың хилафлыҡ икәнен дә белмәй. Мөхәммәт бәйғәмбәр, мәҫәлән, уларҙы айырып ҡарамайынса ғына шәкерттәренә Иман, Ислам һәм Ихсан төшөнсәләрен аңлатып бирә алған. Ихсан - ул Аллаһы Тәғәләгә хеҙмәт итеү юлында сафлыҡҡа өлгәшеү. Кахабинан Хәсән әфәнде: "Шәриғәт менән тәриҡәт - улар йән менән тән", - тип әйткән. "Бостан Аваристан" китабында Имандың һигеҙ өлөшө барлығы әйтелә: уның бер өлөшө - тәриҡәт юлына баҫыу. Ҡөрьәндә шундай аят та бар: "Һин миңә табан юлда булыусыларҙың артынан эйәр". Ни өсөн тәриҡәттән баш тартыусы әлимдәр Ҡөрьәндең ошо аятын һанға һуҡмай һуң? Дөрөҫөрәге, улар үҙ теләге менән Аллаһы Тәғәләгә яҡынлауҙан ҡурҡа булып сыға түгелме?

### Кем ул шәйех?

Әҙәм балаларының барыһын да Аллаһы Тәғәлә бер-берененә бәйле итеп яралтҡан. Кеше донъяла яңғыҙ ғына йәшәй алмай. Яңы тыуған сабый атаәсәһенең ярҙамына, уларҙың наҙына, үҫә төшкәс - тәрбиәгә мохтаж. Уҡыусылар һәр саҡ уҡытыусыға мохтаж, уҡыусыһыҙ уҡытыусы булмай, йәки - киреһенсә. Теләһә ниндәй ғәмәлде башҡарыу өсөн дә Әҙәм балаһына тәүҙә әҙерлек курсы үтеү мотлаҡ үтәлер шарт һанала, бының өсөн уҡытыусы талап ителә. Әгәр ҙә кеше ауырыһа, уға табиб кәрәк. Шуның кеүек, барлыҡ инаныусылар өсөн үҙ артынан эйәртеп, Аллаһы Тәғәләгә алып барыу өсөн юлбашсы - мөрит кәрәк. Мөритте икенсе төрлө шәйех тиҙәр. Ә шәйехтең үҙе артынан Аллаһы Тәғәләгә башҡаларҙы алып барыусы юл - тәриҡәт, йәшәү рәүеше йә режимы шәриғәт тип атала.

Аллаһы Тәғәлә ышаныу - Уға яҡынайырға теләү ҙә, бының өсөн Уға илтеүсе хаҡ юлды эҙләү ҙә булып тора. Шул юлды беҙгә фәҡәт мөрит йәки шәйех күрһәтә ала. Шуға ла һәр кеше, ул ниндәй генә гонаһтар ҡылһа ла, мөриттең кәңәштәренә мохтаж. Исламды яратыусы кеше бер ҡасан да мөритте һәм тәриҡәтте инҡар итмәҫ. Тәриҡәтте үҙһүҙләләр генә яратмаҫ.

Фәҡәт тик мөриттәр һәм шәйехтәр ярҙамында ғына Ислам дине Филиппин, Малайзия, Көньяҡ Африка, Испания, Һиндостан, Ҡытай, Суматра һәм Европа илдәренә тарала. Дағстанда донъя күреүсе "Альбутулат" китабында "Донъяның Ислам диненә күсеүсе күпселек башҡа дин кешеләре был юлға тәриҡәт юлында барыусы мөриттәр һәм шәйехтәр ярҙамында баҫа", тип әйтелә.

### Дәғүәләргә ҡаршы дәғүә

Тәриҡәт Исламды һындарға табыныусыларҙың һөжүменән, монгол-татарҙар ҡыйралышынан һәм Көнбайыш баҫҡынсыларынан һаҡлап алып ҡалды. Рәсәй батшалығы Исламды Христиан диненә күсерөү өсөн нимәләр генә эшләп ҡарамаһын, мосолмандарҙы нисек кенә суҡындырырға тырышмаһын, суфый имамдары һәм мөриттәр мосолман донъяһын һаҡлап алып ҡалыуға өлгәште.

"Тәриҡәт элекке кеүек камил түгел, шуға күрә унан баш тартырға кәрәк", тип әйтеүсе наҙандар хәҙер ҙә бар. Миненсә, тәриҡәтте һанға һуҡмау - үҙе үк наҙанлыҡ билдәһе. Ундай наҙандарға үҙҙәренсә яуап бирергә ҡала: "Элек шәриғәт тә хәҙергегә ҡарағанда таҙараҡ, сафыраҡ ине". Тимәк, уларса уйлағанда, беҙ бөгөн шәриғәттән дә баш тартырға тейеш булып сығабыҙ түгелме? Тәриҡәткә дәғүә белдереүселәр ҡайһы берҙә: "Тәриҡәттә әйтелгәнсә, барлыҡ мөриттәр ҙә сафланмай, таҙарынмай", - тиҙәр. Әммә был хәл тәриҡәттең фарызлығын, уның кәрәк булыуын инҡар итмәй. Ундайҙарға шулай тип яуап ҡайтарырға ла була: "Ҡөрьәндә, намаҙ кешене боҙоҡ уйҙарҙан, яҙыҡ эштәрҙән һаҡлай, тип яҙылған. Ә донъябыҙҙа, намаҙҙан айырыла алмаһа ла, боҙоҡ уйҙар уйлап, яҙыҡ эштәр ҡылып йәшәүселәр бихисап. Уларға, шундай боҙоҡ уйҙарҙан, яҙыҡ эштәрҙән айырыла алмағанлығыҙ өсөн намаҙҙан баш тартығыҙ, тип әйтеп буламы?" Тәриҡәткә ҡаршы килтерелгән һәр бер дәғүәне ошо рәүешле, шәриғәтте инҡар итмәҫлек иҫбатламалар менән юҡҡа сығарырға була.

**Шулай итеп...**

**Дини китаптарҙағы шәриғәт һәм тәриҡәт хаҡындағы ошондай тәғлиммәттән сығып, үҙебеҙсә шундай һығымталар ҙа яһарға булалыр:**

**1.Шәриғәт дини ҡанундарҙы, йолаларҙы мотлаҡ атҡарып йәшәү рәүеше булһа, тәриҡәт - кешене Аллаһы Тәғәләгә алып барыусы иң дөрөҫ юл.**

**2.Тәриҡәт юлында тормау үҙ теләгең менән Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыуҙан баш тартыуҙы, тәриҡәтте инҡар итеү һинең сикләнгәнлегеңде аңлата булыр.**

**3.Тәриҡәт төшөнсәһен аңлатыр өсөн Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт бәйғәмбәргә үҙенең фәрештәһен ебәргән икән, тимәк, тәриҡәт - Исламдың барлыҡ ҡанундарына тап килгән төшөнсә.**

**4. Тәриҡәт юлын һайлау - Аллаһы Тәғәләгә асыҡ йөрәгең менән үҙең юлға сығыуға тиң батырлыҡтыр.**

**Яңыраҡ редакциябыҙға ғалим Илгиз Солтанморатов килеп китте. Ул килгәндә, беҙ шәриғәт һәм тәриҡәт хаҡында әңгәмә ҡороп ултыра инек. Ул беҙҙең әңгәмәне бер аҙ тыңлап ултырҙы ла, һәр ваҡыттағыса: "Шәриғәт - ул Исламдың башланғыс синыф белемен алыу, ә тәриҡәт - урта мәктәпте тамамлау", - тип үҙ фекерен әйтеп тә һалды. Беҙ ҙә уның фекерен йөпләнек - шәриғәт тә, тәриҡәт тә бер үк мәктәптә үтелә бит.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓БР Кредит ойошмалары ассоциацияһы ауыр хәлгә тарыған ипотека кредиттары заемщиктары өсөн мәғлүмәт-консультация үҙәге булдырҙы. Үҙәк белгестәре һәр кесе йомала көндөҙгө 4-тән киске 7-гә тиклем Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы урамы, 78-се йорт адресы буйынса бушлай консультациялар үткәрә.

✓Республикала яңы йәмәғәт ҡоро - "Башҡортостандың Олимпия советы" барлыҡҡа килде. Уны БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев етәкләйәсәк, ә уның составына билдәле спортсылар инәсәк. Спортсыларға ярҙам итеү өсөн республика бюджетына өҫтәмә аҡса һалынасаҡ, ә Рәсәй йыйылма командаһына кандидаттар исемле стипендиялар аласаҡ. Шулай уҡ буласаҡ чемпиондарҙы әҙерләү өсөн Сибайҙа олимпия резервы мәктәбе төҙөләсәк, интернаты ла булған ул мәктәп 300 бала тәрбиәләүгә иҫәпләнәсәк.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Мэрия" абонентының "ҡыҙыу пейджеры"на был арала ғына 123 кеше мөрәжәғәт иткән. Күҙ яҡынлашыуға табан граждандарҙы йорттарҙағы ремонт эштәре борсой. Күптәр ихаталарҙың торошона, юлдарҙың ватылыуына борсола. "Ҡыҙыу пейджер" телефоны: 2-770-911.

✓"Башинформ" мәғлүмәт агентлығында наркоманлыҡты иҫкәртеү саралары тураһында һөйләшеү булды. Билдәләнеләүенсә, әле республикала 80 меңдән ашыу наркоман иҫәптә тора, шуларҙың 31 меңе - баш ҡалала. Сирлеләрҙең 89 проценты - 15-17 йәшлек үҫмерҙәр, 10 йәшлек наркосирлеләр ҙә бар. Ағымдағы йыл башында Өфөнөң 141 мәктәбендә 16841 өлкән синыф уҡыусыһы иреккә рәүештә наркотик һәм психотроп матдәләр ҡулланыуҙы асыҡлауға йүнәлтелгән тест һынауҙары үткәйне. Һөҙөмтәлә 43 баланың ҡанында наркотик матдәләр булыуы асыҡланды. 2 сентябрҙән шулай уҡ ошо тесты үткәреү буйынса "ҡыҙыу линия" эшләй башланы. 223-11-08 телефоны аша борсоған һорауҙарға яуап табырға мөмкин.

✓Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаларына Дрезден техник университетының медицина факультетынан өс студент практика үтергә килгән. Немец студенттары Республика балалар клиник һәм 22-се дауаханаларҙа эшләйәсәк.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# БУРҘАР ХАҠЫНДА ҺӘМ...

## улар хаҡында ғына ла түгел

**Үткән аҙналағы ҡайһы бер яңылыҡтарҙы ишеттегеҙ микән, юҡ микән? Шундай тәү ҡарашҡа ҡыҙыҡ, уйлана төшһәң, ҡыҙғаныс бер хәбәр күҙгә ташланды. Санкт-Петербург ҡалаһында көпә-көндөҙ Владимир Ежеев тигән бер кешенең машинаһын ҡыуып алып киткәндәр. Шунан, тиерһегеҙ, могайын. Рәсәйҙең һәр бер ҡалаһында көн һайын берәү-икәү генә түгел, тиҫтәләгән автомашиналарҙы урындарынан "шылдыралар". Кемдер яуыз ниәт менән, ә йышыраҡ - ул машиналарҙа бала-сағa яғыулығы бөткәнсе йөрөй-йөрөй ҙә, ташлап ҡасып та китә, йәнәһе.**

Улай тимәгеҙ әле, йәмәгәт. Был бит ябай машина түгел. Хужаһы ла ябай кеше түгел. Хатта Рәсәйҙең ябай бер ҡалаһында булған хәл түгел был. Тәүҙә машина хаҡында асыҡлыҡ индереп үтәйек. Японияла етештерелгән "Тойота Ланд Крузер" тип аталған джип. Йәғни, юлһыҙ-ниһеҙ йөрөй алған ҡеүәтле бер автомобиль. Хаҡы ла уның шаҡ ҡатырырлыҡ. 2 миллион 200 мең һум торған дүрт тәгәрмәсле бер "ғифрит". Теләһә кем йөрөмәй ундайҙарҙа. Йә бандиттар... Йә, был осраҡтағы кеүек, милиционерҙар. Машина менән аҙмы-күпме анлашылды, шикелле. Хәҙер уның хужаһы тураһындағы мәғлүмәтте аныҡлап үтәйек. "Милиционер" тип әйткәйнек бит инде, әммә ул ябай милиционер түгел, ә оло дәрәжәләге түрә. Хатта ҡайһы берәүҙәр өсөн батша һәм алла кимәлендә булған түрә. Дәүләт юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге инспекцияһының Сыуашстан Республикаһы буйынса идаралығы начальнигы, имеш.

Владимир Ежеев илебеҙҙең икенсе баш ҡалаһында үҙ эштәре менән хаҡлы ялында шәхси автомобилендә йөрөгән һәм Санкт-Петербургтың Александровский паркында машинаһын 25 минутҡа ғына ҡалдырып торған булған. Шул урында джип - вәссәләм! Бәлки, ул, ГИБыДыДышник үҙенең тыуған яҡтарында, Сыуашстанда автомобилен бикләмәй генә ҡалдырып өйрәнгәндер. Унда бит был джипты һәр бер эт белә һәм уға яҡынлап, тәгәрмәсенә аяғын күтәрергә лә шөрләй. Ә Питерҙы теләһә ниндәй ҡала тип әйтеп булмай ҙа баһа. Бында машинаны түгел, ауыҙыңды бер минут асыҡ тотергә ярамай.

Шуныһын да әйтеп үтмәй булмай - бәҡтиһәң, һуңғы арала был ҡалала ситтән, башҡа ҡалаларҙан, хатта бөтөн илдәрҙән килгән ҡыйбатлы автомобилдәрҙе сәлдереү үҙенсәлекле бер модаға әүерелеп киткән икән. Август айында, мәҫәлән, Финляндия гражданы "Лексус"һыҙ ҡалған, Киров ҡалаһынан килгән бер "асығауыҙ" "Тойота Ланд Крузер"ын урлатҡан, ә Әстерхан өлкәһе кешеһе "БМВ" автомобиленән ҡолаҡ ҡаҡҡан. Ә август башында иһә теләһә кемдең түгел, Рәсәй Федерацияһы Генераль прокуратураһы эргәһендәге Тикшереү комитеты етәксеһенең урынбаҫары Игорь Соболевскийҙың "Тойота Ланд Крузер"ына "айыу майы" һөрткәндәр. Һеҙ нисектер, әммә мин ғорурланам. Санкт-Петербург ҡалаһы өсөн ғорурланам. Ул ҡалабыҙҙы элек "революция бишеге" тип атанылар. Бөтәгеҙ ҙә хәтерләйҙер ни өсөн ундай атама йөрөткәнен? 2000 йылдарҙың был яғына Санкт-Петербург "президенттар бишеге" тигән исем менән йөрөргә хаҡлы... ине. Ни тиһәң дә, бер-бер артлы бер түгел, ике президентыбыҙ ошо ҡаланан булды һәм бар бит. Әммә хәҙер ул үҙенә "киммәтле автомобилдәрҙе осҡа сәлдереүселәр ояһы" атамаһын бына-бына алырға тора. "Бурҙар бишеге", тимәк.

Хәйер, йәмәгәт, ғәфү! Был яңғырауыҡлы һәм "маҡтаулы" исемгә бөтөнләй башҡа төбәктәге һәм дә башҡа йүнәлештә эш итеүселәр дәғүә итә түгелме? Шулай шул. Томск өлкәһенә иғтибар итәйек. Хәтерләһәгеҙ, быйыл 22 апрелдә был төбәктә "Сибавиатрейд" тигән авиакомпанияһының бер вертолеты ҡолағайны. Перәме, осоп барған еренән МИ-2 ергә ҡолап, селпәрәмә килде лә ҡуйҙы. Аллаға шөкөр, экипаж ағзалары ла, пассажирҙар ҙа имен ҡалды. Прокуратура был эште ентекләп тикшергән һәм (иғтибар, йәмәгәт!) иҫ киткес һығымтаға килгән - бәҡтиһәң, ҡолаған ваҡытта вертолеттың яғыулыҡ бактары... буп-буш булған! Осоу документацияһына ҡарағанда, рейс алдынан ғына вертолетҡа 700 литр яғыулыҡ ҡойолған. Маршрутты, осоу ваҡытын иҫәпкә алғанда, был аппараттың тәкмәс атҡан мәленә уның бактарында кәмендә 500 литр бензин ҡалырға тейеш икән. Ә улар буш! Фактически, ҡоро. Бер яҡтан, был, әлбиттә, ыңғай күренеш. Сөнки, тулы бактар вертолет ҡолаған минутта тоҡанып китһә, шартлаһа, тереләр ҡалмаҫ ине. Тимәк, йәмәгәт, яғыулыҡты урлаусылар һауалағы "тимер энәғараҡ"тың бактарын бушатыуға өлгәшкән. Сабып барған атты дағалау менән бер бит был. Рекордтар кенәгәһенә индерерлек ваҡиға. ГИБДД начальнигының автомобилен сәлдереү бүстәк кенә.

Үткән аҙнанан тағы ла бер мәғлүмәтем бар. Уныһы былай ғына. Тәүге икеһенә бер генә лә бәйләнеше юҡ. Хатта уртаҡ бер нәмә лә юҡ, тип әйтер инем дә... был юлы ла һүҙ автомобилдәр хаҡында барасаҡ икән. Тик уртаҡлыҡтар эҙләмәгеҙ. Юҡ улар. Мәғлүмәт үҙе ҡыҙыҡлы тойолдо. Яңы автомобиль алырға теләп тә ала алмаусылар өсөн ҡыҙыҡ булыуы мөмкин, мәҫәлән. Ҡабатлап әйтәм, түбәндә һүҙ бурҙар тураһында бармаясаҡ. Бурҙар юҡ унда. Тәртипле, ышаныслы, хатта һөйкөмлө кешеләр һәм уларҙың матур эштәре хаҡында ғына бәйән итәсәкмен.

Үткән аҙнала ваҡытлы матбуғат сараларында донъя күрҙе был хәбәр. Рәсәй Федерацияһы Президентының Эштәр Идаралығы автомобилдәр һатып алыу өсөн тендер (йәғни, конкурс) иғлан итте. Кемдәр өсөн, тиһегеҙме? Уныһын кем белә, моғайын, шул Идаралыҡта эшләгәндәр өсөндөр инде. Был хаҡта мәғлүмәт асыҡтан-асыҡ Рәсәй Федерацияһының Иҡтисади үҫеш министрлығы тарафынан булдырылған махсус сайтта урынлаштырылған. Конкурс хаҡы - ярты миллиард һум. Эйе, йәмәгәт, тап шулай, 500 миллион тәңкә. Әҙ ҙә түгел, күп тә түгел. Самай шулай. Әйткәндәй, кемдер ҡатнашырға теләһә, рәхим итегеҙ, документтар 22 сентябргә тиклем ҡабул ителә әле. Ниндәй машиналар алырға ниәтләйҙәр һуң Рәсәй Президенты Эштәр Идаралығында? Ҡырҡлап "БМВ-750" - һәр береһенең хаҡы, сама менән, 4,8 миллион һум тирәһе. Бынан тыш, 50 дана - "БМВ - 525", уларҙың һәр береһенең хаҡы 1,9 миллион һум тирәһе. Тағы ла 50 "Форд Мондео", 22 "Форд Транзит" микроавтобусы һәм 20 "Хундай" автобусы. Яңылышмаһам, йәмғеһе - 182 автомобиль. Президенттың Эштәр Идаралығы машиналар менән Президент аппаратында эшләгән хеҙмәткәрҙәрҙе генә түгел, министрҙарҙы ла, уларҙың урынбаҫарҙарын да, хатта Дәүләт Думаһы депутаттарын да тәьмин итә икән.

Нишләйһең, кәрәктер инде. Мәскәү ҙур - ә уларға (түрәләребеҙгә, тиеүем) туҡтауһыҙ йөрөргә, ауыр һәм яуаплы дәүләт эштәрен хәл итергә, беҙҙең, халыҡтың, мохтаждарын хәстәрләргә, көнө-төнө беҙҙең хаҡта уйларға кәрәк. Беҙҙең хаҡта ғына түгел, бөтә ил һәм донъя киләсәге хаҡында баш вата улар. Нисек итеп шундай эшем эйәләрен "Волга"ға йәки "ун дүртенсе" "Лада-Самара"ға, йәки, хатта ябай халыҡ араһында иномарка тип йөрөтөлгән "Дэу-Нексия"ға ултыртырға мөмкин? Әйтегеҙсе, йәмәгәт?

Ҡабатлап әйтәм, был мәғлүмәттә бер ниндәй бур-ҡараҡтар хаҡында һүҙ бармай. Аҡса (500 миллион һум, тимәк) алдан уҡ дәүләт ҡаҙнаһында автомобилдәр алыуға тәғәйенләп ҡуйылған булған. Йыл һайын тиерлек Рәсәй Президенты Эштәр Идаралығында автопаркты өлөшләтә яңыртып торалар икән. Планлы эш. Уйлы эш. Иҡтисади көрсөк менән бер нисек тә бәйле түгел был эш. Көрсөк - үҙенсә, ә Рәсәй Президенты Эштәр Идаралығы - үҙенсә.

Бер ниндәй ҙә ишара ла, сурт та юҡ. Машиналарҙың атамалары шундай матур - йыр кеүек моңло. "Форд", БМВ", Хундай". Хатта йөрәктә ҡан уйнай. Уларҙы һатып алыу өсөн бүленгән суммалар ҙа матур яңғырай - 500 миллион һум. Ярты миллиард. Шундай түңәрәк, йоморо сумма, тиер инем хатта. Эйе бит, йәмәгәт? Ҡалай матур эш эшләнем тип, ҡыуанып ултырам. Бурҙар хаҡында яҙып, кәйефте боҙғансы, шулайтып, мөмкинлектәре булғандар өсөн ҡыуаныу ҙа күңелде күтәрә икән дә баһа. Хәлемдән килһә, был хаҡта йышыраҡ яҙырмын. Бергәләп ҡыуанайыҡ.

**Таһир ИШКИНИН.**

*НИҺАЙӘТ!*

## ЙӘ МИЛИЦИОНЕР, ЙӘ КОРРУПЦИОНЕР...

Ҡазан ҡалаһында уҙғарылған оператив штаб ултырышында РФ Эске эштәр министры Рәшит Нурғәлиев төбәктәрҙәге милиция етәкселәренә үҙ ведомствоһында коррупцияны бөтөрөүҙе өҫтөнлөклө маҡсат итеп ҡуйҙы. "Һеҙгә үҙ сафтарыбыҙҙа коррупцияны тамырынан бөтөрөү өсөн кисектергеһеҙ саралар күреүгә бер ай ваҡыт бирәм", - тине министр. Ошо ваҡыт эсендә хәл яҡшы яҡҡа үҙгәрмәй ҡала бирһә, уның бойороғон үтәмәгән етәкселәргә ҡарата ҡаты саралар ҡулланыласаҡ. Милиция башлығы был осраҡта ғәйепләләрҙең вазифалары, званиелары һәм элекке ҡаҙаныштары бер нисек тә иҫәпкә алынмаясаҡ хаҡында белдерҙе. Ысынлап та, закон һағында торорға тейеш булып та, төрлө мутлыҡтар ҡылған ҡомһоҙ милиция хеҙмәткәрҙәрен башҡа юл менән туҡтатып булмаясағына инанғандыр инде Рәсәй милицияһы башлығы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл Башҡорт дәүләт университеты ойоштороулуға 100 йыл тула. РФ Хөкүмәте Премьер-министры Владимир Путин бойороғо менән был юбилей дөйөм дәүләт ваҡиғалары рәтенә индерелгән. Төп тантаналар декабрҙә үтәсәк. Юбилей саралары рәтендә "Төбәктәрҙең инновацион мөхитен булдырыуҙа класик университеттарҙың роле" тигән Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция ла ҡаралған.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә граждандарҙы авария хәлендәге йорт фондынан күсереү буйынса адресы программаларҙы тормошҡа ашырыуға һәм Өфөлә күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлауға арналған киңәйтелгән ултырыш булып үтте.

✓БР Хөкүмәте бойороғо менән республикалағы айырым категория граждандарға 2005 йылдың 28 ғинуарынан пассажирҙар транспортында йөрөүгә берҙәм социаль билет индерелгәйне. Быйыл БР Хөкүмәте бойороғо менән 1 сентябрҙән ҡала яны транспортында йөрөүгә бындай льготалар бөтөрөлдө. Ләкин баш ҡала пенсионерҙары был хәл менән килешмәйенсә, БР Хөкүмәте Премьер-министрына мөрәжәғәт итте. Пенсионерҙарҙың үтенесен иҫәпкә алып, Премьер-министр льготаларҙы бөтөрөүҙе баҡса миҙгеле аҙағына тиклем кисектерҙе һәм был мәсьәләне яңынан ҡарауҙы 15 октябргә ҡалдырҙы.

✓БР Хөкүмәте бойороғона ярашлы, 20 сентябрҙә буласаҡ Ураҙа ғәйете байрам көнө тип иғлан ителгән. Ошоноң менән бәйле, 19, 20 һәм 21 сентябрь ял көндәре булып тора.

✓Хәбәр итеүебеҙсә, 29-30 октябрҙә Өфөлә Әҙеһәм Исҡужин исемендәге ҡурайсылар конкурсы үтәсәк. Уны Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәҙәниәт һәм сәнғәт идаралығы, "Кала мәҙәниәт һарайы" муниципаль учреждениеһы һәм Башҡортостан Ҡурайсылар берлеге ойоштора. Конкурсҡа бәйле бөтә һорауҙар менән 279-06-38 телефоны аша мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓Бөгөн Октябрь районының Жилино һәм Зинино ауылдары араһында "Зинино" ауыл хужалығы йәрминкәһенең беренсе сираты файҙаланыуға тапшырыла. Йәрминкә көн дә 9-ҙан 20 сәғәткә тиклем эшләйәсәк. Зинино ауылына тиклем Көньяҡ автовокзалдан - 124-се, Дан бульвары туҡталышынан 124-к автобустары бара. Белешмәләр өсөн телефондар: (347)242-45-03, 292-45-10.

✓ *Баланың белеме, кеше булып үҫеүе, шәхес булараҡ формалашыуы унының ниндәй мәктәптә, ниндәй уҡытыусылар ҡулынан белем алыуынан да тора. Был йәһәттән мин гимназия уҡытыусылары, тәрбиәселәре тураһында ғорурланып телгә алыр инем.*



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## СҮПЛӘМӘҺӘҢ...ТАҘА БУЛА

**Быйыл йәй Өфө ҡала округы ҡала Советы ҡарары менән республикабыҙ баш ҡалаһын төҙөкләндереү буйынса яңы ҡағиҙәләр раҫланғайны. Был ҡағиҙә талаптарының үтәлеше бөтә юридик, физик һәм вазифалы кешеләр өсөн дә мотлаҡ. Уны боҙған өсөн граждандарға - 1500-ҙән 3000 һумға тиклем, вазифалы кешеләргә 10 меңдән 20 меңгәсә, юридик шәхестәргә 20 меңдән 30 мең һумға тиклем штраф һалынасаҡ.**

Күп ҡатлы кварталдар территорияһының граждандар менән килешеү нигеҙендә махсуслаштырылған ойошмалар тарафынан йыйыштырылыуы сүпте ҡайҙа етте, шунда ташларға мөмкин, тигән һүҙ түгел бер ҙә. Бындай осраҡта, йәғни граждан тарафынан төҙөкләндереү ҡағиҙәһе боҙола икән, унан мотлаҡ штраф түләтелә. Шәхси торлаҡ бинаһы милекселәренә был йәһәттән уйланырға тура килер: ғәҙәттә, улар йорто эргә-тирәһендә көнкүреш йә булмаһа төҙөлөш сүп-сары күпләп тупланыусан. Участка милиционеры килеп, административ тәртип боҙған өсөн протокол төҙөгәнен көтмәйенсә, үҙ биләмәһен ваҡытында таҙартып тороу һәр милексенең дә аңына барып етмәй әле.

Шуны ла иҫтән сығарырға ярамай: территорияны йыйыштырыу башҡаларҙың маҙаһына тейеүсе шау-шыу йәки техника тауышы менән бәйле булһа, бындай эште иртәнге сәғәт 6-нан киске 11-гә тиклем башҡарырға кәрәк. Торлаҡ микрорайондар биләмәһендә сүп-сарҙы яндырыу ҙа кәңәш ителмәй.

Шәхси торлаҡ хужалары шуны ла иҫтән сығармаһын ине: уларҙың йорттары һәм урамдары артында бысраҡты һәм йыуынты һыуҙарҙы түгеү өсөн ҡулайлама булмаһа, бысраҡ һыуҙы тротуарға, газондарға йәки юл үткән ергә түккән хәлдә шулай уҡ административ штраф түләтелә. Бөтә булған бысраҡ сүп-сар махсус ҡулайлаштырылған транспорт ярҙамында ситкә сығарыла. Шәхси йорттарҙа канализация булмаған хәлдә бысраҡ һәм ҡалдыҡ һыу түгеү өсөн махсус эшләнгән һәм өҫтө япмалы соҡор булырға тейеш.

**Һүҙ ҙә юҡ, бөтәһе лә матур, таҙа һәм төҙөкләндерелгән ҡалала йәшәргә теләй. Ләкин таҙалыҡты һаҡлау һәр кешенең ҡулынан килерлек үҙаллы көндәлек бурыс икәнлеген генә бөтәһе лә аңлап етмәй.**

## ЕРЛӘРГӘ ЛӘ... АҠСА КӘРӘК

**Башҡортостанда мәрхүмдәрҙе ерләү өсөн бүленә торған пособие күләме элекке кимәлгә ҡарағанда 4 тапҡырға арттырыласаҡ.**

Әле яңыраҡ көсөнә ингән "Ерләү эштәре тураһында" республика законының яңы редакцияһында ошондай норма нығытылған. Әйткәндәй, был закон 2009 йылдың 1 ғинуарынан ғәмәлдә тип ҡараласаҡ.

Әгәр элек мәрхүмдең туғандарына, район коэффициентын иҫәпкә алып, иң күп тигәндә 1500 һум аҡса бүленә торған булһа, хәҙер иһә ерләү сығымдарын ҡаплау өсөн 4600 һум күләмендә аҡса бүленәсәк. Бынан тыш, пособие индексацияланасаҡ. Закондың бынан алдағы редакцияһында ундай норма булманы, ә ерләү пособиеһы күләме тиҫтәләрсә йыл үҙгәрешһеҙ ҡала килде.

Мәрхүмдең вафатына ярты йылдан да күберәк ваҡыт үтмәгән хәлдә, мәрхүмдең вафаты хаҡындағы белешмәне күрһәтеп, уның туғандары был пособиены мөрәжәғәт иткән көндә үк ҡулына ала ала.

*ӘЙТӘГҮР!*

**Беренсе сентябрь көнө баш ҡаланың башҡа белем усаҡтары менән бер рәттән, республика интернаттарында ла тәүге ҡыңғырау тауышы яңғыраны. Был уҡыу йорттарына йылдан-йыл уҡырға инергә теләүселәр һанының артыуы республикала ғына түгел, күрше төбәктәрҙә лә интернаттарҙың абруйы юғары булыуын күрһәтә. Нимәһе менән ата-әсәләрҙең иғтибарын йәлеп итә һуң улар? Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты, Республика башҡорт лицей-интернаты һәм Республика иҡтисад лицей-интернатына балаларын уҡырға биреүсе ата-әсәләр был уҡыу йорттары тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша:**

# РУХ ҺӘМ ҮҘАҢ УЯТЫУСЫ...

## уҡыу йорттары

**Рөстәм ӘБДРӘХИМОВ, Силәбе өлкәһе, Төйләгән районы:** Улым тәүҙә Ҡаҙанға уҡырға инергә барғайны, ул унда имтихандар тапшырып йөрөгән саҡта үҙебеҙҙең Өфөлә лә ошондай уҡ белем учреждениеһы юҡмы икән, тип, таныштарға шылтыраттым һәм шул уҡ көндә Өфөгә юлландыҡ. Бында килеп, имтихандарҙы уңышлы тапшырып, Республика башҡорт лицей-интернатына етенсе синыфҡа уҡырға килдек. Күп фәндәрҙе инглиз телендә уҡытасаҡтары оҡшаны. Мин үҙем төҙөүсе булып эшләйем, эш буйынса сит илдәргә сығырға ла тура килә. Тел белмәүҙең ни тиклем ауыр икәнен үҙ елкәмдә татып белгән кеше булараҡ, улымдың лицейҙы тамамлағанда уҡ инглиз телендә иркен аралаша аласағына ҡыуанам. Ир бала өсөн тик малайҙар араһында ғына уҡыу ҙа яҡшы, тип уйлайым, улымды бында уҡырға биреүҙең төп сәбәбе лә ошонда. Ата-әсәләрҙе "интернат" тигән һүҙ, бәлки, ҡурҡыталыр, сөнки беҙ үҫкәндә интернатта етем, ата-әсәһе ҡарай алмаған балалар белем ала торғайны. Ә бөгөн республика интернаттарында һәләтле балалар уҡый, белем биреү юғары кимәлдә, йәшәү шарттары ла яҡшы, уларҙы хәҙер шартлы рәүештә пансионат тип атарға ла булалыр.

**Хәлит ЯРУЛЛИН, Өфө ҡалаһы:** Улым Азамат быйыл 10 синыфҡа уҡырға килде. Үҙем дә ошо 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында белем алдым, шуға күрә улымды ҡайһы мәктәпкә бирергә, тип оҙаҡ баш ватмай, шунда уҡ алдынғы мәктәптәрҙән һаналған яратҡан гимназиямды һайланым. Баланың белеме, кеше булып үҫеүе, шәхес булараҡ формалашыуы унының ниндәй мәктәптә, ниндәй уҡытыусылар ҡулынан белем алыуынан да тора. Был йәһәттән мин гимназия уҡытыусылары, тәрбиәселәре тураһында ғорурланып телгә алыр инем. Үҙ эшен ысын күңелдән башҡарған, балаларҙы яратҡан, изге күңелле уҡытыусылар эшләй бында. Гимназияла уҡытыу кимәленең, тәрбиәнең юғары икәнлеге күренеп тора. Балалар икенсе бында: алдынғы ҡарашлы, төрлө яҡтан үҫешкән, камиллашҡан, үҙҙәре шул тиклем әҙәпле, тәрбиәле. Һәр береһе йылмайып, ололарға сәләм бирә, бер-береһе менән итәғәтле һөйләшә. Уҡытыусылар менән уҡыусыларҙың үҙ-ара мөнәсәбәте һоҡландырғыс: бер-береһен яраталар, хөрмәт итәләр. Ғөмүмән, бар яҡлап та ҡәнәғәтмен, улымдың бында белем алыуына ҡыуанам. Был гимназияны тамамлаған һәр уҡыусы - бөйөк шәхес. Беҙ ҙә улыбыҙҙың ошондай шәхестәр рәтендә булыуын теләр инек.

**Лена ДАУЫТОВА, Ырымбур өлкәһе Гай ҡалаһы:** Мин үҙем Башҡорт дәүләт медицина университетын тамамлағас, балабыҙҙы, һис шикһеҙ, Өфөлә уҡытырбыҙ, тип уйлап йөрөгәйнек. Аллаға шөкөр, теләгебеҙ тормошҡа ашты. Ике туған апайымдың Республика иҡтисад лицей-интернатында уҡып йөрөгән улы был мәктәпте маҡтап һөйләгәс, беҙ бер нимәгә ҡарамай килергә булдыҡ. Белгән булһаҡ, бәлки, иртәрәк тә килер инек, быйыл улыбыҙ 11-се синыфҡа бара. Беҙгә был уҡыу учреждениеһындағы белем биреү системаһы, тәртип, баланың һәләттәрен төрлө яҡлап асыусы саралар үткәрелеүе оҡшаны. Унан бигерәк, улыбыҙҙы башҡорт мөхитендә тәрбиәләнеп, киләсәктә үҙ милләтенең тарихын, телен, мәҙәниәтен яҡшы белгән, үҙ халҡына ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо йөрөткән рухлы, аҡыллы, алдынғы ҡарашлы шәхес итеп күреү ине теләгебеҙ.



## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә дөйөм белем биреү учреждениеларында уҡыған етем һәм ҡараусыһыҙ ҡалған балаларҙың хоҡуҡтарын һәм законлы мәнфәғәттәрен яҡлау саралары тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Бөгөнгө көндә Өфөнөң уҡыу йорттарында 477 етем һәм ҡараусыһыҙ ҡалған балалар уҡый. Шуларҙың 167-һе - төп өфөнөкөләр, ҡалған 310-ы республика райондарынан килеүселәр. Быйыл баш ҡаланың интернаттарынан һәм ҡабул итеүсе ғаиләләрҙән 244 етем һәм ҡараусыһыҙ бала мәктәпте тамамлаған. Уларҙың 55-е - юғары уҡыу йорттарына, 67-һе - урта махсус уҡыу йорттарына, 59-ы профессиональ училищеларға уҡырға ингән, 6 кеше эшкә урынлаштырылған.

✓10 сентябрҙән баш ҡаланы санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү айлығы башлана. Һәр аҙна аҙағына санитар йома, ә 26 сентябрҙә дөйөм ҡала өмәһе үткәреләсәк. Айлыҡ барышында уҡыу йорттары, дауаханалар, предприятиелер һәм ойошмалар биләмәләрен, юлдарҙы, скверҙарҙы, мәҙәниәт һәм ял парктарын, урман парктарын, зыяраттарҙы, йылғалар яр буйҙарын таҙартыу һәм төҙөкләндереү планлаштырыла.

✓12 сентябрҙә "Ҡунаҡһарай" сауҙа-эш комплексында "Уңыш-2009" йәрминкәһе буласаҡ. Унда ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр үҙ продукцияһын һатасаҡ, уларға бындай мөмкинлек бушлай бирелә. Сара комплекс асылыуға ун йыл тулыуға арналасаҡ.

✓Бөгөн һәм иртәгә Т.Күсимов исемендәге "Аҡбуҙат" ипподромында Бөтә Рәсәй Орлов юртаҡтары фестивале үтә. Унда Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 105 юртаҡ ҡатнашасаҡ. Башҡортостан командаһында 47 юртаҡ ҡатнаша.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең Ҡулланыусылар баҙары идаралығында быйылғы кризис йылының ҡыҙыҡлы ғына күҙәтеүҙәре бар. Улар буйынса быйыл, мәҫәлән, баш ҡала халҡы колбасаны һәм икмәкте аҙыраҡ ашай башлаған. Уның ҡарауы, сырҙы күберәк ҡуллана башлағандар, йәғни кризисҡа тиклем өфөләләр айына 70 тонна сыр һатып алһа, әле ул 110 тоннаға барып етә.

*✓ Ҡайһы бер мәктәптәрҙә кемгә дәрестәр етмәй, шул "Башҡортостан мәҙәниәте"нән уҡыта, йәғни был фән бөгөн запас вариантҡа әйләнгән. Уҡыу программаһында бар икән, ул нисек тә булһа уҡытылырға тейеш, йәнәһе.*



БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Үткән аҙнала баш ҡалала уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләре үтте. Яңы уҡыу йылына башланғыс биреүе менән генә түгел, ә эшкә тотонор алдынан кәңәшләшеү, күп проблемаларҙы уртаға һалып хәл итеү урыны булыуы менән дә әһәмиәтле был йыйын уҡытыусылар өсөн. Беҙ августа көн дә тиерлек ойошторолған күп һанлы мәғариф кәңәшмәләренән туған телдәр буйынса директор урынбаҫарҙары һәм "Башҡортостан мәҙәниәте" уҡытыусылары йыйылғанында ҡатнаштыҡ һәм ҡайһы бер фекер төйнәнек.**

# ЯМАНДАН ДА ЯМАН НИ ЯМАН?

## Уҡытыусы битарафлығы яман

Һанай китһәң, бөгөн милли мәғариф өлкәһендә лә уҡытыусыларҙы борсой торған мәсьәләләр бихисап инде ул, тик кәңәшмәләрҙә уларҙы уртаға һалып, ентеклеп тикшереү ғәҙәте генә юҡ. "Мәғариф өлкәһенең реформаларҙан башы сыҡмай, әйҙәгеҙ, ошо хаҡта асыҡтан-асыҡ етешһеҙлектәрҙе телгә алып һөйләшәйек әле", тип мөрәжәғәт ит уҡытыусы кешегә, юҡ, ризалаштырырмын тимә. Ошо кәнәшмә башланыр алдынан да бер нисә уҡытыусы янына килеп, төрлө проблемалар тураһында һөйләшеү башлап ҡараным, тик бушҡа ғына. "Мәктәптә туған телдәрҙе уҡытыу һаҡланған, уҡыу планы буйынса кәрәкле дәреслектәр бар, тағы нимә кәрәк беҙгә?" - тип яуапланы улар. Эйе, һаҡланған, тик быйылға ғына. Шулай уҡ профилгә бүлеп уҡытҡан белем усаҡтарында 10-11 синыфтарҙа дәүләт теле булараҡ башҡорт теле ике дәрес урынына берәү генә ҡалған. Мәктәптәрҙә дәреслектәр етешмәүе тураһында ла ауыҙ күтәреп һүҙ әйтеүсе юҡ. Туған тел уҡытыусыһы, балаларҙа рух, әсә теленә, тыуған еренә һөйөү тәрбиәләүсе уҡытыусы ошондай ҡатмарлы шарттарҙа бөгөнгө көн менән генә йәшәргә түгел, ә кәрәкле урында кәрәкле һүҙен дә әйтә белергә тейеш.

Мәктәптә юғары синыфтарҙа психология уҡығайныҡ. Уҡытыусы бер дәрестә һәр беребеҙгә ҡағыҙҙан ҡырҡылған түңәрәктәр таратып сыҡты ла, уны өҫтәлдең үҙенә оҡшаған еренә һалырға ҡушты. Кемдер ҡулындағы түңәрәген өҫтәлдең уртаһына, кемдер ситенә һалды. Баҡтиһәң, былдай тәжрибә арҙамында уҡытыусыбыҙ синыфтың коллектив буларaҡ ныҡлығын, бер һүҙлелеген тикшергән икән: түңәрәктәр бер-береһенә ни тиклем яҡыныраҡ урынлаша, шул тиклем коллектив дуҫ һәм татыу иҫәпләнә. Ултырыштар залында икешәр-өсәрләп төрлө мөйөштәргә һибелгән туған телдәр буйынса директор урынбаҫарҙарын күреп, ирекһеҙҙән, ошо вағиға иҫемә төштө. Беҙҙең көсөбөҙ берҙәмлектә, бер-беребеҙгә арҙам итеп, ҡулға-ҡул тотоношоп эшләүҙә икәнен тағы ла бер тапҡыр ҡабатлап тороуҙың кәрәге бармы икән һуң? Бөгөн баш ҡаланың 7 районында урынлашҡан 160 мәғариф учреждениеһында 144 туған тел буйынса директор урынбаҫарҙары эшләй. Улар араһында юғары дәрәжәләргә эйә булыусылар ҙа байтаҡ. Ә башҡорт теле уҡытыусылары һаны тағы ла күберәк. Шуларҙың һәр береһе дүрт-биш уҡыусыла ғына булһа ла башҡорт теленә ихтирам тәрбиәләй алһа, хәл күпкә яҡшырыр ине. Шул уҡ ваҡытта "Мин көслө, минә бирешергә ярамай", - тип ҡоро энтузиазм менән күпме эшләргә була? Иртәгәһе көнгә ышанысы ла, яҡлаусы кешеһе лә булмағанлыҡтан, барыһына ла ҡул һелтәп ҡарарға мәжбүр тыған тел уҡытыусыһы бөгөн.

Төбәк компонентына тағы әйләнеп ҡайтҡанда, быйылғы уҡыу йылында уҡыусылар Башҡортостан тарихын да, географияһын да, мәҙәниәтен дә өйрәнәсәк. Тик был фәндәр араһында "Башҡортостан мәҙәниәте" өлкәһендә булған үҙгәрештәр күптәрҙе аптырауға һалды. Милли мәктәптәрҙә "Башҡортостан мәҙәниәте" ("Тормош һабаҡтары") дәресе уҡытыла башлауға быйыл теүәл егерме йыл тулған. Был дәүер эсендә ниндәйҙер тәжрибә лә тупланған, был фән буйынса республика олимпиадалары еңеүселәре лә, фанат-уҡытыусылар ҙа барлыҡҡа килгән. Тик быйылғы уҡыу йылында 2-7-се, 10-сы синыфтарҙа ғына 1-әр сәғәт "Башҡортостан мәҙәниәте" һаҡланып ҡалған. Бөгөн беҙ мәктәпте тамамлаусы уҡыусыны ниндәй итеп күрергә теләйбеҙ? Рухлы, бөтә яҡлап үҫешкән камил шәхес итеп. Ә бит "Башҡортостан мәҙәниәте" уҡыусы күңелендә рух тәрбиәләүсе иң төп дәрес һанала.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быныһы мәсьәләнең башы ғына. Ә хәҙер уҡыу йорттарында был фәндә кем уҡытыуына күҙ һалайыҡ. Барыһында ла түгел, әлбиттә, әммә ҡайһы бер мәктәптәрҙә кемгә дәрестәр етмәй, шул "Башҡортостан мәҙәниәте"нән уҡыта, йәғни был фән бөгөн запас вариантҡа әйләнгән. Уҡыу программаһында бар икән, ул нисек тә булһа уҡытылырға тейеш, йәнәһе. Был дәрес урынына синыф сәғәте үткәреләме, әллә башҡа фәнме - быныһы мөһим түгел. Быны "Башҡортостан мәҙәниәте" секцияһына йыйылған уҡытыусыларҙың күбеһенең ҡулындағы "Синыф сәғәте темалары" тип аталған әсбаптар асыҡ дәлилләп тора ине. 2007 йылдан мәктәптә "Башҡорт мәҙәниәте"н бер уҡытыусы уҡытырға тейеш, тигән положение ла бар, йыл һайын вуздар был фән буйынса белгестәр ҙә әҙерләп сығара, ә мәктәптә балаларға белем бирергә кеше юҡ. Тимәк, дәүләт тарафынан уҡыу программаһына индерелгән "Башҡортостан мәҙәниәте" фәненә мөнәсәбәт йәмғиәт башланғысындағы факультатив дәрес кимәлендә генә. Ғәйепләне эҙләп, йыраҡ йөрөргә кәрәкмәй: бында тағы ла үҙебеҙҙең вайымһыҙлыҡ ғәйепле.

**Шулай итеп...**

**Үткән уҡыу йылына ниндәйҙер һандар килтереп йомғаҡ яһауға, доклад тыңлап ҡайтыуға ғына тороп ҡалмаһын август кәңәшмәһе. Бында үҙен борсоған һорауға яуап алып, проблемаларҙы уртаға һалып кәңәшләшеп, яңы уҡыу йылын тыныс күңел менән башлаһын ине уҡытыусы. "Был проблема беҙҙең кимәлдә хәл ителмәй", - тип кенә ҡул һелтәп ҡуйыу аҙаҡтан милләтебеҙ өсөн күңелһеҙ эҙемтәләргә килтереүе ихтималлығын да онотмайыҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ЯҠШЫ ХӘБӘР

# БАЛАЛАР ҘА...

**РФ Мәғариф һәм фән министрлығы дәүләт балалар баҡсаларында урын ала алмаған ата-әсәләргә ярҙамға килергә ҡарар итте.**

Сентябрь айынан кескәйҙәрен шәхси балалар баҡсаһына биргән ата-әсәләргә улар түләгән аҡсаның бер өлөшө кире ҡайтарыласаҡ. Былдай ҡарар хәҙер "Мәғариф тураһында"ғы закон менән нығытылған. Элек иһә дәүләт былдай сығымдарҙы балалар дәүләт йәки муниципаль баҡсаға йөрөгән осраҡта ғына үҙ өҫтөнә ала ине.

- Был сара ата-әсәләрҙе социаль яҡлау һәм балаларға мәктәпкәсә мәғариф мөмкинлектәре биреү йөҙөнән сығып эшләнә, - тип аңлатма бирә РФ Мәғариф һәм фән министрлығының Мәғарифта дәүләт сәйәсәте департаменты директоры урынбаҫары Елена Низиенко.

Белгестәр был сараның ғаилә балалар баҡсалары үҫешенә булышлыҡ итәсәгенә һәм көрсөк мәлендә эшһеҙ ҡалған ата-әсәләргә бер ни тиклем ярҙам буласағына ышана.

Дәүләт беренсе бала өсөн балалар баҡсаһына түләнгән сумманың 20 процентын, икенсе бала өсөн - 50 процентын һәм өсөнсө бала өсөн 70 процентын кире ҡайтарып бирә.

Был аҡсаны алыу өсөн мәғариф идаралығы йәки социаль яҡлау органдарына ғариза, баланы мәктәпкәсә учреждениеға йөрөткән өсөн түләү документтарының күсермәләрен һәм балаларҙың тыуған йылдары күрһәтелгән документтарын килтерергә кәрәк.

# ...ӨЛКӘНДӘР ҘӘ ХӘСТӘРЛӘНӘ

**Билдәле булыуынса, 1 августа хеҙмәт пенсияһының страховка өлөшө 7,5 процентҡа артты. Пенсияның уртаса күләме 5536 һумға тиклем күтәрелде.**

Ә 1 декабрҙән хеҙмәт пенсияһының нигеҙ өлөшө 31,4 процентҡа артасаҡ. Йыл ахырына уртаса пенсия күләме - 6280 һум, ә социаль пенсия 4294 һумға етәсәк. Был пенсионерҙың йәшәү минимумы кимәленән юғарыраҡ. Әйткәндәй, 1 августан пенсияларҙы ҡайтанан иҫәпләү автоматик рәүештә башҡарылды, был хаҡта ғариза яҙып тороу кәрәкмәне.

Киләһе йыл да пенсияның артыуы дауам итәсәк: апрелдә һәм июлдә. Һөҙөмтәлә хеҙмәт пенсияһы 46 процентҡа артасаҡ һәм 8408 һумға етәсәк. Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм һуғышта ҡатнашыусыларҙың пенсияһы 4000-гә артып, уларҙың килеме 20 мendән артып китәсәк.

Киләһе йылдан шулай уҡ 2002 йылға тиклем тәғәйенләнгән пенсия хоҡуҡтарын ҡайтанан баһалау көтөлә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: пенсия хоҡуҡтары - ул пенсияның страховка өлөшөн булдырыусы күрһәткес. 2002 йылға тиклемге осорҙа хеҙмәт стажы булған пенсионерҙар 2002 йылғы пенсия реформаһы башланғансы эшләнеп өлгөргән пенсия хоҡуҡтары күләменә 10 процент өҫтәмә һәм шуға ҡушып, 1991 йылға тиклемге совет стажының һәр йылына 1-әр процент өҫтәмә индексация аласаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Эсәр һыу - иң ҙур дауа

Битте һәм тәнде йыйырсыҡтар баҫыу, тире кибеү, организмға тоҙ ултырыу һыу етешмәүҙән килә. Оҙаҡ ауырып, түшәккә йығылған кешенең тәне тишелеү ҙә һыу етешмәүҙән була. Шуға күрә һәр кем көнөнә 2,5-3,5 л шыйыҡса ҡабул итергә тейеш. Эске килмәнә лә көнөнә 7-8 стакан һыу эсеүҙе ҡағиҙә итеп алырға кәрәк. Ул саҡта биткә әллә ниндәй битлектәр яһап яфаланмайһың да, ваҡыт та әрәм итмәйһен. Түшәктә оҙаҡ ятҡан сирлегә лә шул 2,5-3,5 л һыуҙы көн дә эсерергә кәрәк, ҙур йотом менән эсә алмаһа, нәҙек көпшә аша йотторағың.

### Бөйөрә ауыртыусыларға

Әле баҡсаларҙа помидор һәм кәбеҫтә өлгөрҙө. Ярты стакан кәбеҫтә һыуына яңы ғына һығып алынған шул уҡ кимәлдәге помидор һыуын ҡушып, ашағас, көнөнә 3 мәртәбә 2-3 ҡалаҡлап эсергә. Бик килешә.

### Ҡул-аяҡ ойоһа

Бының менән күп кеше яфалана. Ойоуҙы дауалау өсөн: **а)** дегәнәк япрағының аҫҡы яғын 10-15 көн буйы ойоған ҡул-аяҡҡа бәйләргә. **б)** көн дә ҡайын бөрөһө йәки япрағынан ярты стакан төнәтмә эсергә генә кәрәк. **в)** ойоған урындарға дөрөҫ итеп массаж яһауҙы ла онотмағыҙ.

Дегәнәк япрағын ваҡламай ғына ҡышҡылыҡҡа киптереп алығыҙ, эсә һыуға тығып алһаң, "йәш" япраҡ кеүек буласаҡ.

### Ирәүән барҙа ир үлмәҫ

Был мәҡәл борондан әйтелә. Ирәүән баҡсала ла үҫә. Беҙ уның япрағының һабаҡтарын ҡымыҙлыҡ кеүек ашайбыҙ, ҡайнатма яһайбыҙ, япрағын йомортҡа менән болғап, бәлеш тә бешерәбеҙ. Дауалау көсө лә бар. Эсәктәр ауыртһа, эс боҙолоу осрағында тамыры ҡулланыла. Тамырын көҙ ҡаҙып алып йыуаһың да, ваҡлап, киптерәһең (алдан ҡояшта бәжетәһең әле). - 0,1 гр тамыр әселеге түбән гастриттан, эс китеүҙән ҡотҡара.

- 0,2 гр тамыр үт ҡыуҙырыуҙа файҙаланыла.
- 2 гр тамыр эс ҡатыуҙан ҡулланыла.
- геммором булғандарға "йыуыныу" өсөн кәрәк.
- эсәк ауыртҡанда 10 гр мәтрүшкәгә 200 мл ҡайнар һыу ҡойола, төнәтелә һәм көнөнә өс мәртәбә берәр ҡалаҡлап эсelә. Бик файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Атайым махсус рәүештә мине тәрбиәләп ултырманы. Ул таңдан эшкә сығып китеп, мин йоҡлап киткәс кенә өйгә ҡайта ине. Уның миңә бар биргән тәрбиәһе - үҙенең шәхси өлгөһө булды. Беҙ ул саҡта барлыҡ малайҙар ҙа атайҙарыбыҙға оҡшарға тырыша торғайныҡ.*






## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ата һәм әсә

• Хөрмәтле балалар! Эшһөйәр, изгелекле, яҡшы күңелле кешеләр һәр ваҡыт хөрмәтле була һәм яҡын күренә, быны иһә үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ. Ата-әсәгеҙ һеҙгә ҡарата иң ауыр һәм мәшәҡәтле хеҙмәттәрҙе башҡарған һәм һаман да үтәй. Һәр ваҡыт ҡайғы-ғыҙҙы уртаҡлашып, бәхетегеҙ өсөн тырыша, һеҙҙең өсөн Аллаһы Тәғәләгә ялбара һәм доға ҡыла. Шуның өсөн мөмкин тиклем уларҙың хеҙмәттәренә ҡаршылыҡ күрһәтмәгеҙ, мәшәҡәттәренең хаҡын ҡайтарыу мөмкин булмаһа ла, уларға ихласлыҡ менән хеҙмәт итеүсе һәм хөрмәт күрһәтеүсе булығыҙ! Бигерәк тә Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәре улар менән матур һөйләшеүҙе васыят иткән. Рәсүлуллаһ Әкрәм әфәндебеҙ, саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм хәҙрәттәре: "Ата-әсәләрен риза итеүсе балаларҙан Аллаһы Тәғәлә лә риза булыр",- тигән.

• Киләсәктә хөрмәтле һәм файҙалы кеше булыуығыҙҙы ата-әсәгеҙ һәр ваҡыт өмөт итә һәм Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәренән һорай. Инде һеҙ бындай изгелектәргә ҡаршы яуызлыҡ итеүсе булмағыҙ. Шулай уҡ уларҙың нәсихәттәрен ҡурҡып һәм өркөп түгел, ә мөхәббәт һәм ихласлыҡ менән тотоғоҙ. Сөнки улар был донъя хәлен ҙур тәжрибәләре менән яҡшы аңлай һәм һеҙ белмәгән күп серҙәрҙе белә.

• Кешенең итәғәтлелеге (буйһоноусы) уның яҡшы күңелле булыуын күрһәтә. Һеҙгә лә иң яҡын кешеләр - ата-әсәгеҙ. Шуның өсөн уларға һәр ваҡыт итәғәтле булығыҙ. Ғәмәл һәм һүҙҙә уларға ҡаршы килмәгеҙ. Ошо сәбәптән уларҙың күңеленә рәхәт булыр, үҙегеҙҙең күңелегеҙ һәм тормошоғоҙ ҙа ғүзәл булыр.

• Ата-әсәгеҙ алдында бик әҙәпле булығыҙ, уларҙың һүҙҙәрен яҡшы тотоғоҙ, өйрәткәндәрен аңлағыҙ, улар менән артыҡ ҡысҡырмай, әҙәпле, асыҡ һөйләшегеҙ. Улар аяҡ өҫтөндә торған ваҡытта һеҙ ҙә ултырмағыҙ!

• Баһадирлыҡ - әҙәм балаларында хөрмәтле бер сифат. Ололар мәжлесендә булып, уларҙың хикмәтле һүҙҙәрен ишетеү аҡылды арттыра һәм ғилемде күбәйтә. Хатта кесе балаларҙы бөйөк кешеләр мәртәбәһенә яҡынайта. Шуның өсөн йәрәкһеҙ балалар кеүек, атайығыҙ мәжлесендә ултырыуҙан ҡурҡмағыҙ һәм белмәгән, аңламаған нәмәләрегеҙҙе уларҙан һорағыҙ, һәр нәмәнең асылын белергә тырышығыҙ.

• Йөрөгән ваҡытта атайығыҙ осраһа, уға һәм уның менән бергә булғандарға сәләм биреп, әмерҙәр көтөп торогоҙ! Әгәр ултырған ваҡытта килһә, асыҡ йөҙ менән аяҡ өҫтө торогоҙ!

(Дауамы бар).

*ИР-АЗАМАТ*

# ИР ХОЛОҠЛО БАЛАЛАРҘЫ...

## атай абруйы һәм образы ғына тәрбиәләй

**Үткән аҙнала редакциябыҙға гәзитебеҙҙең тоғро дуҫы Ғафури районының Сәйетбаба ауылы аҡһаҡалы, оҙайлы йылдар йәмәғәтселек эштәре алып барыусы тынғыһыҙ эҙәрмән, "Почет билдәһе" орденына, "РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән исемгә лайыҡ алдынғы ҡарашлы педагог, ауыл мәсетенең имам-хатибы Ғиндулла Шириаздан улы ШӘЙӘХМӘТОВ килеп инде. Ул тыуған ауылында таңдан тороп сәхәр ашаған да, ураҙала булған көйө баш ҡалаға автобус менән килеп еткән. Кискә ауылына ҡайтып, ауыҙ асырға уның ниәте. 79 йәшлек аҡһаҡалдың ошондай фиҙаҡәрлеге беҙҙе таң ҡалдырҙы.**

**-Олатай, сәфәр йөрөгәндә ураҙа өҙөләп торһа ла була. Һеҙгә ошо мәлдә шундай араны ураҙала көйө үтеү ҡыйын түгелме? - тип һораныҡ унан.**

**-Ураҙаны күптәнән тотам, ул бит кешене сабырлыҡҡа өйрәтә, характерыңды ныҡыта. Кешегә асыуланһаң, насар уй уйлаһаң, быны өсөн дә ҙур энергия талап ителә. Шуға күрә асыуланмаҫҡа, насар уй уйламаҫҡа ла өйрәнәһең ураҙа ваҡытында, - тип яуап бирҙе олатай.**

**Һөйләшеп киттек. Ураҙаның файҙаһы хаҡында һүҙҙәрен йомғаҡлап, Ғиндулла олатай шулай тине: "Ураҙа тотҡан ир-ат ысын ир-азамат булып һанала ала. Сөнки тап ошо шарттарҙа уларҙа ысын ир-ат холҡо тәрбиәләнә..." Әңгәмәбеҙ яңы йүнәлеш алды һәм артабан инде ҡунағыбыҙ ир-ат тәрбиәһе хаҡында бер-ике кәлимә фекерен әйтте.**

### Ир-ат тәрбиәсе

Мин мәктәптә ир уҡытыусылар күп саҡта уҡыным. Институтта уҡығанда ла ир уҡытыусылар күп ине әле. Хәҙер ҡатын-ҡыҙ тәрбиәселәр, уҡытыусылар күбәйҙе. Быны йәмғиәт өсөн кире һөҙөмтәһе - ҡатын-ҡыҙ холоҡло ирҙәр барлыҡҡа килеүе. Ирҙәр, бигерәк тә етәксе ирҙәр хәҙер һүҙ күтәрмәй, тиҙ генә үҫегеп бара. Үсегеү, ғәмүмән, ир-аттың холҡо түгел. Яңыраҡ бер етәксе ир-уҙаманға эшендәге етешһеҙлектәр хаҡында әйткәйнем, үҙемә бәйләнеп алды ла китте.

Ир характерын тик ирҙәр генә тәрбиәләй ала, нисек тырышһа ла, быны ҡатын-ҡыҙ тәрбиәсе булдыра алмай. Шуға күрә, ҡатын-ҡыҙҙар менән ир-аттарҙы айырым уҡытырға кәрәк, тигән тәҡдимде тулыһынса яҡлайым. Ул сағында был ике зат вәкилдәре бер-берененең холҡо-белерҙәр, бер-берененә таныҡ булырҙар ине. Уларҙы бергә ҡушыу арҡаһында хәҙер ҡатын-ҡыҙ холҡо менән ир-ат холҡо ныҡ буталды, уларҙы бер-береһенән айырыу мөмкин булмай башланы. Революцияға тиклем Рәсәйҙә Бестужев уҡыу йорттарында айырым уҡыттандар. Һунынан унда белем алған декабрист ирҙәрҙе ҡаторгаға ебәргәндә арттарынан ир ҡәҙерен белгән ҡатындары ла эйәреп киткән. Миненсә, ир ҡәҙерен белгән ҡатындар, ҡатын ҡәҙерен белгән ирҙәр был ике енес вәкилдәрен айырым уҡытып-тәрбиәләгәндә генә формалаша. Киреһенсә булған осраҡта, көн һүҙымында бергә булған был ике зат вәкилдәре бер-береһен ҡәҙерләү түгел, бер-береһенән ялҡып, хатта күрә алмаҫтай хәлгә лә барып етә. Мин хәҙер шундай күренештәрҙең дә шаһиты булғаным бар: тәртипһеҙ малайҙар йүгереп барып ҡыҙҙарҙың өҫтөнә атлана. Был нимә хаҡында һөйләй, тип уйлайһығыҙ? Эйе, имәнес күренеш: асылда ир-ат енесе менән ҡатын-ҡыҙ енесе икеһе бергә ҡушыла, уларҙы, функциональ билдәләренә ҡарамаған, айырыу ҙа мөмкин түгел.

Ир-аттың абруйы төшөүенең бер сәбәбе - уларҙы ҡатын-ҡыҙ менән бер рәткә ҡуйыуҙан башланғандыр, тием. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан фән кандидаттары күбәйҙе, ирҙәр һаны кәмене. Был хәлде мин яҡшы күренеш тип атамаҫ инем.

### Атайым тәрбиәһе

Атайым Шириаздан (ғәрәп исеме, башҡортса Алла арыҫланы тигәнде аңлата) минә бер ваҡытта ла ауыр һүҙ әйтмәне. Уның кешегә ҡул күтәреп һуҡҡанын да, асыуланғанын да тойманым, күрмәнем. Атайым ҡаты холоҡло булмаһа ла, ғәҙел ине. Үгәй әсәйебеҙҙән беҙгә ҡарата ғәҙеллек талап итте. Ул бик егәрле кеше, эшендә ударник булды. Бик оҫта, бил бирмәҫ көрәшсе ине, намаҙ ҙа уҡыны. Ул беҙҙең ауылдың арҙаҡлы шәхесе Сабир хәҙрәттең мәзине булып та торған. Атайын аҙанды бик матур әйтә ине, тиҙәр уның тауышын иҫләүселәр. Империалистик һуғышта ҡатнашты, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында йәше үтеү арҡаһында хеҙмәт армияһына алдылар үҙен. Балта оҫтаһы булараҡ, улар һуғыш өсөн кәрәк-яраҡ эшләгән. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ла ҡулынан балтаһын төшөрмәне.

Атайым махсус рәүештә мине тәрбиәләп ултырманы. Дөрөҫөн әйткәндә, ул таңдан эшкә сығып китеп, мин йоҡлап киткәс кенә өйгә ҡайтҡас, беҙ һирәк күрешә инек. Уның миңә бар биргән тәрбиәһе - үҙенең шәхси өлгөһө булды. Беҙ ул саҡта барлыҡ малайҙар ҙа атайҙарыбыҙға оҡшарға тырыша торғайныҡ. Һәр ҡайныбыҙҙың күҙ алдыбыҙҙа уларҙың күркәм һыны, тере образы торҙо. Әсәйҙәребеҙ беҙҙе ана шул образ ярҙамында һоҡландырып-маҡтап, кәрәк саҡта ҡурҡытып-өркөтөп тәрбиәләне лә инде. Миненсә, башҡорттарҙа ир-ат тәрбиәләүҙә атайҙың үҙе түгел, күберәк уның образы ҡатнашалыр. Элекке замандарҙа атайҙарҙың күп ваҡыты яуҙа, походта, совет осоронда хеҙмәттә үтте бит.

Үҙемдең Илдар улымды тәрбиәләүгә килгәндә, мин оҙаҡ йылдар мәктәп директоры булып эшләгәс, минең дә уны махсус рәүештә тәрбиәләп ултырырға, иркәләп-наҙлап торорға ваҡытым булманы. Ул да минең кеүек, күберәк әсәһе менән ҡала ине. Әммә мин улым менән ҡәнәғәтмен һәм уға дөрөҫ тәрбиә биргәнбеҙҙер, тип уйлайым.

### Үҙаллылыҡ биреүҙең әһәмиәте

Күп кенә ата-әсәләр ир-ат тәрбиәләүҙә улар менән һәр саҡ бергә булыу, туҡтауһыҙ "тегене ярамай, быны ярамай", тип әйтеп, тыйып, әпәүләп ултырыу тип уйлап, ҙур хата ебәрә. Миңә атайым нисек итеп үҙаллылыҡ бирһә, мин дә Илдар улыма үҙаллы эш итеү мөмкинлеге бирҙем. Һөҙөмтәлә улым үҙенең төп рәссамлыҡ шөғөлө, уҡытыусы һөнәренән тыш, бына тиған әүҙем йәмәғәтсе лә булып үҫеп етте. Атайың менән маҡтанма, улың менән маҡтан, тип әйтәләр бит. Улымдың башҡорт яугирҙәренең данын тергеҙеү буйынса башлаған һәм алып барған эштәре үҙебеҙҙең республикала ғына түгел, сит илдәрҙә лә билдәле. Уның иждимағи аңы көслө. Үҙаллылыҡ биреп үҫтергәс, ниндәй генә ауыр хәл-ситуациялар булмаһын, ул бер ваҡытта ла юғалып ҡалмай, һәр ваҡыт үҙенең һүҙен һүҙ итә белә. Яңыраҡ Бөйөк Ватан һуғышының легендар батыры генерал Шаймуратов эҙҙәре буйлап, Украинала йөрөп ҡайттылар. Теге яҡҡа сыҡҡан ваҡытта паспортындағы фотоның срогы үтеү арҡаһында уны таможнянан үткәрмәҫкә маташҡандар. Улым юғалып ҡалмаған, шундағы хеҙмәткәрҙәргә Шаймуратов генералдың Украинаны азат итеүҙәге батырлыҡтары хаҡында бәйән ҡылған һәм украин милләтле хеҙмәткәрҙәр уны үткәрергә мәжбүр булған.

Мин, мәҫәлән, ғүмерем буйына кеше ҡушҡанды эшләмәнем, үҙем белгәнде эшләнем. Әле бына Ҡаранйылғала мәсет төҙөнөм, берәүҙән дә һорап торманым. Кеше был донъяла берәүгә лә ауырлыҡ һалырға тейеш түгел. Әйтәйек, бер йәш башҡорт егете һыра эсә, тәмәке тарта икән, ти. Бының ауырлығы бөтә башҡорт халҡы иңенә төшә. Ни өсөн тигәндә, эскән һәм тартҡан ул егеттең ғүмере ҡыҫҡара. Ул ваҡытынан алда үлә, тыуғандары ҡайғыра, балалары етем ҡала һ.б. Иң мөһиме: уның ғүмере ҡыҫҡарғас, милләттең дә ғүмере ҡыҫҡара, сөнки ул ошо милләттең вәкиле һәм уның ғүмеренең оҙонлоғо милләт ғүмере оҙонлоғоноң бер өлөшө.

### Әпәүләү касафаты

Хәҙер типһә тимер өҙөрлөк ирегеттәребеҙҙән өйләнмәй йөрөгәндәренең күбеһе илле йәште үтеп китте. Быйна был күренеш беҙҙең милләттә бығаса бер ҡасан да булмаған. Күптәр бында элекке колхоз-совхоздарҙың емерелеүенә бәйле, эш юҡлыҡты, ҡыҙҙарҙың ҡалаға китеп бөтөүен сәбәп итеп килтерергә тырыша. Элек колхоз-созхоздар булмағанда ла йәшәгәндәр, өйләнгәндәр, донъя көткәндәр, итәк тултырып, бала үҫтергәндәр. Миненсә, бында ла шул уҡ үҙаллылыҡ мәсьәләһе күренеше сағыла. Нимә һуң ул өйләнеү? Иң беренсе нәүбәттә, үҙ донъяңды ҡороу, балалар үҫтереү, һәр йәһәттән дә үҙаллылыҡҡа өлгәшеү. Хәҙер килеп, өйләнмәй йөрөгән егеттәргә килһәк, уларҙың ғаиләһендә алған тәрбиәһен иҫәбеҙгә төшөрһәк, күбеһе бала саҡтан әпәүләнеп үҫеүселәр. Уларҙа үҙаллылыҡ тойғоһо бөтөнләй юҡ. Ә кемдә үҙаллылыҡ тойғоһо булмай? Үҙаллы фекер йөрөтә белмәүсе кешелә. Ошонан сығып ҡараһаҡ, тимәк, өйләнмәй йөрөгән егеттәр проблемаһы ла туранан-тура тәрбиәгә барып тоташа.

Дини тәғлимәт буйынса, өйләнмәй йөрөгән егет һәм кейәүгә сыҡмаған ҡыҙ иң боҙоҡ әҙәмдәрҙән һанала һәм Аллаһы Тәғәләнең уларға рәхмәте булмай. Аллаһы Тәғәлә беҙҙе үрсер, ишәйер, күбәйер өсөн яралтҡан. Хәҙер балаларҙың аҙ тыуыуын тормоштоң насар булыуы менән бәйләп аңлатырға тырышалар. Мин киреһенсә уйлайым: хәҙер өҫтәлдәр һый менән һығылып тора һәм балалар әҙерәк тыуа. Өйҙәрҙә лә хәҙер ҙур итеп һалалар, әммә ул йортта балалар аҙ булғас, уның ҡото юҡ.

**Шулай итеп:**

**Сәхәр менән ифтар араһында Сәйетбабанан Өфөгә килеп, ана ниндәй сауаплы эш башҡарып китте Ғиндулла олатай. Уның ир-ат тәрбиәләү хаҡындағы был фекерҙәре күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятыр, һәр хәлдә, улар уҡыусыларыбыҙ күңелендә эҙһеҙ үтмәҫ, тип ышанабыҙ.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

*ДИНЕБЕҘҘӘ - КӨНӨБӨҘ*

# ҠӘБЕР ЯНЫНДА...

## күңел асма, доға ҡыл

**Беҙҙең Башҡортостаныбыҙ әүлиәләр иле булғаны күптәргә билдәле. Динһеҙлек заманында бындай кешеләр тураһында һөйләргә лә, иҫкә алырға ла һәм улар тураһында яҙырға ла ярамаған. Шул сәбәпле, әүлиәләр, изге кешеләр тураһында мәғлүмәттәр йылдан-йыл кәмегән. Тап шуға ла беҙҙең дәүер кешеләренең рухи ғилеме аҙ, күптәребеҙ әүлиәләр тураһында бөтөнләй белмәй. Бары тик һуңғы йылдарҙа ғына әүлиәләр тарихы менән ҡыҙыҡһынып, уларҙың рухына зыярат ҡыла башланылар.**

Учалы, Ҡыйғы, Мәсетле, Баймаҡ, Хәйбулла һәм башҡа район төбәктәрендә бик күп әүлиәләр йәшәгәне билдәле. Мәҫәлән, Ҡыйғы районының Арыҫлан, Абдразаҡ, Сирбай ауылдарында Ҡара Сурый әүлиә йәшәгәне оло быуын кешеләре хәтерендә һаҡлана. Уларҙың һөйләгәненән шуныһы иҫтә ҡалған: "Ҡара Сурый әүлиә үлде, ҡәбере ҡаҙылды", - тип, бер кеше Абдразаҡ ауылы халҡына килеп әйтә лә, үҙе шунда уҡ юҡ була (Быны, ысынында иһә, кеше түгел, ә фәрештә килеп, халыҡты иҫкәртеп киткәндер, тип фаразларға кәрәктер). Кешеләр барһа, ысынлап та, әүлиә үлгән, эргәһендә ҡәбере ҡаҙылған була. Ҡара Сурый әүлиә ошо ҡәбергә ерләнгән һәм бөгөнгө көнгә тиклем Абдразаҡ ауылы эргәһендә, йылға янындағы ҡалҡыулыҡта таш менән уратып алынған ҡәбере һәйбәт һаҡланып ҡалған, тик уның өҫтөнә үҫкән ағастар ғына ҡартайған.

Мәсетле районы Дыуан-Мәсетле ауылындаИсрафил әүлиәнең ҡәбере бар. Әүлиә үҙе иҫән сағында уны күреп, үҙебеҙҙең өйөбөҙгә ҡунаҡҡа алып ҡайтҡанымды яҡшы хәтерләйем. Уның Башҡортостандағы үҙе күргән, белгән башҡа әүлиәләр тураһында һөйләгәне лә һаман иҫтә һаҡлана. Шулай уҡ Учалы районы Шәрип ауылында тыуған әүлиә Зәйнулла ишандың Силәбе өлкәһе Троицк ҡалаһында, Ғатаулла әүлиәнең Хәйбулла районы Вәлит ауылында, әүлиәләр Абдулла һәм Әнүәр ишандың Баймаҡ районы Муллаҡай ауылында ерләнеүен беләбеҙ. Тағы ла Сибай менән Баймаҡ ҡалалары араһында Манһыр ауылы булған. Бөгөн унда бары тик өс кенә өй ҡалған. Беҙҙең заман кешеһе булған Мөжәүир хәҙрәт ғүмер буйы Манһыр ауылында йәшәп, 91 йәшенә етеп, 1967 йылда ошо ауыл зыяратында ерләнгән.

Әйткәндәй, үҙенең баһалап бөткөһөҙ ижади хеҙмәте аша Мөжәүир хәҙрәт тураһындағы иҫтәлектәрҙе халыҡҡа ҡайтарғаны өсөн Лира Яҡшыбаеваға барлыҡ дини ҡәрҙәштәребеҙ исеменән оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Башҡа яҙыусылар, журналистар ҙа әүлиәләр, изге кешеләр тураһында яҙып, уларҙың бөйөклөгөн, данын, дәрәжәһен халыҡҡа еткерһә, ҡалай сауаплы ижади ғәмәл башҡарыр инеләр.

Әүлиәләр ҡәберенә зыярат ҡылыу әҙәбе, йәғни шарттары тураһында ла яҙып үтәйем әле: тәһәрәтле бул; зыяратҡа ингәс тә ҡәбер эйәләренә сәләм бир; әүлиә ҡәберенә еткәнсе зекер әйтеп бар; әүлиә ҡәберенә еткәс, сәләм бир: "Әссәләмәғәләйкүм тәхийәтән миннәиләйкүм"; ҡәбер янында әүлиәнең аяғы яғында баҫып торорға һәм шул килеш берәр тапҡыр "Фатиха", "Ихлас" сүрәләрен уҡырға ("Ихлас" сүрәһен ете ҡабат уҡырға ла мөмкин), унан һуң ултырып, тағы ла Ҡөрьәндән иң кәмендә ун аят уҡырға; Ҡөрьән сүрәләрен һәр кем үҙе уҡый, ҡысҡырып уҡымаҫҡа ла мөмкин; сүрәләрҙе уҡығас, һәр кем әүлиә рухы өсөн, үҙе, ғаиләһе, мосолмандар (тереләр һәм әхирәткә күскәндәре) өсөн доға ҡыла; әүлиәнең ҡәберенә килгән кеше әүлиәнән йәки ҡәберҙән был донъя өсөн дә, әхирәт өсөн дә бер нәмә лә өмөт итергә тейеш түгел. Әүлиәнең ҡәберенә Аллаһы Тәғәләнең ризалығын алыу өсөн генә килергә кәрәк; әүлиәнең ҡәберенә килеүҙең кеше өсөн ҙур сауабы бар, был кешегә ыңғай тәьҫир итә (ыңғай энергия бирә); ҡәбер янында Аллаһы Тәғәләнән үҙеңдең гонаһтарыңды ярлыҡауҙы һорарға һәм йөҙ тапҡыр "Әстәғафируллаһ", тип әйтергә мөмкин; ҡәбер янында үҙеңде ғилемле, белемле һәм аҡыллы кеше, тип иҫәпләмә; үҙеңдең ниндәйҙер өҫтөнлөктәрең бар, тип асыҡлама; тере әүлиәләрҙе һәм әхирәткә күскән әүлиәләрҙе бер тигеҙ итеп хөрмәтлә, береһен икенсеһенән кәмһетеп ҡарама; ерләнгән әүлиәнең мөмкин тиклем күберәк яҡшы яҡтарын иҫкә алыу кәрәк; әүлиәнең ҡәберенә зыярат ҡылыу ниәте менән юлда барғанда һәм ҡайтҡанда осраған ҡыйынлыҡтарҙы Аллаһы Тәғәләнең бүләге итеп ҡабул ит; әүлиә ҡәберенә зыярат ҡылыу аҙағында, ҡәбер янынан китер алдынан, аяҡ өҫтө баҫып "Фатиха" һәм "Ихлас" сүрәләрен уҡыйҙар һәм хәйерле доға ҡылалар.

Тыйыла: иҫтәлек өсөн ҡәбер янында фотоға төшөрөргә ярамай, ләкин ҡәберҙе генә фотоға төшөрөргә мөмкин; әүлиәнең ҡәберенә һуҡмаҡ буйлап барғанда башҡа ҡәберҙәрҙе тапауҙан һаҡланырға кәрәк; ҡәбер янында байрам итеү, күңел асыу тәртиптәре булырға тейеш түгел;

ҡәберҙәргә аҙнаның теләһә ҡайһы көнөндә лә зыярат ҡылыу мөмкин, ләкин йома көндө зыярат ҡылыу бигерәк тә яҡшы ғәмәл һанала, сауабы күберәк була.

**Исмәғил хәҙрәт ХӘКИМ.**
**Учалы ҡалаһы.**

### ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫНДА НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ (дауамы)

| Сентябрь | Сәхәр ашап бөткән ваҡыт | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу. Аҡшам намаҙы | Йәстү, тәрәүех намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5, шәмбе | 05.30 | 06.00 | 14.30 | 19.29 | 20.59 | 22.29 |
| 6, йәкшәмбе | 05.32 | 06.02 | 14.30 | 19.26 | 20.56 | 22.27 |
| 7, дүшәмбе | 05.34 | 06.04 | 14.30 | 19.24 | 20.54 | 22.24 |
| 8, шишәмбе | 05.36 | 06.06 | 14.30 | 19.21 | 20.51 | 22.22 |
| 9, шаршамбы | 05.38 | 06.08 | 14.30 | 19.19 | 20.49 | 22.19 |
| 10, кесе йома | 05.39 | 06.09 | 14.30 | 19.16 | 20.46 | 22.17 |
| 11, йома | 05.41 | 06.11 | 14.30 | 19.13 | 20.43 | 22.14 |
| 12, шәмбе | 05.43 | 06.13 | 14.30 | 19.11 | 20.41 | 22.12 |
| 13, йәкшәмбе | 05.45 | 06.15 | 14.30 | 19.08 | 20.38 | 22.09 |
| 14, дүшәмбе | 05.47 | 06.17 | 14.30 | 19.06 | 20.36 | 22.07 |
| 15, шишәмбе | 05.49 | 06.19 | 14.30 | 19.03 | 20.33 | 22.04 |
| 16, шаршамбы | 05.51 | 06.21 | 14.30 | 19.01 | 20.31 | 22.01 |
| 17, кесе йома | 05.52 | 06.22 | 14.30 | 18.58 | 20.28 | 21.59 |
| 18, йома | 05.54 | 06.24 | 14.30 | 18.56 | 20.26 | 21.56 |
| 19, шәмбе | 05.56 | 06.26 | 14.30 | 18.53 | 20.23 | 21.54 |

*ШАҢДАУ*

# ШӘХЕСТӘР ИСЕМЕ МЕНӘН...

## тарих тергеҙелә

**Ғатаулла ишан тураһындағы тарихнамәне уҡып сыҡҡас, оло тулҡынланыу, тетрәнеү кисерҙем. Мәҡәлә авторына - Сәлмән Ярмуллинға оло рәхмәтемде еткерәм. Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзите хеҙмәткәрҙәренә хөрмәтем сикһеҙ.**

Тулҡынланыуым сәбәпһеҙ түгел, сөнки нәҫел ебебеҙ Ғатаулла ишанға барып тоташа, атайым Хәсәнов Хәкимйән Даминдар улы уның бишенсе быуын туғаны. Ишан әсәйем Разия Билал ҡыҙы яғынан да яҡын олатай. Йәғни Ғатаулла ишандың улы Ҡылметдин әсәйемдең бер туған апаһы Мәймүнә инәйҙең тормош иптәше ине. Беҙ бала саҡта әсәйемдәр әленәнәле Вәлит ауылына ҡунаҡҡа йөрөнөләр, сөнки тағы ике апаһы - Өмөгөлсөм һәм Рәхилә инәйемдәр ҙә ошо ауыл килендәре. Ике инәйемдең дә бабайҙары бик уҡымышлы, дини булғандар. Артабан Рәхилә инәйемдәр кулакка сығарылып, Себергә һөрөлгәндәр. 1947 йылдарҙа Ырымбур өлкәһе Новотроицк ҡалаһына ҡайтып йәшәй башлағандар.

Былтыр Хәйбулла районы Рафиҡ ауылында Хәсәновтар шәжәрә байрамы үткәрҙе. Үҙәк тарих архивынан алынған белешмәгә ярашлы, Рафиҡ ауылы Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Түңгәүер улусына ҡараған. Ауыл 1765 йылда теркәлгән. Архив материалдарынан күренеүенсә, Рафиҡ ауылы Хәсәновтарының нәҫел тамырҙары менән Ҡыуат Хәсәновҡа барып тоташыуы асыҡланды. Ҡыуат Хәсәнов 1773-1775 йылдарҙағы ихтилалда бик әүҙем ҡатнашып, Пугачев полковнигы дәрәжәһенә еткән шәхес. Уның артабанғы яҙмышы билдәһеҙ.

Тарихты тергеҙеү бик тә кәрәк киләсәк быуынға. Беҙ бит ялған тарих уҡып, шуның йоғонтоһонда көн иттек. Үҙебеҙҙе түбәнһетеп, әрнеүле кәмселек тойғоһо кисереп йәшәнек. Икенсе сортлы ҡәүемдәрбеҙ, артта ҡалған милләт, тиеп кәмһенгән мәлдәр күп булды. Хәҙер, Аллаға шөкөр, бай тарихлы, аҡыллы, тәрән фекерле, ал тотҡан бөйөк халыҡ тигән тойғо көсәйеп тамырлана. Милли аң уянып, асылына ҡайтырға тырышыусылар ҙа көндән-көн арта. Бында гәзиттең өлөшө бик ҙур. Тарихи шәхестәребеҙҙең исемдәрен ҡайтараһығыҙ халыҡҡа. Тарихи шәхес исеме менән бергә халҡыбыҙ аңына тарих биттәре, үҙ милләтең менән ғорурланыу, үҙ-үҙеңде баһалау тойғолары ҡайта.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

# КҮК ҠАБАҒЫ...

## бәхетлеләргә асыла

**Ураҙа айының һуңғы аҙнаһында, таҡ көндәрҙең береһендә (быйыл 25-се, 27-се, 29-сы көндәрҙә) Ҡәҙер кисе була. Ошо изге төндә бәхетлеләргә күк ҡабағы асылыр, ти.**

Әхирәтем Мәрфүғә менән ошо серле мөғжизәнең тере шаһитыбыҙ.

Студент саҡ, йәйге каникулға ауылыбыҙға ҡайтҡанбыҙ. Һағындырылған. Кис буйы йорт эргәһендәге эскәмйәлә серләшеп ултырҙыҡ та, ҡайтыу яғына ыңғайланыҡ. Төн иҫ китмәле йылы, һауаһы һулап туймаҫлыҡ саф, хатта еле лә йомшаҡ (бындай билдәләрҙең тик Ҡәҙер кисәһенә генә хас икәнен мин әллә нисә тиҫтә йылдар үткәс кенә беләсәкмен). Ҡапыл тирә-яҡ сағыу яҡтыға күмелде. Ни булды икән, тип, юғарыға ҡараһаҡ, күҙҙәр ҡамашып китте. Ергә ҡарайбыҙ. Ә унда... һәр бер таш, һәр һалам ап-асыҡ күренә. Йәл, теләктәр теләү тураһында уйлап та ҡарамағанбыҙ. Унан һуң, был күренеш нисәлер секунд эсендә генә булды. Ҡараңғылыҡ япмаһы аҫтында ҡалғас ҡына иҫебеҙгә килдек. Мәрфүғәнең әсәһе, Хәзиҗә еңгә, күргән-кисергәнебеҙҙе һөйләтеп алғас, үҙенсә һығымта яһап та ҡуйҙы: "Ураҙа айы, һеҙ бәхетлеләр рәтендә..."

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы.**

*✓ Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙә үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һис кәмемәй. Әҙәм балаһын ошо фажиғәгә илтеүсе төп сәбәптәрҙең береһен эскелек тип әйтергә була. Айыҡ кеше, уға нисек кенә ауыр булмаһын, башын күрәләтә элмәккә тығырға ынтылмай.*



**Боронғо кешеләрҙең ҡайһы дәүерҙәрҙән бирле иҫерткес эсемлек ҡуллана башлауы билдәһеҙ, әммә ошо ғәҙәттең үҙ тарихы ғына түгел, быуаттар төпкөлөнән килгән фәлсәфәһе лә бар. Ҡасандыр бындай эсемлектәр ете ҡатлы Күк мөхитендә йәшәгән илаһи заттар өсөн генә тәғәйенләнгән, тип иҫәпләнеп, уны ошо юғарылағылар менән мистик бәйләнешкә инеү маҡсатында шаман-жрецтар ғына ҡуллана алған. Беҙҙең замانға килеп еткән иң боронғо яҙмаларҙан булған һинд-арий мифик сығанаҡтарында (Ригведа, Авеста һ.б. текстарҙа) иҫерткес эсемләктәрҙән сүрйә, галлюциноген кисерештәр тыуҙырыусы һаома иҫкә алына, һуңғыһы бер үҫемлек япрағынан ҡыҫып сығарылып, һөткә ҡушып әсетелгән махсус эсемлек була. Авеста телендәге "һау" тамырының һығып сығарыуҙы аңлатып, үҙебеҙҙең "һауыу" һүҙенә бермә-бер тура килеп тороуы ҡыҙыҡ. Эскелек кеүек ҡатмарлы йәмғиәт проблемаһы буйынса ҡоролған әңгәмәбеҙҙә филология фәндәре докторы, академик Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ һәм философия фәндәре докторы, профессор Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ ҡатнашты.**

# МАҢҠОРТЛОҠҠА

## йәки Эскелек

**▸ Боронғо башҡорт мифтарында ата-бабаларыбыҙҙың иҫерткес эсемлектәр ҡулланыуы тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Был башҡорттарҙың иң боронғо замандарҙан уҡ эскелекте үҙ итмәүе тураһында ишаралап торғандай. Әйткәндәй, "иҫереү" һүҙенең этимологияһы "әҫәрләнеү", "иҫ юғалтыу" һәм дә "иҫәрләнеү" һүҙҙәренә бәйле кеүек тойола. Иҫерткесте әҫәрләнеү өсөн эсә башлап, иҫен юғалтҡансы, йәғни иҫәрләнгәнсе эскән кешегә юҡҡа ғына "иҫерек баш", тип әйтмәйҙәрҙер ул…**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Ҡырмыҫҡалы районының үҙем тыуып үҫкән Үтәгән ауылында һуғышҡа тиклем бары бер генә кешенең эсеп иҫереп йөрөүе хаҡында һөйләгәндәрен иҫләйем. "Ана, теге Йомаҙил тағы башын иҫереккә һалып, эсеп йөрөй", тиерҙәр ине уның тураһында. Ысынлап та, ауылыбыҙҙа унан башҡа бер генә эскесе лә булманы. Әлбиттә, был ул саҡта ауыл мөхитендә алкоголле эсемлектәрҙең бөтөнләйгә булмауын һәм ҡулланылмауын аңлатмай. Ҡунаҡҡа йөрөшөү, мәжлескә йыйылыу, өмәләр, төрлө байрамдар уҙғарыу элек тә булды. Халҡыбыҙҙа ҡунаҡ һыйлау, күңел асыу, ипле итеп һөйләшеп, йырлашып ултырыу йолаһы борондан килә. Ҡунаҡ күңелен күреү өсөн табынға сәйҙән башҡа телдәрҙе астыра, күңелдәрҙе күтәрә торған милли эсемлектәребеҙ ҙә ҡуйылған. Башлыса буҙа, ҡымыҙ кеүек составында алкоголе бик аҙ булған эсемлектәр, һирәк-һаяҡ бал балы (әсе бал) менән ҡунаҡ һыйлау хуп күрелгән. Былар тәбиғи эсемлектәр, һәм уларҙың кеше һаулығына файҙаһынан башҡа бер ниндәй зыяны юҡ. Ата-бабаларыбыҙ бик күп быуаттар буйы ошо эсемлектәр менән ҡәнәғәтләнеп йәшәгән. Халҡыбыҙ араҡы һымаҡ спиртлы эсемлектәрҙең булыуын да белмәгәндер, белгән хәлдә лә, уларҙан баш тартҡан. Ҡәһәрле һуғыш, күп ир-аттарыбыҙҙың башына етеү менән бергә, халыҡ араһында эскелектең киң таралыуына ла сәбәпсе булды. Дүрт йыл барған ҡан ҡойоштан һуң беҙҙең ауылыбыҙҙа эсмәгән кеше юҡ ине, тип әйтергә була. Сәбәптәре билдәле: ир-ат һуғышта, аяуһыҙ ауыр тормош ауырлыҡтары ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро иңенә төштө, халыҡ күңелен ҡайғы-зар биләне. Бигерәк тә районыбыҙҙа шәкәр сөгөлдөрөн күпләп үҫтерә башлағас, шул сөгөлдөрҙән иҫерткес эсемлек ҡыуыу таралып китте. Ул ҡорт балынан ҡойолған әсе балдан күпкә ҡеүәтлерәк, шуны бер нисә стакан эскән кеше иҫереп үк китер ине.

**▸ Х быуат башында ғәрәп хәлифе илселеге менән Болғарға килгән ибн Фаҙлан үҙенең сәйәхәтнамәһендә быуна ниҙәр яҙып ҡалдырған: "Урыҫтар иҫерткес эсеүҙе яратыусы бер халыҡтыр. Көндөҙ ҙә, төндә лә эсәләр. Хатта ҡайһы берҙәре үлгән ваҡыттарында ла эсеп үлә". Шулай уҡ башҡа ғәрәп һәм сит ил сәйәхәтселәре урыҫтарҙың иҫерткес эсемлектәр ҡулланыуға әүәҫ ҡәүем булыуын теркәп ҡалдырған. "Эсмәйһең икән, тимәк, ысынлап йәшәмәйһең дә", "Эсмәйһең, тимәк, мине хөрмәт итмәйһең" кеүек әйтемдәр тиктән тиккә генә таралмағандыр урыҫ араһында. Шул тиклем оҙаҡ ваҡыт арауығында урыҫтарҙың организмында алкоголгә яраҡлашыу, хатта ниндәйҙер иммунитет барлыҡҡа килеү мөмкинлеге инҡар ителмәй. Халҡыбыҙ инде биш быуатҡа яҡын урыҫ мөхите менән яҡындан аралашып йәшәһә лә, һуңғы осорға тиклем урыҫ араҡыһынан алыҫ булды. Тик халыҡ араһында яман ғәҙәт бер тарала башлаһа, уға сик ҡуйыуы ҡыйын. Был хәлгә төшөүҙең эскелеккә ҡаршы эске иммунитеты булмаған халҡыбыҙ өсөн нисек хәүефле икәнен күптәребеҙ бик яҡшы аңлай. Тик ни эшләп ошо афәт алдында беҙ ғәмәлдә көсһөҙ булып ҡалабыҙ һуң?**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Хәҙерге заманда халыҡ араһында эскелектең киң таралыуы, уның кәмеү урынына, арта барыуы, уға ҡаршы көрәшеүҙең һөҙөмтәһеҙ булыуы хаҡында һөйләшеү фәлсәфәүи фекер йөрөтөүҙе талап итә. Ҡәҙимге тормош алып барыусы кеше йәшәйештә туҡтауһыҙ ҡабатланып тороусы бер төрлөлөктө үҙ итә алмай. Әйтәйек, ул иртән йоҡонан тороп, эшенә китә, көнө буйы ер һөрә, ҡайта, киске аштан һуң тағы йоҡларға ята, һәм был ғәмәлдәр көн һайын ҡабатлана килә. Ошолай бер килешле йөрөү кешене ялҡыта, уның ниндәйҙер икенсе бер торош-халәткә күсеү ихтыяжы барлыҡҡа килә. Тап иҫерткес эсемлек йоғонтоһонда ул үҙен бөтөнләйгә икенсе рәүештә тоя башлай, кәйефе күтәрелә, хатта кинәт кенә уның холҡо ла үҙгәреп китә: әүәл шым һәм баҫалҡы ғына булған әҙәм үҙен көслө һәм ғәйрәтле итеп хис итә. Эскән кешенең ошо яңы халәте уның хәтерендә ҡала, һәм күпмелер ваҡыт үтеүгә, унда тағы ла ошо торош-кисереште ҡабатларға теләү барлыҡҡа килә. Үҙ ғаиләһе мөхитендә ҡәҙимгесә йәшәп көн иткән ир кеше эскелектең зыяны тураһында ла белә, әммә тап эскән мәлендә ул үҙен "ысын ирҙәрсә" хис итеп, арыҫландай ғәйрәтле булып китеп, хатта үҙен айыҡ сағында хас булмағанса, агрессив тота башлай. Ошо холҡо арҡаһында башҡаларҙан туҡмалыу ҙа уны туҡтата алмай. Әлбиттә, эсеп алған кешенең барыһы ла бер иш булмай, һәр кемдең үҙенә хас булған кәйеф-торошо пайҙә була.



*▸ Һәр илдең зыялы заттары, йәмәғәтселегe булыуын онотторға ярамай. Эскелек ил киләсәгенә хәүеф янай башлаған мәлдәрҙә улар үҙ һүҙен халыҡҡа ла, дәүләт етәкселегенә лә еткермәй ҡалмай. Тап шул мәлдәрҙә дәүләт тә аяуһыҙ көсәйеп киткән эскелекте сикләү маҡсатында закондар ҡабул итергә, башҡа саралар күрергә мәжбүр була.*

**▸ Алкоголь кеше мейеһендәге ниндәйҙер күҙәнәктәрҙе уятып, баҫырылған йәиһә тыйылған инстинкттарҙы уятамы икән?**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Мин улай тип уйламайым. Алкоголь тәнгә генә түгел, йәнгә лә бик көслө йоғонто яһай. Беҙ йән даирәһе хаҡында бик аҙ беләбеҙ. Кешеләрҙе ҡарар күҙгә күренмәҫ шәүләләр уратып алған, уны аура тип тә атайҙар. Алкоголь ошо ауараны бик ныҡ үҙгәртә, һөҙөмтәлә кеше үҙен бөтөнләй икенсе кеше итеп тоя башлай, ниндәйҙер икенсе донъяға инеп киткән һымаҡ була. Әлбиттә, ул ошо "икенсе донъя"ны күрмәй, әммә уның йәне шул донъя тәьҫирендә көслө үҙгәрештәргә дусар була. Аураһы икенсе донъяға сыҡҡан кешенең кәйефе күтәрелә, уны ләззәт, рәхәтлек тойғоһо биләй. Урыҫтарҙа "напиться до чертиков" тигән төшөнсә булыуы фәһемле, был аяуһыҙ ныҡ эсеү арҡаһында кеше йәненең әле беҙ иҫкә алған башҡа донъяға инеп китеп, ниндәйҙер ҡурҡыныс заттар араһына барып сығыуын белдерә.

Ҡәҙимге тормошобоҙҙа беҙ әхлаҡи ҡоршауҙар солғанышында йәшәйбеҙ, ә алкоголь уларҙы юҡҡа сығара ала. Мәҫәлән, айыҡ саҡта ир-ат үҙен ҡатын-ҡыҙ менән ипле, әҙәпле тотһа, эсеп алыу менән "ысҡына" башлай: ҡатын-ҡыҙ заты уға ғәҙәттәгенән матурыраҡ булып күренә, ул, үҙе лә һиҙмәҫтән, тотанаҡһыҙлыҡ күрһәтә, ниндәй ҙә булһа "сибәркәй" менән бәйләнешкә инергә теләй. Тап шуның өсөн ҡатындар ирҙәренең йыш эсеп йөрөүенән ҡурҡа, сөнки бындай хәлдәр йыш ҡына ғаилә тарҡалыуына сәбәп була. Ғөмүмән, эскелек әхлаҡи ҡанундарҙы бик тиҙ арала юҡҡа сығара ала, кеше үҙен әҙәм балаларының тәү көтөүе дәүерендәгеләй хис итә башлай, шул халәткә бер барып ингәс, шунан сыға алмай ыҙалана. Психолог Карл Юнг әйтмешләй, эскесе "коллектив аңһыҙлыҡ" хөкөм һөргән дәүергә барып эләккәндәй була.

**▸ Ғаиләһе, эше, ҡорған тормошо йәиһә үҙ-үҙе менән риза булмайынса, йәшәүенең мәғәнәһен юғалта башлаған кеше эскелеккә тиҙ бирелеүсән, ә эскелектең кеше аңында барлыҡҡа килгән мәғәнәһеҙлекте уғата көсәйтеп ебәреүе раҫ.**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, беҙҙә үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һис кәмемәй. Әҙәм балаһын ошо фажиғәгә илтеүсе төп сәбәптәрҙең береһен эскелек тип әйтергә була. Айыҡ кеше, уға нисек кенә ауыр булмаһын, башын күрәләтә элмәккә тығырға ынтылмай. Эскесенең донъяһы эскәндә генә тигеҙләнә, әммә һуңынан уның кире яҡтары уға ҡайтанан ябырыла. Самаһыҙ эсеп, рухи булмышы менән бергә йәшәү мәғәнәһенән яҙған кеше өсөн һуңғы аҙым яһау ҡурҡыныс та, фажиғә лә булып тойолмаясаҡ. Күп эсеүҙән зиһене томаланған кешегә үҙ-үҙенә ҡул һалыу үҙе башҡаса йырып сыға алмаған ауырлыҡтарҙан ҡотолоуҙың иң еңел сараһы булып тойола. Күрәһең, эскелектән айный алмаған кеше шәхесендә уның үҙен юҡҡа сығарыуға алып барған зарарлы сифаттар тиҙерәк яралалыр.

Һуңғы йылдарҙа суицид осраҡтары бигерәк тә ауыл мөхитендә күбәйҙе. Бының үҙ сәбәптәре бар, әлбиттә. Үҙаллы тормош ҡорғанда матур маҡсаттар ҡуйылмауы, идеалһыҙ йәшәү, төрлө ҡапма-ҡаршылыҡтарға осрауҙан баҙап ҡалыу, төшөнкөлөккә бирелеү, ауырлыҡтарҙы сабыр рәүештә үткәрә алмау, башҡаларға тиҙ генә рәнйеп, үпкәләшеп йәшәү даими эскелек менән бәйләнә ҡалһа, кешене артабан йәшәүҙән ваз кисеүгә еткереүе бик мөмкин. Матбуғатта милләт яҙмышы өсөн хәүефле булған ошондай аянысла хәлдәргә анализ бирелгән, күпмелер кимәлдә өгөт-нәсихәткә ҡоролған мәҡәләләрҙең булмауы беҙҙең битарафлығыбыҙ күрһәткесе булып тора. Бындай хәлдә бер ни ҙә булмағандай йәшәүҙән арына алыу фарыз беҙгә.

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Ә йыш эсә башлаған кешегә башҡалар кәмһетеп ҡарай башлай, ул эшендә лә, ғаиләһендә лә ғәйепләнеп, ситкә тибелә, шәхес булараҡ, инҡар ителә. Бындай мөхит эскесене төҙәтә алмай, уны яңғыҙлыҡҡа дусар итә. Шунан инде араҡы шешәһе уның берҙән-бер "дуҫы" булып ҡала. Эсеп алһа, уға йәшәүенең мәғәнәһе ҡайтҡандай була, айныһа - яңынан юғала. Тора-бара бындай кешенең зиһенен мәғәнәһеҙлек һәм яңғыҙлыҡ менән тулы тормошонан ваз кисеү фекере биләп ала.

**▸ Һәр кеше билдәле бер йәмғиәттә йәшәй, ниндәйҙер дәүләттең гражданы булып тора. Теге йәки был илдәге эскелек торошон дәүләт сәйәсәтенән айырып ҡарап булмай. 1909 йылда билдәле юрист, публицист һәм йәмәғәт эшмәкәре А. Ф. Кони Рәсәй Дәүләт Думаһында яһаған сығыштарында батша властарын эскелекте һәр яҡлап сикләү урынына, уны төрлө юлдар менән арттырыу сәйәсәтен алып барыуҙа ғәйепләй. Спиртлы эсемлектәр һатыуҙан дәүләт ҡаҙнаһына йылына 500 миллион һумлыҡ килем алынһа, эскеселәрҙе дауалауға 4-5 миллион һум ғына аҡса бүленеүен ул күҙ буяуға тиңләй. Ошонан һуң теүәл бер быуат үтеп китте, ә беҙҙең дәүләт етәкселәре ваҡыты-ваҡыты менән эскелеккә ҡаршы көрәш башлау зарурлығын белдерһә лә, спиртлы эсемлектәрҙе ҡулланыу йыл-**

*✓ Үҙегеҙ ҙә эсмәгеҙ, эскән кешеләр менән дә аралашмағыҙ. Эсмәгәндәр тик бер-береһе менән генә ҡатышып йәшәргә тейеш. Иң һәйбәте, бындай ғаиләләр айырым ауыл төҙөп йәшәй башлаһын ине.*



# Илткән юл, фәлсәфәһе тураһында

**дан-йыл арта ғына бара. Ошондай ике йөҙлөлөктө нисек аңлатып була һуң?**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Халыҡ спиртлы эсемлектәрҙе ни тиклем күберәк һатып ала, дәүләт ҡаҙнаһына шул тиклем күберәк килем инә. Тимәк, илдә эскелектең артыуы дәүләт өсөн файҙалы булып сыға. Эскелеккә ҡаршы ниндәй генә кампания ойошторолмаһын, ғәмәлдә, дәүләттең килемен арттырыу ихтыяжы барыбер өҫтөнлөк ала. Рәсәйҙә алкоголле эсемлектәр етештереү сәнәғәтенең самаһыҙ үҫеш алыуы Иван Грозный замандарынан башлап хәҙергә тиклем күҙәтелә.

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Рәсәйҙең яңы быуаттар тарихын кабактар, трактирҙар, мөгәзәйҙәр һәм башҡа эскелек таратыу йорттары тарихы рәүешендә лә күҙ алдына килтереп була. Тәмәке тартыу, араҡы эсеү кеүек алама ғәҙәттәрҙе Петр батша исеме менән бәйләһәләр ҙә, Әбей батша - Екатерина II заманында кабак-трактирҙар, араҡы менән сауҙа иткән мөгәзәйҙәр иҫәпһеҙ күбәйеп, эскелек йәмғиәттең бөтә ҡатламдарына үтеп инә. Был хәл совет дәүерендә яңынан ҡабатланды, спирт-араҡы заводтары алкоголь продукцияһын бер өҙлөкһөҙ сығарыуын дауам итте. Быны сәбәбе бик төптә ятһа ла, ул күптәргә билдәле бит: араҡы эсеп алған кешене тормошто яҡшы яҡҡа үҙгәртеү, дәүләт ҡоролошоноң ғәҙел булмауы, уны алмаштырыу зарурлығы һымаҡ уй-фекерҙәр борсомай, ул дәүләт өсөн һис бер зыянһыҙ мәхлүккә әүерелә.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Эскелек белем-мәҙәниәт кимәле түбән булған ябай халыҡ массаларында ҡырағайлыҡ сифаттарын уята.

**▸ Күп һәм даими эскән кешенең хайуани хәләткә төшөүенән дәүләткә ни файҙа?**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Эскеселәргә ни бирһәң, шуға риза булып йәшәй бирә, тик эсергә генә етерлек булһын. Хатта ул үҙендә тупланған агрессияны ла яҡын-тирәләге кешеләргә генә йүнәлтә: ҡатынын туҡмай, бала-сағаһын рәнйетә, һис булмаһа, күршеһе менән һуғыша. Һеҙ эскеселәрҙең дәүләткә ҡаршы бунтҡа күтәрелеүе хаҡында ишеткәнегеҙ бармы? Дәүләт власы өсөн үҙенең тормош шарттарының ни өсөн насар булыуы тураһында уйланған кеше хәүефле. Ә күпселеге эскегә бирелгән халыҡ менән нисек теләйһең, шулай идара итеп була. Дәүләт һәм уның башындағы властар бар икән, эскелек тә бөтмәйәсәк. Нисек кенә сәйер һәм урынһыҙ тойолмаһын, дәүләт менән иҫерткес эсемлектәр бәйләнешен әлегә ҡотолғоһоҙ бер ҡанун итеп ҡабул итергә кәрәк.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Әммә һәр илдең зыялы заттары, йәмғәтселеге булыуын онотоорға ярамай. Эскелек ил киләсәгенә хәүеф янай башлаған мәлдәрҙә улар үҙ һүҙен халыҡҡа ла, дәүләт етәкселегенә лә еткермәй ҡалмай. Тап шул мәлдәрҙә дәүләт тә аяуһыҙ көсәйеп киткән эскелекте сикләү маҡсатында законадар ҡабул итергә, башҡа саралар күрергә мәжбүр була. Әгәр ул быны эшләмәһә, ил төрлө яҡлап бөлгөнлөккә төшөп, тарҡалыу сигенә етәсәк. Күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, дәүләт органдары бер быуат арауығында ике тапҡыр ғына булһа ла эскелекте сикләү кампанияларын башлап ебәрә. Һуңғы тапҡыр эскелеккә ҡаршы көрәш М. С. Горбачев башланғысы менән 1985 йылда башланғайны, ул һәйбәт кенә һөҙөмтәләр бирһә лә, оҙаҡҡа барманы.

**▸ Эйе, 1983 йылда СССР-ҙа йән башына (сабый балаларҙы ла индереп) 18 литрға яҡын таҙа алкоголь (саф спирт) тура килһә, 1986 йылда был ҡот осҡос күрһәткес 3,5 литрға тиклем кәмене. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев белдереүенсә, эскелек күрһәткесебеҙ ҡабаттан 18 литрға етте, ә Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) мәғлүмәттәренә ярашлы, эскелек кимәле йән башына 8 литрҙан ашҡан ил халыҡтары деградацияға дусар буласаҡ...**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, алкоголгә бәйлелек шул тиклем көсәйгәйне, магазиндарҙа араҡы нормалап ҡына һатыла башлағас, халыҡ самогон һәм башҡа суррогат эсемлектәрҙе күпләп эсә башланы. Икенсенән, араҡынан табыш алыу ихтыяжы өҫтөн ҡуйылғас, дәүләт етәкселәре элекке сәйәсәтте дауам итеүҙе хуп күрҙе. Араҡы-шарап, һыра һатыу уғата көсәйеп китеп, эскелек бер ниндәй сикләүһеҙ ҡалған күренешкә әйләнде. Бөгөн ошо сәйәсәттең һәләкәтле икәнен ил етәкселәре үҙҙәре лә аңлай башлағандай тойола.

**▸ Эскелеккә ҡаршы көрәш эскеселәргә ҡарата ҡаты саралар күреү менән сикләнә. Беҙҙең дәүләт етәкселәре лә ошо сиктән уҙғаны юҡ, тип раҫларға була. Кешенең шәхесен, уның аңын һәм үҙаңын үҙгәртмәйенсә, эскелекте еңеп булырмы һуң?**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Иҫерткес эсеүселәрҙең һанын кәметә алыу мөһим. Эскелек йоғонтоһона бирелмәү бала саҡтан уҡ тәрбиәләнергә тейеш. Ә беҙҙә нисек? Телевидениены ғына алып ҡарайыҡ. Ул кешегә өс нәмәне - тәмәке тартыу, араҡы эсеү һәм сексты ымһындырғыс итеп күрһәтә. Ҡайһы ғына фильмды ҡарама, ошо шөғөлдәр биҙәп-матурлап бирелә. Йәнәһе, эсеп-тартып ултырыу нормаль, хатта матур күренеш инде. Артабан да ошолай дауам итә икән, Медведевтың янау-саҡырыуҙарынан ни фәтеүә?

**▸ Һеҙ бик сетерекле теманы ҡуҙғаттығыҙ. Ғөмүмән, иҫерткес эсеү мәҙәниәте хаҡында һүҙ йөрөтөргә, "араҡы эсеү" һәм "мәҙәниәт" төшөнсәләрен йәнәшә ҡуйырға мөмкинме һуң?**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** "Эсә белеп эсеү" тигән төшөнсәне инҡар итеп булмай. Мәҫәлән, ҡунаҡта ултырғанда үҙ самаңды белеү, йәғни билдәле бер норманан уҙҙырмай ғына эсеүҙе мәҙәнилек менән бәйләп була. Ысынлап та, байрам-юбилейҙарҙа аҙ ғына миҡдарҙа эсеүҙән кеше организмына әллә ни зыян булмай. Тантаналы кисәләрҙә лә эсеү кәйеф күтәрерлек, күңелле итеп һөйләшеп ултырырлыҡ кимәлдән уҙмаһа, быны менән генә ризалашып була, тип уйлайым. Спиртлы эсемлектәрҙе ҡулланыу буйынса дәүләт сәйәсәте һәм йәмғәтселек фекере аша кешене ошо нормаларҙан уҙмаҫҡа күндереү фарыз. Әлбиттә, бөтә нәмәне лә тик дәүләткә япһарыу дөрөҫ булмаҫ ине. Үҙен мәҙәниәтле тип иҫәпләгән һәр кеше үҙе өсөн үҙе яуаплылыҡ тойоп, ниндәй эсемлекте, ҡайҙа, кем менән һәм күпме миҡдарҙа эсеү мәсьәләһен үҙе хәл итергә тейеш. Аҡылы бар кеше бер ваҡытта ла иҫен юйғансы эсмәйәсәк.



***▸ Эскеселәргә ни бирһәң, шуға риза булып йәшәй бирә, тик эсергә генә етерлек булһын. Хатта ул үҙендә тупланған агрессияны ла яҡын-тирәләге кешеләргә генә йүнәлтә: ҡатынын туҡмай, бала-сағаһын рәнйетә, һис булмаһа, күршеһе менән һуғыша. Һеҙ эскеселәрҙең дәүләткә ҡаршы бунтҡа күтәрелеүе хаҡында ишеткәнегеҙ бармы?***

**▸ Йәш сағында шарап-араҡыны самаһыҙ эсеп, үҙ-үҙен белмәҫ хәлгә төшөп, ояҡҡа ҡалмаған кеше һирәктер. Йәштәрҙе ошо "сама"ға өйрәтеп булырмы икән?**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Һинең эскәнеңде белгән дуҫиштәрең һиңә араҡыны тағы ла өҫтәп кенә тора ул. Нисек кенә эсермәйҙәр әле: йырлап бирәләр, ҡултыҡлашып ("на брудершафт", тип атала) эсертәләр, "злонды ҡалдырма", тиҙәр, ауыҙыңа, хатта елкәңә лә ҡоялар... Мәктәптә эшләгәндә, балаларға араҡыны бер грамм да ауыҙҙарына алмау кәрәклеген төшөндөрөргә тырыштым. 100 грамдан башланған эсеү бер саҡ ҡапланғансы эсеүгә тиклем барып етәсәк.

**▸ Эскелеккә ҡаршы иммунитеты булмаған аҙ һанлы төньяҡ халыҡтарының фажиғәле яҙмышы хаҡында һәйбәт беләбеҙ. Һан яғынан күберәк булһаҡ та, беҙҙең халҡыбыҙға ла ошондай хәүеф янамаймы икән?**

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Минеңсә, ундай хәүеф бар. Бигерәк тә ауылдарыбыҙ яҙмышы ныҡ борсой беҙҙе. Ауылда хәҙер ҡалаға ҡарағанда күберәк эсәләр. Күптәр үҙ алдына ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшәмәй. Коллектив хужалыҡтар тарҡалғас, тормош ҡороу, хужалыҡ итеү һәр кем үҙаллы хәл итә торған мәсьәләгә әйләнде. Әгәр ғаилә башлыҡтары мул, матур йәшәргә, балаларына яҡшы шарттар булдырырға ынтылһа, эскелеккә урын ҡалмай.

**▸ Ҡала кешеһенең көн һайын эшкә барыуы мотлаҡ. Ул эсеп йөрөһә, эшенән бик тиҙ яҙасаҡ. Ауылдарҙа ла элек етәкселектән эш кешеһенә талап көслө булды, ул күптәрҙе эскелеккә бирелеүҙән тотҡарлап тороусы тышҡы контроль булып торҙо. Хәҙер үҙ ҡарамағында ҡалдырылған ауыл кешеһе өсөн тышҡы контроль юҡ, ә эске контроль һәр кемдә лә етерлек түгел. Минеңсә, күптәр үҙ ирке менән дөрөҫ файҙалана алмай ыҙалангандай тойола...**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Ауылда бер ҙә эсмәгән кешене яратмайҙар. Баймаҡ районының Байым ауылында йәшәүсе Ғәбдерәсүл Фаруҡ улы, атайымдың ҡустыһы, 50-се йылдарҙан бирле эсмәй. Ҡунаҡ саҡырһа, ҡымыҙҙан башҡаһын ҡуймай. Ә ауылдаштары уны һаранлыҡта ғәйепләй. Хәҙер тотош ауылы менән күмәкләшеп эсеп йөрөгәндә лә ул берҙән-бер айыҡ тормош алып барыусы булып ҡала. Торабара кеше үҙ тормошон эскелектән башҡа күҙ алдына ла килтерә алмай башланы. Эскелектең эске ихтыяжға әүерелгәнен күреп торабыҙ, һәм унан арына алыу бик ҡатмарлы. Указдар сығарып, ҡарарҙар ҡабул итеп кенә ҡотолоп булмаясаҡ был афәттән. Мин балаларға былай тип өйрәтә инем: үҙегеҙ ҙә эсмәгеҙ, эскән кешеләр менән дә аралашмағыҙ. Эсмәгәндәр тик бер-береһе менән генә ҡатышып йәшәргә тейеш. Иң һәйбәте, бындай ғаиләләр айырым ауыл төҙөп йәшәй башлаһын ине. Хәлле милләттәштәребеҙ юҡҡа сыҡҡан берәй ауылды тергеҙеп, унда бөтөнләйгә эсмәгән, тәмәке тартмаған, аҙғынлыҡтан азат булған ғаиләләрҙе бергә йыйып алһа, бик шәп өлгө булыр ине. Әбйәлилдә Һәйетҡол ауылы халҡының эскелекте тамырынан бөтөрөү ниәте шундайыраҡ башланғысҡа юл һалды бит инде.

**▸ Әйткәндәй, һеҙ, Самат Әбдрәхим улы, үҙегеҙ ҙә ана шул эсмәгән кешеләрҙең береһе булаһығыҙ. Яман күренештәр, әшәкелек күрһәтелмәгән Башҡортостан телевидениеһында һеҙҙең кеүек бөтөнләйгә эсмәгән заттарҙың йәшәү рәүеше, ҡараш-баһалары сағылдырылған тапшырыуҙарҙың булмауы үкенесле...**

**С. МӨХӘМӘТЙӘНОВ:** Минең иҫерткестән ваз кисеүемә 20 йыл була. Яңы тормош юлына баҫыусылар араһында йәштәребеҙҙең күбәйә барыуы ҡыуаныслы. Сәнғәт академияһында уҡыған Моратов Кәрим үҙе кеүек 4 иптәше менән аҡса түләп, айырым фатирҙа тора. Сәбәбе бер: эскән иптәштәренән арыраҡ тороу, ундай йәшәү рәүешен күңелдәре менән ҡабул итә алмау. Бына ошондай башланғыстар күбәйеп, халыҡта эскелекте күрә алмау ихтыяжы үҫешә башлаһа, бер ниндәй көрәштең кәрәге ҡалмаҫ ине. Әлбиттә, бындай яңы күренештәрҙе барса юлдар менән хупларға, таратырға кәрәк. Хәбәр һөйләп кенә кешене үҙгәртеп булмай, фәһем алырҙай тере өлгө булыуы фарыз.

**Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ:** Һәр кеше үҙ яҙмышын үҙе хәл итә. Яңы ғына ғаилә усағын ҡорған ир менән ҡатын иң элек балалары яҙмышын ҡайғыртырға бурыслы. Иң һөҙөмтәле юл - ғаилә мөхитендә, балалар алдында араҡы эсмәү. Һәр ауылда бына ошондай ғаиләләр булып, башҡаларға өлгө булһа, алға китеш булыр. Уларҙың матур тормошо барыбер башҡа ғаиләләргә йоғонто яһамай ҡалмай. Эскелекте тотҡан урындан бөтөрөп булмай, был бик оҙайлы процесс, әммә маҡсатлы эш даими алып барылырға тейеш.

**Шулай итеп... Әңгәмәбеҙҙә зыялыларыбыҙҙың үҙ халҡына өлгө булырға тейеш булып та, үҙҙәренең ошо бәйлелектән интегеүе хаҡында ла һүҙ барҙы. Күпме талантлы шәхестәребеҙҙең үҙҙәрен араҡы хаҡына ҡорбан итеүе билдәле. "Әгәр эсеүҙән туҡтай алмаһам, мин дә күптән гүр эйәһе булыр инем", - ти Әхмәр Үтәбай. Ә алкоголизм башҡорт халҡына хас түгел, ул беҙҙең гендарыбыҙҙа юҡ. Эскелек беҙҙә колониаль сәйәсәт, империя баҫымы һөҙөмтәһендә таралған. Урыҫ халҡы үҙе лә башлыса эскелек аша ҡоллоҡта тотолған. Тимәк, урыҫ араҡыһын ирек һөйөүсе башҡорттан манҡорт яһап, халҡыбыҙҙы рухи ҡоллоҡта тотоу сараһы итеп ҡабул итергә кәрәк. Шулай булғас, эскелеккә ҡаршы формаль көрәш менән генә хушһынмайыҡ, туғандар. Иң тәүге аҙымыбыҙ - империя ағыуы булараҡ, урыҫ араҡыһынан бөтөнләйгә ваз кисеү булһын. Әлбиттә, быны ғәмәлгә ашырыу өсөн һәр кемдең ошо аҙымды үҙе башлап яһауы фарыз. Аллаһыбыҙға иман килтереп, ҡасандыр тайпылған юлыбыҙға кире сығыу хаҡында һеҙҙән хаттар көтәбеҙ, ҡәрҙәштәр.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**




Айбулаттың әле генә төшөнә кергән хәтәр ҡара-ҡаршы һөйләшеү шауҡымынан ҡабынған йөрәге тулап китте. Бар булмышын әлегәсә һис ҡасан кисергәне булмаған шомло хафа тойғоһо иҙергә тотондо. Уның күңел болоҡһоуы инде ахыр сиккә етте. Артабан ни ҡылырға ла белмәгән ир шул рәүешле аңҡы-тиңкә булып ултырҙы ла ултырҙы. Әле уға Албаҫтың бар ни ҙә, юҡ ни. Усағы ла, йәне сығырға әҙер күбәләк кеүек, ләүкей бара. Нәҡ бына ошо хәлһеҙ усаҡ аяныслы мәлдең килеп етеүе хаҡында иҫкәртеү булып күренде. Тәҡдиренән уҙа алмаған Айбулат, көскә ҡуҙғалып, урынынан торҙо. Һай, еңел түгел икән үҙ иркең менән әжәлеңә ҡаршы атлауы!

Хәҙер... Хәҙер ул барлыҡ йән дә, тән дә михнәттәренән бер һелтәүҙә ҡотоласаҡ. Кеҫәһен ҡапшаны, унда ҡалдыҡ өс бөртөк шырпыһы ята икән. Тимәк, әле уның өс шырпы янышы оҙонлоғонда ғүмере бар. Ғәжәп, уны баҡыйлыҡҡа күсерергә тип, Ғазраил фәрештә яҡынлаша, ә ул бошонмай ҙа, борсолмай ҙа. Бары, сикәләрен өтөп, ҡайнар йәштәре генә субырлай һәм күҙ алдына кинәт... Гөлзифаһы менән Гөлкәйе килеп баҫа: кисерегеҙ, ҡәҙерләләрем, мин бешмәгәнегеҙҙе!

Иҫәүән кешеләй ҡыланған Айбулат кимәле бер күтәрелә, бер төшә биреп, аҡрын ғына өйөрөлә-өйөрөлә, йәшкелт сағылыш һибә яткан шомло зөмбәй ситенә килеп баҫты. Бармаҡтарын бешерә башлаған шырпы төпсөгөн һыуға ырғытты, икенсеһен һыҙҙы. Һунарсы шырпыһы ун дүрт секунд яна. Тимәк, әле егерме һигеҙ секундтай йәшәйһе. Күпме был, аҙмы? Ҡайһы яктан ҡарайһың бит. Албаҫты тырнағына тереләй барып эләкһәң, бер нисә секундың да мәңгелек булып тойолоуы бар. Ярай ҙа, бер һуғыу менән йәнеңде сығарһа. Ә тере көйө итеңде өҙгөсләргә тотонһа... Хәйер, ул Албаҫтыға тәтемәйәсәк, уны ана, түҙемһеҙлек менән... шамбы һағына. Ҡыҙыҡ, шамбы уны шунда уҡ өҙгөсләргә тотонормо, әллә итенең бурыһағын көтөп ятырмы икән?..

Үҙ уйынан үҙе ытырғана ҡуйған Айбулат буш биштәре менән яһау тулы саҡсаһын* һерәйеп торған таш осона элде. Бөрткөләп кенә ҡулдан эшләнгән затлы мылтығын да ҡәҙерләп шунда һөйәне: һыуға сумған мәлдә ҡамасау яһамаһын-дар.

Хәҙер... хәҙер... Бына ошо һуңғы сыраҡа-шырпы янып бөтһән дә... Бөттө. Мәмерйә эсе, башҡа инде мәңге яҡтылыҡ күрмәҫ өсөн, дөм-ҡараңғылыҡҡа батты. Эйе, бүтәнсә бында бер ваҡытта ла яҡтылыҡ төшмәйәсәк. Кеше аяғы ла баҫмаясаҡ. Ғөмүмән, Айбулатты, ниндәйҙер шыҡһыҙ таш ҡыуышында ялбыр, хөштөмһөҙ бер ғифриттың йәнен ҡыйырға йәлләүҙән үҙ ирке менән һыу төбөнә киткәндер, тип, кемдеңдер башына ла инеп сыҡмаҫ.

Дөңк... дөңк... дөңк... Албаҫты яҡынлаша. Аҙымдары ауыр һәм ышаныслы. Уттың һүнгәнен күрҙе бит. Хәҙер ул бер ҡаршылыҡһыҙ килә ала. Уға хәҙер мөсһөҙ ҡорбанын ботарлап ырғытырға бер нәмә лә ҡамасауламай. Ул күҙҙәрен сытырлатып йомған көйө һыуға һикерҙе. Тынды үпкәһенә мөмкин тиклем мулыраҡ алды: бер минутҡа ғына булһа ла оҙағыраҡ йәшәгеһе килә! Һыу аҫтында булһа ла! Йәнә лә, бар хәленсә алыҫҡараҡ йөҙөп, тәрәнгәрәк китергә тырышты. Һалҡын һыу бөтә тәнен генә түгел, рухын да өтөп алды. Бына-бына аяҡ-ҡулының тарамыштары тартышып, көүҙәһе ҡурышыр ҙа, шаян ҡыуыҡсалар ҡалдыра-ҡалдыра һуңғы һулышы сығып китер һәм... Ошолай уйлап, хәлдең ҡотолғоһоҙ икәнлегенә инде тулыһынса һәм ахырынаса төшөнгән Айбулат, барлыҡ көсөн туплап, өнһөҙ стихия аҫтында йөҙҙө лә йөҙҙө. Уға алыҫҡараҡ китергә кәрәк. Тағы... тағы саҡ ҡына. Мәмерйә эсенә кире ҡалҡып сыҡҡандай булмаһын. Ул инде тыны бөтә барғанлығын һиҙә: ҡолаҡтары яман геүләй, күҙ алдарында төрлө төҫтәге түңәрәктәр хасил була. Әммә...

Аллаһы Тәғәлә һәр тере йәнде йәшәү хаҡына аяуһыҙ көрәш инстинкты менән бүләкләгән. Айбулат, ошо инстинктты еңә алмайынса, ҡотолоу эҙләп, бер генә йотом һауа һулар өсөн өҫкә күтәрелә башланы. Башы ташҡа бәрелеп тонсоҡһа, бәлки, еңелерәк булыр... Ләкин, ауыртыуға әҙерләнеп, күпме генә көтһә лә бер нәмәгә бәрелмәне лә, һуғылманы ла, ә шабыр-шобор һыу өҫтөнә килде лә сыҡты. Сығыу менән, ҡарһаланып, оҙаҡ тын алды. Һай, рәхәт икән күкрәк тултырып һауа һулауҙары! Әлеге рәхәтлектең ҡәҙерен һулар һауаң булмағанда ғына беләһең икән...

Шулай ҙа, ни хикмәт булды әле был? Ул бит үлем эҙләп сумғайны, ә тере көйө ниндәйҙер ҡараңғы бушлыҡҡа ҡалҡып сыҡты. Әллә яңылыш мәмерйәгә, теге хәсис янына, кире әйләнде лә килдеме? Аптырап ҡалған Айбулат, ҡараңғылыҡҡа, тоҫмал менән ары йөҙөп китте.

Бер аҙҙан ҡулдары ҡатыға һуғылды. Ул һыу аҫты ҡаяһы ине. Үткер ҡырлы таштарға йәбешеп, аҙ ғына ял итте лә йәнә йөҙҙө. Үҙе йөҙә, үҙе ҡайҙа барғанын белмәй. Шуныһы ҡыҙыҡ - бая янып киткән тәне хәҙер бер ни тоймай. Ошо мәлдә ул бөтөнләй өшөмәгән һымаҡ.

Байтаҡ ара үткән кеүек булғас, аяҡтәрәргә самаланы, ләкин аяҡтары бүйламаны - тәрән икән. Һәрмәнә торғас, таш ҡаяны табып, тағы ялға туҡталды. Ошо мәл һыу ҡатламы аҫтында, тәрәндә-тәрәндә, күҙҙәренә ниндәйҙер серле яҡтылыҡ салынып ҡалғандай булды. Мәмерйәләге зөмбәй ише йәшкелтем-аҡһыл һыу эсенән килгән тоноҡ яҡтылыҡ шундай мөсһөҙ, хатта ҡараңғыға күптән күнеккән күҙҙәр ҙә уны көскә шәйләй ине. Нимә был? Әжәлен эҙләп йөрөгәнеңдә, әллә йәшәү юлын таптыңмы?..

Әлеге уйҙан Айбулаттың күңел төпкөләндә остоҡ ҡына өмөт сатҡылары тоҡана. Өмөт! Һаман шул өмөт. Ахыр сиктә лә ул һине ташлап китә алмай икән. Энә күҙәүе дәүмәллек кенә шул сатҡылар хәлдән тайған Айбулатҡа көс өҫтәне лә ебәрҙе. Ул тәрән итеп тын алды ла тағы һыуға сумды. Был юлы инде үлем артынан түгел, ә йәшәү, ғүмер эҙләп. Ғәҙәте буйынса, һыу аҫтында күҙҙәрен асҡан килеш йөҙҙө. Яҡтылыҡ! Йөҙгән һайын ул көсәйә һәм баҙыклана бара. Уның сығанағына күп тә ҡалманы шикелле: ҡул һуҙымы ара. Эйе шул, тағы саҡ ҡына түҙһә. Башҡаһына түҙеүен түҙер, тик бына тыны бөтөп бара. Аһ, ашамаған-эсмәгән көйөнсә генә ул көндәр буйына йәшәргә була, ә һауа һуламайынса...

Көтмәгәндә ниндәйҙер осло нәмәгә барып төртөлгән ыңғайға күҙҙәрен сыбыртлатып йомған Айбулат, ах-уах килеп һыу өҫтөнә күтәрелергә лә өлгөрмәне, хәтәр зәңкеүгә түҙә алмайса, һуштан яҙғандай булды. Аһ, тағы шул баш! Нимәгәләр бәрелде. Шулай ҙа, сәбәләнә-сәбәләнә күтәрелеп, бер тапҡыр ғына һулыш алырға өлгөрҙө һәм... кемдеңдер көслө ҡулы кейеменән эләктереп алғанын тойҙо. Арьяғын иҫләмәй. Көүҙәһе мәлйеп төштө лә билдәһеҙлеккә сумды...

* * *

Күпмелер ваҡыттан күҙҙәрен асырға маташҡанында әлеге шул ҡараңғылыҡ ине. Бая ғына яҡтыра башлағайны бит! Ҡайҙа ул яҡтылыҡ?! Ә ниндәй хикмәт менән йылы ла, рәхәт тә. Әллә һаман усаҡ янында ятамы? Ул сағында ялҡыны нишләп күренмәй?

Үҙен мәмерйәлә тип хис иткән Айбулат, тороп ултырырға тырышып, ҡалҡына бирҙе. Ошо ваҡыт, уны шаңҡытып, яғымлы ҡыҙҙар тауышы ишетелде:

- Зинһар, тик кенә ятығыҙ, ағай, һеҙ капельница аҫтында, - шунда уҡ ҡағылып киткән йомшаҡ йылы ҡул назы һиҫкәндереп ебәрҙе, - ҡыбырламаҫҡа тырышһағыҙ ине...

- Мм...мин ҡайҙа? Һ-һеҙ кем? - Аптырап киткән Айбулат көслөк менән аңлайышһыҙ өн сығарҙы.

- Һеҙ реанимация бүлегендә...

Шунда уҡ бөтәһен дә төшөнөп алған Айбулат тәүҙә, ошо һүҙҙәргә ышана алмағандай, шаҡ ҡатып ятты. Ахырҙа, танау буйын өҫеттерел, күҙҙәренә йәш эркелде. Тик ул йәштәрҙе бер кем дә күрмәне - күҙҙәре ураулы ине. Бер аҙҙан тыныслана биргән егет бында ни рәүешлерәк килеп тарыған хәтеренә төшөрөргә тырышты. Төшөрә алманы. Әкрен-әкрен генә ҡалҡып һыу өҫтөнә сыға килгәне иҫендә, ә артабан ни булғанлығын һис әйтә алмай.

- Күҙҙәргә нимә булған? - Айбулат был юлы әллә нисек ят яңғырап киткән үҙ тауышын үҙе танымаңы: ул ҡурҡыныс яуап көтә ине.

- Бынығын һеҙҙән һорарға кәрәк, - яғымлы тауыш эргәлә генә ишетелде, - күҙ селтәрегеҙ ныҡ зарарланған, тиңеләр. Бәлки, һеҙ иретеп йәбештереүсе-лер? Һаҡһыҙ ҡыланып, аңғармаҫтан көслө утҡа ҡарағанһығыҙҙыр...

- Юҡсы... - Әлеге фараздың ниндәйҙер кимәлдә хаҡ икәнлеген һиҙгән Айбулат эш асылын аңлай башланы һымаҡ. Тимәк, оҙайлы һәм тулы ҡараңғылыҡҡа өйрәнә һалып алған күреү ағзалары көн яҡтыһын ҡапылғара күтәрә алмаған. Хәҙер улар ваҡ быяла ярсығы һибелгән кеүек яман әсетә, хатта янып бара. Ул сикәләре буйлап йәнә күҙ йәштәре аҡҡанын тоя. Тик былары инде күңел төшөнкөлөгө тулы хәсрәт тә, ҡуркәкте ярып килгән шатлыҡ та йәштәре түгел, былар бары күҙҙәре ярһыуҙан атылып сыҡҡан һыу ғына: тоҙо ла юҡ, ҡайнарлығы ла тойолмай.

- Һеҙ, ағай, артығын тулҡынланмағыҙ. Күҙҙәрегеҙ тиҙ арала йүнәлер ул, - теге тауыш бала әүрәткәндәге кеүек тылсымлыға әйләнә, - ә хәҙер миңә исем-шәрифегеҙ менән тыуған йылығыҙҙы әйтһәгеҙ. Ҡайҙа эшләүегеҙ ҙә кәрәк...

- Аҫ-ҫ... Аҫылбаев Айб-булат... Мең... бер мең дә туғыҙ йөҙ етмеш өс...

- Тә-әк, А-ҫыл-ба... - ҡағыҙ бите буйлап шығыр-шығыр йүгерергә тотонған ручка ошо урында шып туҡтаны, - Аҫылбаев тинегеҙме? Һеҙҙе бит ҡасандан бирле бөтә район, юҡ, бөтә республика эҙләй ҙә баһаң.

- Оҙаҡ эҙләйҙәрме?

- Оҙаҡ. Хатта бик оҙаҡ - биш-алты аҙна тирәһе.

* * *

- Йә, булдыра алһаң, һөйләп ташла, ҡайҙарҙа олағып йөрөнөң улай? Тик алдашма! - Хәлил әүәлгесә шаяртып маташты. Шаяртыуы был юлы ғәжәп урынлы килеп сыҡты.

- Һорама ла... - тип ыңһарҙағандай итте Айбулат, - йөрөлдө инде...

- Һы, ҡалай аңһат ҡына әйттең дә ҡуйҙың - йөрөлдө инде. Ай ярымдай ваҡыт ҡайҙа, нисек, ни йәнең менән йөрөп ятмаҡ кәрәк? Аңламайым.

- Йөрөнөм тип... Ғөмүмән, ҡайтып булманы, - нисек итеп "шылдырырға" белмәгән Айбулат, этенә-төртөнә, ыҡмыҡ килде, - ҡайҙарҙа, нимәләр эшләп йөрөгәнемде үҙем дә хәтергә төшөрә алмайым, - ул, бер аҙ оҡшаттым буғай, тигән һымаҡ, ҡәнәғәт ҡалып, иркен һуланы. Һоҡланыу ҡатыш ғәжәпһенеү тойғолары кисергән Хәлил, артабан ни тиергә лә белмәй, дуҫына оҙаҡ ҡына текләп ултырҙы. Сөнки уның нимә һөйләгәнен дә, ни әйтергә теләгәненә лә төшөнә алманы. Ахырҙа:

- Ә-әх, Айбулат. Әҙәм рәүешле алдашырға ла өйрәнмәнең бит, әй, - тип уның ышандырырлыҡ итеп алдай алмауына үкенес белдергәндәй итте. Ултырған урынынан тороп, тәҙрә янағына һөйәлде. Шул килеш, бер үҙенә генә билдәле хисләргә бирелеп, өндәшмәй байтаҡ торҙо. Шунан үпкә белдергәндәй: - Дөрөҫөн әйтергә теләмәйһең инде? - тине.

- Әйтергә... Нисек итеп... үҙем иҫләмәгәндә?..

- Йә ярай, әкиәтеңде икенсе урында һөйләрһең. Мексика сериалдарында ғына ул береһе яңылыш башына сиртһә, икенсеһенең хәтере юғала ла ҡуя, - Хәлил уны ошо урында бүлдерә һалды, - ә бында - ысынбарлыҡ. Тормош дауам итә. Һин шуны аңла: хәҙергә был бүлмәлә беҙ икәү генә. Алдыбыҙҙа протокол да ятмай. Минең уйымса, һин дуҫтан йәшерерлек әллә ниндәй эштәр боҙмағанһыңдыр. Ҡыланышың әйтеп тора - дөрөҫө ул түгел. Давай, бер нәмәне лә йәшереп торма, барыһын да нисек булған, шул көйө ас та һал. Ә нимәһен теркәргә, нимәһен - юҡ икәнлеген аҙаҡ ҡарарбыҙ: ҡағыҙ түҙә ул...

Бесәй-сысҡан уйнауҙың файҙаһыҙ икәнлегенә төшөнә барған Айбулатҡа барыһын да һөйләп биреүҙән башҡа сара ҡалманы. Ҡаршыһында баҫып торған капитан уны, асылған ауыҙын да ябырға онотоп тыңланы: дуҫтың был һүҙҙәренә ышанырғамы-ышанмаҫҡамы? Ҡырҡ көндән артыҡ, теүәлерәк булғанда - ҡырҡ ике тәүлек, аҫтың асы йөрөп әллә бер көйләрәк булған да киткәнме уныһы? Әллә ныҡ ҡурҡыткандармы?.. Юҡтыр, Айбулатты ҡапаҡ менән генә алдырып булмаҫ. Бынығын Хәлил яҡшы белә. Ул сағында нимәне йәшерә?..

- Былары ялған түгел. Ып-ысыны ошо, валлаһи...

- Шулай уҡмы икән?..

- Шулай, Хәлил, хәлдәр, бара-бара нишләр...

(Дауамы бар).

*саҡса - патронташ.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# СИТ ИЛДӘРГӘ СЫҒЫП...

## беренселек яулап

**Ошо көндәрҙә Польшаның Белосток ҡалаһында уҙғарылған Podlaska Oktava Kultur II Халыҡ-ара йыр, бейеү һәм фольклор фестивалендә Башҡортостандан "Ынйы" йыйылма ансамбле ҡатнашып, Гран-при яулап ҡайтты! Ҡатнашыусылар Көньяҡ Урал буйынса Бөтә донъя WWF Ҡырағай тәбиғәт фонды ойошмаһына сәйәхәтте ойоштороуға матди ярҙамы өсөн ифрат рәхмәтле. Сөнки бөгөн мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре конкуренттыҡтан ҡурҡып түгел, ә тап аҡсаһыҙлыҡ арҡаһында бына ошондай күп халыҡ-ара кимәлдәге конкурс-бәйгеләрҙә ҡатнашыуҙан мәхрүм ҡала. Мөмкинлек табып ҡатнаштылармы, мотлаҡ призлы урындар яулай беҙҙекеләр. "Ынйы" йыйылма ансамбленекеләр (Венер Камалов, Гөлшат Ғайсина, Гөлназ Биксурина, Элина Зәйнуллина, Римма Солтанова, Асия һәм Әлиә Ғүмәровалар) быны тағы бер тапҡыр раҫҡа сығарҙы. Ансамбль ағзалары - Сибай егете, халыҡ-ара конкурстар лауреаты Баязит ҒӘЙНУЛЛИН һәм Өфө ҡыҙы Сәлимә ТУЛЫБАЕВА ошо сәфәрҙән алған тәьҫораттары, кисерештәре менән уртаҡлаша.**

### Беҙҙең сәнғәтте үҙ иттеләр

Польшала уҙғарылған Podlaska Oktava Kultur Халыҡ-ара йыр, бейеү һәм фольклор фестивале йыл һайын уҙғарылып тора. Унда төрлө илдәрҙән ҡатнашалар. Фестивалдә һәр халыҡ башҡаларҙы үҙенең милли сәнғәте, мәҙәниәте менән таныштыра. Беҙ ҙә унда халҡыбыҙҙың бейеүҙәре, йырҙары менән сығыш яһаныҡ, ҡурайҙа, думбырала, ҡыл ҡумыҙҙа уйнаныҡ, өҙләп тә күрһәттек. Һәр сығышты яратып ҡабул иттеләр, алҡышлап оҙатып ҡалдылар. Өҙләү уларҙа айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Баязит өҙләп күрһәткәндән һуң, Германиянан килгән бер кеше, "Ауыҙында йә тамағында ниндәй инструмент тора ул?" тип, уның ауыҙын ҡабат-ҡабат астырып ҡараны. Шулай уҡ сит ил ҡунаҡтарын беҙҙең башҡа уйын ҡоралдары ла ҡыҙыҡһындырҙы. Орнаментлы костюмдарҙы оҡшаттылар, ҡашмауҙы, сулпыларҙы кейеп-кейеп ҡаранылар. Польша халҡы башҡорт әйтештәрен, таҡмаҡтарын, ҡурай моңон яратып ҡабул итте, бейеүҙәребеҙ менән һоҡландылар. Бигерәк тә ҡурайҙа уйнауҙы барыһы ла йотлоғоп тыңлай, ниндәй саф моң, тип һоҡлана. Азат Биксурин ҡурайҙа уйнағандан һуң, бар халыҡ сәхнә янына йүгерҙе, автограф алдылар, фотоға төштөләр, яҙмаларын һатып алдылар. Күҙгөләккә башҡорт бейеүҙәрен өйрәтергә үҙҙәренә саҡырҙылар.

Яҡшы сығыш яһағаныбыҙ өсөн беҙгә Парижда булыу бәхете лә тейҙе. Францияның иҫтәлекле урындарында булып ҡайтыу беҙгә тағы ла дәрт-дарман өҫтәне. Халыҡ-ара кимәлдә уҙғарылған фестивалдәрҙә ҡатнашыу, сит илдәрҙә йөрөп, бүтән халыҡтар менән аралашыу бик файҙалы. Был иң беренсе йәштәргә интеллектуаль үҫеш бирә, тормошҡа ҡарашын үҙгәртә. Беҙ ҙә Польшанан ҡанатланып, илһамланып ҡайттыҡ, йәшәү, ижад дәрте тағы ла артып киткәндәй булды.

Унан һуң, поляктарҙың башҡорт халҡы тураһында белеүе ҡыуандырҙы. Башҡорт милләтенән, тиһәк, шунда уҡ: "О, башҡорт балы!" - тип башҡорт балын маҡтай башлайҙар. Польшала умартасылыҡ үҫешкән. Умарта менән шөғөлләнеүселәр Бөрйән районында булып, солоҡсолоҡто өйрәнеп ҡайтҡан, әле улар үҙҙәрендә беҙҙең ысул менән ҡортсолоҡто үҫтерергә тырышалар икән.

### Һәр бер йортта тарих сағыла

Польшаға килеп төшкәс тә үҙендә әкиәттәгеләй хис итәһең. Ҡоймаларҙа үрмәле гөлдәр үҫә, урамдар шул тиклем матур, биналар төҙөк. Иң мөһиме, бөтә ерҙә таҙалыҡ күҙгә ташлана. Урамдар асфальтты күбек менән, йәғни шампунь менән йыуа, шуғалыр ҙа, урамдарҙа төмле еҫтәр аңҡып тора.

Беҙҙе юлға сығыр алдынан, унда милиция хеҙмәткәрҙәре урам буйлап йөрөмәй, сүп-сарҙы урамда ташлап ҡуймағыҙ, бөтә ерҙә лә йәшерен видеокамералар ҡуйылған, тип иҫкәртеп ебәргәйнеләр. Ысынлап та, Польша урамдарында бер милиция хеҙмәткәрен дә күрмәҫһең. Уларҙың йәшерен видеокамеранан күҙәтеп торғанын бар халыҡ белә һәм һаҡ йөрөй, сүп-сарҙы теләһә ҡайҙа ташламай. Беҙҙә лә шундай тәртип булһа, ҡалай яҡшы булыр ине.

Беҙгә Польша ауылдарында ла сығыш яһарға тура килде. Унда ауылдар ҡала кеүек: ҡатлы-ҡатлы йорттар теҙелеп киткән, юлдар тигеҙ. Етеш тормошта, матур йәшәйҙәр. Йорттары шау сәскәгә күмелгән, баҡсалары йәннәт баҡсалары кеүек: нимә генә үҫмәй унда!

Беҙҙе шуныһы ғәжәпләндерҙе: Польша ауылдарында өйҙәр әле лә боронғо өлгөләр менән һалына. Бының өсөн махсус архитектор яллана. Баҡтиһәң, был тарихты, ата-бабалар мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыу йәһәтенән махсус эшләнә икән. Ысынлап та, ундағы һәр йорт биҙәгенән тарих уҡып була, халыҡтың мәҙәниәте сағыла. Беҙ заманға яраҡлашып бөтәбеҙ ҙә ҡуябыҙ, беҙҙең йорттарҙа бер ниндәй ҙә тарих һаҡланмай. Йорттары боронғо өлгөләр менән төҙөлһә лә, улар бер ҙә замандан артта ҡалмаған. Бәлки, беҙгә лә йорт төҙөгәндә милли орнаменттарыбыҙҙы ҡулланырғалыр?

### Беҙҙең йәштәргә улар өлгө

Польша йәштәре беҙҙең йәштәрҙән ныҡ айырыла, улар әҙәпле, кешелекле, мәҙәниәтле. Беҙҙә халыҡ ни өсөндөр тупаҫыраҡ... Польша халҡының ғәфү үтенә белеүе беҙҙе һоҡландырҙы. Оло кешегә урын бирәләр, ҡаршы өндәшмәйҙәр. Ҡала буйлап төнөн дә, көндөҙ ҙә йөрөнөк, әммә урамда бер ерҙә лә һыра эсеп, тәмәке тартып торғандарын күрмәнек. Беҙҙең йәштәр Европаға эйәрергә тырышып, милләтебеҙгә хас булмағанса, әллә нимәләр ҡыланып бөтә. Әммә Европала бер ҙә генә лә улай түгел: улар шул тиклем мәҙәниәтле халыҡ. Йәштәре тарихтарын, тамырҙарын яҡшы белә. Был йәһәттән беҙгә уларҙан өлгө алыу яҡшы булыр ине. Польшала ошондай фестивалдәр аҙна һайын тиерлек уҙғарылып тора. Шуға күрәләр ҙә, уларҙа йәштәрҙең халыҡ ижадына һөйөүе ҙур. Беҙҙең республикала ла мәҙәниәтебеҙҙе күтәрер өсөн "Урал моңо", "Салауат йыйыны" кеүек төрлө саралар уҙғарылып тора тороуын, әммә улар йылына бер тапҡыр һәм бер ерҙә генә уҙа. Ошондай әһәмиәтле йыйындарҙың иҫәбен тағы ла арттырырға кәрәк.

**Шулай итеп...**
**Йөрөгән таш шымара, ятҡан таш мүкләнә, тиелә халыҡ мәҡәлендә. Ысынлап та, сит илдәргә сығып, халыҡ-ара фестивалдәрҙә ҡатнашыу, башҡа халыҡтарҙың йәшәү рәүеше менән танышыу кешенең донъяға ҡарашын үҙгәртә, зиһенен аса. Ә иң мөһиме, йәш кешенең башҡа милләттәр менән аралашып, фекерҙәр менән уртаҡлашып, үҙебеҙҙең мәҙәниәттең башҡалар араһындағы балҡышын тойоп ҡайтыуы унда патриотлыҡ тойғоһо уята. Ошо патриотлыҡ утын Сәлимә менән Баязиттың йөҙөндә лә тойҙоҡ беҙ.**

Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА
яҙып алды



ЗАУЫҠ

### РӘХМӘТ, САЛАУАТЫМ!

Һаумы, батыр Салауатым!
Киләм һине күрер өсөн.
Сал тарихың хәтирәһен
Бөгөнгөгә үрер өсөн.

Ғорур баҫып һин тораһың,
Һәр үткәнде һоҡландырып.
Үлеп барған йөрәктәрҙе
Дәртләндереп, тоҡандырып.

Рәхмәт һиңә, Салауатым,
Беҙгә яҡты юл күрһәттең.
Милләтеңде һин йыйһанға,
Асмандарға һин үрләттең.

Дөрләп янған йөрәгеңде
Алдың да һин күкрәгеңдән,
Яҡтырттың да халҡың юлын,
Йәшен булып күкрәнең дә...

Һәйкәл булып баҫтың шулай,
Азатлыҡҡа оран булып,
Ғорурлыҡҡа билдә булып,
Һәм хаслыҡҡа ҡорал булып.

Хәҙер илең - Башҡортостан,
Ҡалалары - танымаҫлыҡ.
Тик бер көнгә ҡайтып китсе,
Илең түгел һағынмаҫлыҡ.

### БАЛА

Бишектә ятҡан балаға
Күҙ һалам ҡырҙан ғына.
Һоҡланып ҡарайым уға:
Хәрәкәт-ҡылығына.

Бәләкәй генә ауыҙын
Бүртәйтеп матур ғына,
Әйтерһең, күгәрсен гөрләй,
Ҡыуанып шатлығына.

Йә ҡояш кеүек балҡый ул,
Ҡулдарын һуҙып алға.
Күңелем китә нурланып,
Ҡарап ошо балаға.

Түҙемһеҙләнеп, мин уны
Күтәреп ҡулға алам.
Әйтерһең, ошо сабый
Үҙемдең ғәзиз балам.

Һикертәм көйләп-таҡмаҡлап,
Бул, тип һин яҡшы кеше.
Донъяла юҡ маҡсатлының
Ҡулынан килмәҫ эше.
Ә ул шуны аңлағандай,
Әҙер ҡоштай осорға.
Кескәй генә ҡулы менән
Бар донъяны ҡосорға.

Һөйөп алам ҡосағыма,
Ул бит татлы, ҡәҙерле...
Эй, кешеләр, шул сабыйҙы
Һеҙ яҡларға әҙерме?

### СӘЙЕТБАБАМ

Ауылҡайым, һаумы, тиеп,
Һағынып ҡайтам һиңә.
Йәшлек һуҡмаҡтарым буйлап
Ҡайтам да, атлап киләм.

Үҙгәргәнһең, эй, ауылым,
Ҡарап туя алмайым.
Кешеләрең - сәскә кеүек
Ҡаршы сыға йылмайып.

Ғорурланам, Сәйетбабам,
Ҙураяһың, үҫәһең.
Иң ҙур башҡорт ауылы, тип
Карталарға төшәһең.

Көньяғыңдан ҡалҡан булып
Күкһел тауҙар теҙелгән.
Унда үрләп менеүсегә
Һуҡмаҡтары теленгән.

Әллә, тием, тау һуҡмағы
Илткәнгәме бейеккә,
Ғалим, шағир, йырсыларың...
Барыһы ла - бөйөктәр.

Иң ҙур башҡорт ауылы һин,
Сәйетбабам - төйәгем.
Һинең өсөн ярһып тибә
Кескәй генә йөрәгем.

Клара СИРАЖЕТДИНОВА.

**✔ Бөгөн Башҡортостанда 2009 йылдың 31 июлендәге күрһәткестәр буйынса 7 182 ВИЧ вирусын йөҡтороусы иҫәптә тора, шуларҙың 64 проценттан ашыуы - ирҙәр.**



БАҠСА

# СЕНТЯБРЬ ЕТТЕ...
## эш бөттөмө?

**Сентябрь - йәй менән көҙ осраша, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәрҙер, моғайын. Был айҙа йылы, сыуаҡ көндәр ҙә була, ямғырҙар ҙа йыш яуа, ҡырауҙар төшә. Спас етте - эш бөттө, тиһәләр ҙә, баҡсасылар сентябрь айында ҡалған уңышын йыйып ала, түтәлдәрҙе һәм ағастарҙы һалҡын ҡышҡа әҙерләй.**

Емеш баҡсаһында алманың ҡышҡы сорттары йыйып алына. Баҡсаны сирле ағас һәм ҡыуаҡлыҡтарҙан таҙартып, улар урынына яңы үҫентеләр ултырталар. Көҙҙән ултыртылған ағастарҙы беренсе ҡышта 30-40 см бейеклектә тупраҡ йәки торф менән ҡаплау мотлаҡ. Ағастарҙы кимереүселәрҙән һаҡлау өсөн бәйләп ҡуйыу яҡшыраҡ. Октябрҙә уларға етерлек кимәлдә һыу һибеп ҡуйығыҙ, сөнки көҙ көнө ағастарҙың тамыры әүҙем үҫә һәм нығына. Етмәһә, дымлы тупраҡ ҡышҡы һыуыҡтар ваҡытында ағас һәм ҡыуаҡтарҙы туңыуҙан һаҡлай. Көҙ ҡоро килгәндә алмағас һәм грушаға - 30-40 биҙрә, сейә һәм сливаға - 15-20, ҡурай еләге һәм ҡарағатҡа 5-6 биҙрә һыу етә. Ошо уҡ айҙа ағас һәм ҡыуаҡлыҡтарҙы органик фосфорҡалий ашлама менән туҡландырыу кәрәк. Баҡса еләгенә көл һибеп сығығыҙ. Ағастарҙы туҡландырғанда ла көл ҡулланырға ярай. Баҡса ерен көрәк менән түгел, һәнәк менән ҡаҙығыҙ, был осраҡта ағас һәм ҡыуаҡлыҡтарҙың өҫтә ятҡан тамырҙары әҙерәк зыян күрә. Ҡурай еләге һәм һырғанаҡтың төбөн ҡаҙмайҙар, йомшарталар ғына. Ҡоро торф, тиҙәк менән ашларға ла онотмағыҙ. Был емеш ҡыуаҡлыҡтары төбөнә һалам, ағас онтағы һибеү кәңәш ителмәй, сөнки улар сысҡандарҙы йәлеп итәсәк.

Йәшелсә баҡсаһында ла киләһе йылға тупраҡты әҙерләү мөһим. Органик йәки минераль ашлама индереп, ерҙе 25-30 см тәрәнлектә ҡаҙып сығығыҙ, әммә уны тигеҙләмәгеҙ, киҫәктәрҙе лә бүлгеләмәгеҙ. Ошо рәүешле ер яҡшыраҡ туңасаҡ һәм яҙын ирегәндә дымды күберәк аласаҡ. Һыуыҡҡа бирешмәй торған культуралар - салат, укроп, һуған, петрушка, шпинат, редис, кишер, сельдерей сәсеү өсөн түтәлдәр әҙерләгеҙ. Йәшелсәләрҙе һауа температураһы минус 2-3 градусҡа төшкәс, ноябрь айында сәсергә кәрәк булыр. Ағастарҙан ҡойолған япраҡтарҙы йыйып, ҡыяр парнигына йәки серетмә өйөмөнә күмегеҙ. Һуң өлгөрә торған кәбеҫтә һәм кишер, сөгөлдөр, шалҡан, ҡышҡы торманы ҡаҙып алыу ҙа был айға тура килә. Яҙ үҫенте ултыртыу өсөн тупраҡ алып ҡалырға онотмағыҙ.

Бер һәм күп йыллыҡ сәскәләрҙең тамырын йолҡоғоҙ. Ҡойолған япраҡтар менән күп йыллыҡ сәскәләрҙең тамырын ябыу уларҙы һыуыҡтарҙан һаҡлар. Ай уртаһына тюльпан һәм башҡа һуғанлы сәскәләрҙе ултыртып бөтөү мөһим. Ҡырау төшә башлау менән ҡоро көндә гладиолус, георгин, калланы ҡаҙып алырға кәрәк булыр. Уларҙы бер көн буйы асыҡ һауала киптергәндән һуң, һаҡларға һалырға ла була. Һауа торошона ҡарап, октябрь аҙағында йәки ноябрь башында пион, вейгела, форзиция, рододендрон кеүек йылы яратыусы сәскәләрҙең ботаҡтарын бөгөп, тәүҙә еңелсә генә торф, ҡом менән, һуңынан ағас япраҡтары менән күмергә кәңәш ителә. Әгәр ҙә тупраҡ ҡоро икән, сәскә ҡыуаҡтарына мул итеп һыу һибегеҙ. Раузаларҙы ла ҡышҡа әҙерләргә кәрәк: рауза ҡыуағын йәш үҫентеләрҙән таҙартығыҙ, төбөн йомшартығыҙ һәм ай аҙағында ботаҡтарҙы киҫеп ҡуйығыҙ. Рауза ҡыуаҡлығын шырпы ботаҡтары менән ябыу яҡшыраҡ. Үрелеп үҫеүсе раузаларҙы ергә һалып, полиэтилен һәм йылы материал менән ҡаплағыҙ. Шәмәх гортензия менән дә ошо уҡ эште башҡарығыҙ. Аҡ гортензияның бер-ике бөрөһөн ҡалдырып, ҡырҡып ташлағыҙ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҠУРҠЫНЫС ҺӘМ АЯУҺЫҘ...
## ВИЧ сире

**Башҡортостанда 20 йыл элек, ул саҡта әле аҙ билдәле булған, әммә бик ҡурҡыныс сир - СПИД менән көрәшеүсе үҙәк булдырыла. Бөгөн ВИЧ-инфекцияһы тураһында белмәгән кеше юҡтыр, моғайын. Үкенескә ҡаршы, СПИД күптән инде беҙҙең өсөн ят сир булыуҙан туҡтаны. Был йоғошло сиргә дусар булыусылар һаны көнләп көнә түгел, хатта сәғәтләп үҫә һәм быны, дәүләт яғынан көс һалыныуға ҡарамаҫтан, туҡтатыу мөмкинлеге әлегә юҡ. Беҙҙең төбәк биләмәһендә ВИЧ буйынса хәлде күҙ алдына килтереү өсөн СПИД һәм йоғошло сирҙәр менән көрәшеү һәм иҫкәртеү буйынса республика үҙәгенең баш табибы Рафаэль ЯППАРОВҡа мөрәжәғәт иттек:**

**Һеҙҙең үҙәк эшмәкәрлеге нимәнән ғибәрәт?**

- Башҡортостанда бөгөнгө көндә беҙҙең үҙәктең ике филиалы - Сибайҙа һәм Белоретта асылды. Бынан тыш, 18 лаборатория эшләй, шуларҙың береһе - клиник-диагностик лаборатория үҙәгендә "ВИЧ-инфекция" тигән һуңғы лаборатор диагноз ҡуйыла. Етмәһә, 1997 йылдан алып беҙгә республика халҡына вакцинопрофилактикалауҙы ойоштороу һәм халыҡты өҫтәмә иммунизациялау барышын контролдә тотоу буйынса бурыстар йөкмәтелде.

**Башҡортостанда "ХХ быуат чумаһы"ның таралыу үҫеше тураһында бер нисә һүҙ?**

- Ул дөйөм Рәсәйҙеке менән оҡшаш. Беренсенән, был сир менән зарарланған ҡатын-ҡыҙҙар һаны һәм ВИЧ-инфекцияһын йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙарҙың бала табыу осрағы артыуы дауам итә. Тимәк, икенсенән, был сиргә дусар булған әсәйҙәрҙән тыуған балалар һаны арта. Өсөнсөнән, был ҡаты сирҙе енси бәйләнеш һөҙөмтәһендә йөҡтороусылар һаны арта. Дүртенсенән, ВИЧ наркомандар араһында киң таралыуын дауам итә.

Һуңғы йылдарҙа был сир менән ауырыусылар һәм үлеүселәр һаны ла артты. Медицина хеҙмәткәрҙәрен ауырыуҙың йәштәр һәм 18-40 йәштәге хеҙмәткә яраҡлылар араһында таралыуы нык борсоуға һала. Әгәр ҙә быны һандар менән әйткәндә, ул асыҡланған бөтә ВИЧ вирусын йөҡтороусыларҙың 89 процентын тәшкил итә. Бөгөн Башҡортостанда 2009 йылдың 31 июлендәге күрһәткестәр буйынса 7 182 ВИЧ вирусын йөҡтороусы иҫәптә тора, шуларҙың 64 проценттан ашыуы - ирҙәр. Беҙҙең республика Волга буйы федераль округына ВИЧ-инфекцияһы менән уртаса кимәлдә зарарланыусы төбәк иҫәпләнә. Башҡортостан буйынса ул 100 мең кешегә 209,5 ауырыуҙы тәшкил итә. Республикала 1987 йылдан алып лаборатор рәүештә 8 988 ВИЧ йөҡтороусы асыҡланған, был ваҡыт эсендә 1 341 кеше үлгән...

**ВИЧ йөҡтороусылар дәүләттән ниндәй ярҙамға иҫәп тота ала?**

- "Сәләмәтлек" өҫтөнлөклө милли проектында беҙҙең үҙәк тормошҡа ашырған ике пункт бар. Былар "ВИЧ-инфекцияны, А һәм С гепатитын иҫкәртеү һәм ВИЧ менән ауырыусыларҙы дауалау" һәм "Халыҡты өҫтәмә иммунизациялау". Был проект сиктәрендә ауырыуҙарға һиҙелерлек ярҙам күрһәтелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алып китер инем. Уның буйынса килгән антиретровирусլы препараттар менән 1 261 ВИЧ сирен йөҡтороусы дауалана, шул иҫәптән 68 бала. Бынан тыш, әсәнән балаға ВИЧ күсеүен иҫкәртеү буйынса 102 ауырлы ҡатынға һәм 109 яңы тыуған балаға химиопрофилактика тәғәйенләнгән. Шулай уҡ "Сәләмәтлек" проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә 2009 йылда диагностик тест-системалар алынды, был үҙ сиратында халыҡты ВИЧ-инфекцияға тикшереү күләмен өҫтөн бер өлөшкә арттырырға булышлыҡ итте.

Әммә, үкенескә ҡаршы, был барлыҡ саралар ҙа ВИЧ таралыуын кәметә алмай. Республикала, шулай уҡ Рәсәйҙә лә, ауырыу осрағы артыуы күҙәтелә. Ағымдағы йылдың ете айында беҙҙең тарафтан 659 ВИЧ инфекцияһын йөҡтороусы асыҡланды, был былтырғы йылдың ошо осорондағы күрһәткес менән сағыштырғанда 20,7 процентҡа күберәк. Шул уҡ ваҡытта быйдай үҫештең хәҙерге көндә сирҙе асыҡлау мөмкинлеге яҡшырыу менән дә бәйле булыуын әйтеп китергә кәрәк.

**Үҙәк тарафынан ниндәйҙер профилактик эштәр алып барыламы?**

- Һис шикһеҙ, беҙ халыҡ, бигерәк тә йәштәр араһында ВИЧ-инфекцияны, наркоманлыҡты иҫкәртеү саралары һәм был сир әҙемтәләре тураһында мәғлүмәт таратыуға айырыуса ҙур иғтибар бүләбеҙ. Вирус юғары дәрәжәлә үҙгәреү һәләтенә эйә, шуға күрә үҙенсәлекле профилактика сараларын, мәҫәлән, вакцина йәки сыворотканы етештереү мөмкин түгел. Эйе, әлегә уйлап табылған дарыуҙар был сиргә дусар булған кешенең ғүмерен оҙайта, йәшәү һәләтен яҡшырта, әммә был ҡаты сирҙән дауалай алмай. Шуға күрә, хәүефһеҙ секс, даими партнер булыуы, наркотиктар ҡулланыуҙан баш тартыу йәки быйдай осраҡта стерилле бер тапҡыр ҡулланыла торған шприцтарҙы булһа ла ҡулланыу төп профилактика саралары булып ҡала.



АЛДАНМА!

# ДАРЫУ АҒЫУ БУЛМАҺЫН

**Беҙ сәләмәт йәшәү рәүеше алып барабыҙ, дөрөҫ туҡланабыҙ, спорт менән шөғөлләнәбеҙ, майһыҙландырылған йогурт эсәбеҙ, тип маҡтана алабыҙ, әммә саҡ ҡына ауырыубыҙ була, һаулыҡҡа хәүеф тыуҙырыусы иҫке ысулдар, дарыуҙар ҡуллана башлауыбыҙ тураһында уйлап та бирмәйбеҙ. Күптән һыналған дарыуҙар бөгөн дә файҙалы була аламы, әйҙәгеҙ, тикшереп ҡарайыҡ.**

### Ауырыу баштан… һауына

Яңыраҡ ҡына анальгинды льготалы дарыуҙар исемлегенән алып ташланылар. Ысынлап та, уны күп кенә Европа илдәре территорияһында һатыу тыйылған.

Анальгиндың нигеҙен тәшкил итеүсе натрий метамизолы 1920 йылда синтезланған. Ул саҡта был матдәнән ыңғай тәьҫире юғары, ә кире тәьҫире түбән (наркотик анальгетиктар менән сағыштырғанда) тип табыла, шуға ла ул донъя баҙарын бик тиҙ яулап ала. Латин теленән һүҙмә-һүҙ тәржемә иткәндә, анальгин "ауыртыу юҡ" тигәнде аңлата. Бары тик байтаҡ ваҡыт үткәндән һуң ғына уның кире тәьҫире асыҡлана башлай, иң ҡурҡынысы - уны ҡулланыу анафилактик шокка һәм агранулоцитозға (ҡан әйләнешенең боҙолоуы) килтереүе ихтимал.

Улай булғас, ни өсөн был дарыуҙы тыймайҙар һуң? Рәсәйҙә дарыуҙарҙың кире тәьҫире тураһындағы мәғлүмәттәрҙе йыйыу механизмы эшләмәй. Табиптар быйдай статистика бирмәй, тимәк, тыйыу өсөн формаль нигеҙ юҡ. Росздравнадзор дарыуҙарҙың хәүефһеҙлеге мониторингы системаһын булдырҙы булдырыуға, тик бар кире тәьҫирҙәр ҙә документаль рәүештә теркәлеп бөткәнсе, байтаҡ ваҡыт үтәсәк.

### Антибиотик… тиҙ ярҙаммы?

Халыҡ араһында бисептол ярым антибиотик тип иҫәпләнә. Ул, ысынлап та, шулай, тик "ярым" тигән һүҙ хәүефһеҙлекте түгел, ә уның дауалау һөҙөмтәһе булмауы тураһында һөйләй. Бисептолды ваҡытында бик күп ҡул-

ТӘҮБӘ



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын…

### 10-сы һабаҡ: "Беҙ - уй ҡоло".

Урманда аҙашҡанығыҙ бармы? Мин күп аҙаштым, бигерәк тә бала сағымда еләк йыйғанда был хәлгә йыш тарыным. Хәҙер иҫкә төшөрһәм, ул саҡтар көлкө генә тойола. Әммә ундай ваҡытта мине сығырымдан-сығарған был хәл күп илатты. Аҙашҡан кешенең күңел кисерештәрен тик ошо хәлгә тарыған ғына белә. Был саҡта үҙеңде ауылыңа, туғандарыңа ғына түгел, ғөмүмән, кешелеккә, тормошҡа илткән һуҡмағыңды, юлыңды юғалтҡандай тояһың. Тының быуылып ҡысҡырған, ялбарған тауышыңды берәү ҙә ишетмәй һәм ишетергә лә теләмәй, күҙең тоноп, баш һуҡкан яҡҡа бараһың да, бараһың, ҡаршыңда ҡайын да, ҡарағай ҙа, уҫаҡ...

Урман ҡурҡыныс, унда айыу-бүре бар. Йөрәгеңә шом инеп ултырыуы була, өмөтһеҙлеккә бирелеп, ары һуғылаһың, бире киләһең, "әйләнсек һарыҡ" кеүек, бер тирелә түңәрәк яһап тик йөрөйһөң.

Аҙашыу - билдәһеҙлеккә юлығыу, өмөтһеҙлеккә бирелеү ул. Кеше ни өсөн аҙаша? Аҙашыу иң тәүҙә баш мейеһендә, фекерҙә башлана. Мейе ике ярымшарҙан: һул һәм уң өлөштән тора. Дөрөҫ булмаған яҡҡа китеүселәрҙе, шуға күрә, "һулға киткән", тип тә әйтәләр. Уң яҡ ярымшарҙа аҡыл, зиһен туплана, һулында - тойғо һәм хис. Тимәк, һулға китеүселәр был осраҡта, аҡылына баш була алмай, тойғоһона бирелгән булып сыға.

Эсергә яратыусы әшнәләре артынан китер алдынан берәү шундай уйға ҡалған: "Һулға боролһам, ҡатынымды, ғаиләмде юғалтам, уңға ҡайырылһам, дуҫтарымдан айырылам, ә инде тураға китһәм, барыһынан да ҡолаҡ ҡағам", - тигән.

Урманда аҙашыусы кеше үҙен таныш болонлоҡҡа, акланға, асыҡлыҡҡа сығарыусы урман ситенә алып барып еткерер ергә төбәлеп, тәүҙә турыға атлай. Атлаған һайын күңелен ялмаған хафалы уйҙары ихтыярына бирелһә, мейеһендә ҡайнаған фекерҙәре, хисе менән буталып, уны һулға, йәки уңға тарта башлай. Шулай итеп, "аҙашыу түңәрәге" барлыҡҡа килә. Бөгөн килеп, шуға ла аптырайым. Ни өсөн ауылыбыҙ янындағы арҡырыһы-буйы ни бары бер-ике саҡрымдан артмаған урман эсендә мин сәғәттәр буйы илаулап, аҙашып йөрөгәнмен икән? Турағa атлаһам, ун минут эсендә ауылыбыҙ күренеп торған асыҡ урынға килеп сыға ала инем бит. Хәҙер был хәл аңлашыла: мин ул саҡта урман эсендә түгел, баш мейемдә, уйҙарымда аҙашып, буталып йөрөгәнмен икән. Бер нәмә тураһында ла уйламай, мейемдә ҡайнаған фекерҙәрҙән азат булып, тик тураға ғына барырға ине лә бит.

Хәмер ҡоло, араҡыға мөнәсәбәтле булыу ҙа шул уҡ урманда аҙашыуҙан бер ягы менән дә айырылмай. Тик был осраҡта күберәк "һул яҡта" йөрөйһөң.

Аллаһы Тәғәлә беҙгә, арҡа мейеләрҙән айырмалы рәүештә, бөйөк һәләтте, уйлана, фекерләй белеүҙе бүләк иткән. Кешенең хайуандарҙан айырмалы яғы ла тап ошонда.

Психологтар иҫәпләүенсә, бер нәмә лә уйламай тора алыу - талант. Беҙҙең осраҡта, бер нәмә лә уйламау - аҙашҡан саҡта уңға-һулға боролмайынса, тураға китеүҙе аңлата. Үҙ-үҙеңә ҡул һалыусыларҙың күбеһе үҙенең уйҙар, фекерҙәр лабиринтында аҙашып, унан сығыу юлын, башҡа әмәл таба алмағанлыҡтан, донъялыҡтан китеүҙә күрә, тиҙәр.

Ә нисек уйланмай торорға, тура юлдан китергә була һуң? Мин, әйткәнемсә, Шешәбикә менән дуҫ саҡта, иртәнсәк һәр саҡ "һулға" ауыштым. Уң яҡ ярымшарым: "Эсмә, был яҡшыға алып бармаясаҡ, көнөңдө нисек башлаһаң, кисең дә шулай булыр", тип янап торһа, һул яғым: "Йөҙ грамм ғына йот, ни булыр тиһең, хәлең дә арыуланып китер, күңелең дә күтәрелер", - тип ныҡышты. Шулай итеп, ике ярымшарым, үҙ-ара ярышып, һәр ҡайһыһы үҙ фекерен ҡушылырға димләне. Улар икәү, мин - яңғыҙым, әлбиттә, кеше был осраҡта аңһат юлды һайлай. Йөҙ грамм кәгеп ебәргәнме, эрәхә-ә-әт, ике яҡ ярымшар бергә ҡушылғандарын һиҙмәй ҙә ҡалаһың.

Аҡыл менән тойғоноң, ике ярымшарҙың уртаһында уларҙы тоташтырып торған урын күңел тип атала. Шуға ла беҙ аҡылыбыҙ менән тойғобоҙ бер-береһе менән килешкән кәйефле сағыбыҙҙа "минә күңелле", тибеҙ. Аҙашҡан саҡта уңға-һулға боролмаҫ өсөн күңел иң ышаныслы таяныс ул. Күңелде алдап та, унан алданып та булмай, шуға күрә күңел тартҡан яҡҡа барыу - һулға йә уңға ҡайырылыу түгел. Ә нимә ул күңел? Ул - аҡыл һәм тойғо гармонияһы. Күңелдең йөкмәткеһе - РУХ.

Бынан алдағы һанда ихтыяр көсө тураһында һүҙ алып барғайныҡ. Ихтыяр күңелдәге рухҡа таянһа ғына ныҡлы була ала, ысынлап та көскә әүерелә. Кеше бер нәмә тураһында ла уйламай торған саҡта уны күңеле һәм рухы тура юлдан алып китә.

Беҙ - уй, фекер ҡоло, уйламайынса, фекер йөрөтмәйенсә лә йәшәй алмайбыҙ. Уйҙар сылбыры кешене сығырынан-сығара, йыуаныс эҙләп, рюмкаға үрелергә мәжбүр итә. Һөҙөмтәлә ул "аҙашыу түңәрәге" буйлап йөрөгәлә, сөңгөлгә эләккән кәмә кеүек, допинг өҫтәлгән һайын, өйөрөлтмәктең уртаһына яҡынлаша һәм, ахыр сиктә, тормош-йылғаның түбәнге ағымдары уны төпкә тартып ала. Бында ишкәк ярҙамында түңәрәктән сығырға маташыу файҙаһыҙ. Был осраҡта иң мөһиме - рух көсөнә, күңелгә таянырға, йәки бер нәмә тураһында ла уйланмаҫҡа өйрәнергә.

Бахмурҙан үлеп барған кеше "баш ауырта", ти. Баш иң беренсе унда сыуалған бихисап буталсыҡ уйҙарҙан, сеймәлгән фекерҙәрҙән ауырта. Ҡандың алкоголь менән ағыуланыуынан һәм ҡан тамырҙары тарайыуынан ғазаплыраҡ ул баш ауыртыуы. Шуға күрә күп итеп араҡы эскән көндөң иртәгәһенә "баш төҙәтеү" кәрәк. Бахмурҙың, күңелдә дауам иткән тағы ла ғазаплыраҡ өлөшөн "бахмур синдромы" тип йөрөтәләр. Был да уйға һәм фекергә бәйле, шуға күрә лә, тағы ла ҡабатлайым, уйламаҫҡа өйрәнегеҙ. Бының өсөн бер аҡ, бер ҡара төҫкә ҡарап-ҡарап торогоҙ ҙа, ҡапыл ошо ике төҫтөң уртаһына күҙ атығыҙ. Йә булмаһа, бер аҡыл, бер тойғо тураһында уйлап, ошо икеүҙең ҡап уртаһын - күңелгә һәм рухты эҙләп табығыҙ. Мин шулай иттем.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Матур уйҙар күңелде матурлай

Һыуытҡыс йәки автомобиль төҙәтергә ярҙам итеүсе идеялар була; хәүеф тыуҙырған ҡатмарлы проблемаларҙы хәл итергә ярҙам иткән идеялар була. Әммә беҙ йыш ҡына идеялар беҙгә хеҙмәт һәм ярҙам итә алырлыҡ тағы ла бер юл барлығын аңламайбыҙ. Беҙгә "яҡшы идеялар ҡануны" тураһында бик аҙ ишетергә тура килә. Был ҡанун өйрәнергә һәм хеҙмәттәшлектә ҡулланырға кәрәкле ҡеүәтле яҡшы идеялар барлығын һөйләй. Уның ярҙамында беҙ бәхетле һәм уңышлы тормош алып бара алабыҙ. Был идеялар, тик уларға ышанырға кәрәк, тормошто сихри рәүештә үҙгәртеүгә эшләй башлай. Мәҫәлән, беҙ үҙебеҙҙең тағы ла һөйөклөрәк кеше була алыуыбыҙға ышанабыҙ, шуның менән аңыбыҙға мөхәббәт идеяһын һеңдерәбеҙ. Беҙ был идеяға аныбыҙҙы һәм йөрәгебеҙҙе бирәбеҙ. Беҙ был идеянан өйрәнергә әҙерлегебеҙҙе белдерәбеҙ. Беҙ уға реаль һәм йәнле әйбергә ҡараған кеүек ҡарайбыҙ һәм беҙҙең менән бергә тормош буйлап барырға юл ҡуябыҙ. Иғтибарыбыҙ һәм инанысыбыҙ үҙегенә нимәне генә ҡуйһаҡ та, ул беҙҙең тормош тәжрибәһе булып тора - был тормош ҡануны. Яҡшы идеялар ҡануны беҙҙе яҡшы идеяларға иғтибар йүнәлтергә өйрәтә. Тәжрибәлә аҡыл, көс, мөхәббәт, ышаныс, ҡуҙаллау, тормош һәм сәләмәтлек идеяһына тоғролоҡ һаҡлаһаҡ, беҙ тормошобоҙҙо яҡшы яҡҡа үҙгәртә алабыҙ.

Һин аңыңды мәғәнәһеҙ хәбәр һатыуҙар йәки ҡурҡыу һәм негативлыҡ менән тултырғансы, уны ыңғай идеялар менән тултырыу өҫтөндә эшлә. Ошо рәүешле эш итһәң, фатиха алып, тормошто үҙгәртеүсе "яҡшы идеялар ҡануны" менән файҙаланыу мөмкинлегенә эйә булырһың.

## Донъяны дөрөҫ күрә бел

"Нимә күрәбеҙ, шуны алабыҙ" тигән әйтемде ишеткәнегеҙ барҙыр, моғайын. Был һүҙҙәр үҙең күрмәгән әйбер менән бер нәмә лә эшләп булмай, ә яҡшы итеп күргәне менән теләһә нәмә эшләргә мөмкин, тигән тормош ҡанунын хәтерләтә. Ике кеше күршеләш кенә бер үк көндә, бер үк шарттарҙа уянып та, көндө нисек күреүенә ҡарап, уны төрләсә уҙғарыуы мөмкин.

Билдәле христиан яҙыусыһы Эрик Баттерворт был идеяны былай тип асыҡлай: "Донъяны дөрөҫ ҡороу беҙҙән тормай; ә бына уны дөрөҫ күреү беҙҙән тора". Ә был донъяны дөрөҫ күрер өсөн нимә эшләргә кәрәк һуң? Һәр юлы нимәнелер ҡабул итеү мәсьәләһенә ҡағылғанда, алдыбыҙға һайлау проблемаһы килеп баҫа. Башта беҙ шуны аңларға тейешбеҙ: беҙҙең ҡарамаҡҡа стакан яртылаш бушмы йәки яртылаш тулымы? Беҙ ысынында был көндө йә негатив итеп, йә яҡшы эштәр башҡарыр өсөн сикһеҙ мөмкинлектәр менән тулы итеп ҡабул итеп була икәнен аңларға тейешбеҙ. Быға төшөнһәк, беҙгә донъяны илһамлы һәм уңышлы итеп күрер өсөн бары тик бер аҙым ғына эшләргә ҡаласаҡ.

Ышаныс - дөрөҫ күреү һәләтенә эйә булырға ярҙам итеүсе икенсе мөһим концепция. Тормошҡа ҡарата беҙҙең ышаныс нимәнән ғибәрәт һуң? Тормош алға табан барыуына беҙ ышанабыҙмы? Ғаләм тәбиғәте үҙе прогресҡа булышлыҡ итеүенә ышанабыҙмы? Бөтә кешеләр ҙә үҙ тормошон яҡшыртыр сикһеҙ потенциалға эйә булыуына ышанабыҙмы? Билдәле, әгәр ҙә үҙебеҙгә һәм тормошҡа ҡарата ышаныбыҙ бар икән, тимәк, уратып алған донъяны дөрөҫ күреүгә һәләтлебеҙ.

Беҙ тормошто ниндәй итеп күрергә теләйбеҙ - һөҙөмтәләргә өлгәшеү юлы ла шундай. Беҙ уның ҡараңғылатыусы тышҡы күренештәренә иғтибар итмәйенсә, тағы ла камилыраҡ кешелекте һәм яҡшы донъяны һайлай алабыҙ. Был бары тик беҙҙән генә тора.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

---

лаһалар, хатта хәҙер сир таратыусы микроорганизмдар уға бирешмәй ҙә.

Әммә был сит ил мәғлүмәттәре. Беҙҙең табиптар былдай статистикаға эйә түгел һәм улар сирлене дауалауҙа бисептолды һаман ҡуллана. Был дарыу һалҡын тейгәндә ярҙам итмәһә лә, простатит, хроник ҡырылдай (бронхит), дизентерия, сальмонеллезды дауалағанда ҡулланырға ярай.

### Иҫке, тимәк… һыналған?

Бик электән ҡулланылған дарыуҙар исемлегенә тетрациклин һәм левомицетинды ла индерергә була. "Әсәйем мине уның менән дауалай торғайны", тип, үҙ белдегең менән был дарыуҙарҙы ҡулланыу ярайҙы икән?

Баланың эсе китһә йәки ҡоһа, күп ата-әсәләр уны левомицетин менән дауалай. Эсәк сирҙәре ваҡытында төп дауа - асыҡыу һәм күп итеп һыу эсеү. Табип консультацияһы ла мотлаҡ.

Тетрациклин майы менән конъюнктивитты дауаларға ғәҙәтләнгәнбеҙ. Әммә табиптар әйтеүенсә, тетрациклин һәм сәй шамаһы менән был сирҙе бөтөрөргә тырышырға кәрәкмәй. Антибактериаль, вирусҡа һәм бәшмәккә ҡаршы тамсылы дарыуҙар ҡулланыу күпкә тәьҫирлерәк.

### Валидол… йөрәк дарыуымы?

Валидол, традиция буйынса, хәлһеҙлектән, юғары ҡан баҫымынан, йөрәк тапҡырындағы ауыртыуҙан ҡулланыла. Быны егерме йыл инде кардиологтар валидолдың тәьҫире бөтөнләй булмауы тураһында белдерә. Дарыуҙың аннотацияһын укып ҡараһағыҙ ҙа, уның еңелсә ҡан тамырҙарын киңәйтеү һәм йоҡлатыу тәьҫире булыуын асыҡларһығыҙ.

Корвалол - составында ментолдан башҡа файҙалы нәмәһе булмаған валидолдың яҡын дуҫы, тик валидолдан айырмалы рәүештә, корвалол составына валериан экстракты һәм йоҡлатыусы фенобарбитал инә.

Йөрәктең эшенә ярҙам итеүсе компоненттар корвалолда ла, валидолда ла, валокординда ла юҡ. Шуға ла уларҙы ҡабул итеп ваҡыт уҙғарғансы, "Тиҙ ярҙам" саҡырыу ышаныслыраҡ. Әйткәндәй, фенобарбитал күнегеүсәнлеккә килтерә, шуға ла даими рәүештә тынысландырыусы сара итеп корвалолды ҡулланмағыҙ.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*



# БАЛ МУЛЛЫҒЫ...

## егәрленең табышы

**Үткән ялда Өфөнөң "Юбилейный" мәҙәниәт һарайы алдында бал йәрминкәһе уҙҙы. Алтынсы тапҡыр үткәрелгән был сара ысын халыҡ байрамына әүерелгәйне. Умартасылар өҫтәлдәренә мәж килеп тауарҙарын теҙә, һатып алыусылар йүгереп йөрөп, бал һайлай, күңелле йыр-моң яңғырай. Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов, БР Хөкүмәт Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Шамил Вахитов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев һәм башҡа мәртәбәле ҡунаҡтарҙан торған рәсми делегацияның килеүе былай ҙа умарта иләүе шикелле гөжләп торған майҙанды тағы ла ҡуҙғытып, йәнләндереп ебәрҙе.**



Быйыл йәминкәлә, былтырғыса, 43 район ҡатнашып, ике көн буйы 368 сауҙа нөктәһе ҡала халҡын татлы ризыҡ менән тәьмин итте. Ауыл хужалығы эшсәндәре тәҡдим иткән татлы ризыҡтың ниндәй генә төрө юҡ ине: йүкә, сәскә, ҡарабойҙай, донник, солоҡ балы, хуш еҫ бөркөп торған кәрәҙле бал, шулай уҡ прополис, инә ҡорт һөтө, һитә кеүек башҡа төрлө умартасылыҡ тауарҙары. Быйыл республикала тәбиғәт шарттарының ҡырыҫлығы умартасылар өсөн эҙһеҙ үтмәгән, улар балды үткән йылдарға ҡарағанда әҙерәк алған, шуға ла уларҙың хаҡтары ла күтәрелгән. Мәҫәлән, йүкә балының 3 литры 1100-1200 һум торһа, сәскә балын 1000 һумға алырға мөмкин ине. Солоҡ балының иһә килограмы 1500 һум, ә кәрәҙле балдыҡы - 450 һум тора. Хаҡтарға күҙ һала торғас, мин иң оҙон сират һуҙылған Бөрйәндән килгән Ғәли ағай Ҡолбирҙиндың сауҙа нөктәһенә туҡталдым. Ул йүкә балының 3 литрын 1000 һумға һата. Уға сират теҙелеүҙең сәбәбе балдың арзаныраҡ булыуында түгел икән. Йәрминкәнең тәүге йылынан уҡ ҡала халҡын үҙ балынан ауыҙ иттергән умартасының үҙ һатып алыусылары барлыҡҡа килгән. Ышаныслы балдың даны бүтәндәрҙе лә йәлеп итә. Шулай итеп, күптәр әле саҡ тәүге килемен ҡулына алғанда, Ғәли ағай 100 килограмм балын "һә" тигәнсе һатып та бөттө. Уның ни өсөн үҙ тауарына сағыштырмаса арзан хаҡ ҡуйыуы хаҡында ғәжәпләнеп һорауыма, ул былай тип яуап бирҙе: "Анау ҡәҙәрем сират йыйылғанда, нисек итеп ҡиммәт хаҡҡа һатып тормаҡ кәрәк? Үҙем дә оҙон-оҙаҡ торорға яратмайым. Мин йыл һайын шулай иң тәүҙә һатып бөтәм". Шулай тине лә, балы бөтөүенә ҡарамаҫтан, һаман ныҡышып торған бер әбекәйгә ҡырып-сырып тигәндәй, һауытына бал тултырып, ярты хаҡҡа ғына һатып ебәрҙе.

Әйткәндәй, бындай йомартлыҡты бер Ғәли ағайҙа ғына түгел, тағы ла бик күптәрҙә, бигерәк тә башҡорт умартасыларында, күҙәтергә тура килде. Ҡала халҡының төрлөсә мыжыуына күнеп торған тыныс һәм сабыр холоҡло умартасы халҡындағы был яңы һыҙатты асыҡлап, уларға ҡарата тағы ла һоҡланыуым артты. Был ихлас күңелле, мул ҡуллы, изге йәнле һөнәрмәндәр "ни тиклем күпте бирһәң, шул тиклем күпте алаһың" тигән тормош ҡанунын яҡшы аңлайҙарҙыр. Аллаһы Тәғәлә йомартлыҡты ярата. "Иң күркәм иман - сабырлыҡ һәм йомартлыҡ", тип әйтелә бит хәҙистәрҙә лә. Умартасыларға хас был холоҡ уларҙың эштәрендә лә, тормоштарында ла бәрәкәт килтерәләр.

**Шулай итеп, уңыш йыйыу, килем алыу һәр ваҡыт күңелле ваҡиға. Ә был ниғмәттәргә өлгәшеү еңелме, ул барыһының да ҡулынан килә торған эшме? Күптәрҙә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған был һорауҙарға яуап табыр өсөн мин йәрминкәлә ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт иттем:**

**Ришат НӨСРӘТУЛЛИН, Салауат районы, Яубүләк ауылы:** - Быйыл йәй тәүҙә ҡоро, унан ямғырҙар киткәс, бал аҙ булды. Күптәр балһыҙ ҡалды. Ә минең күстәрем көслө булғас, көндәр яҡшы торғанда ике аҙна эсендә бал йыйып өлгөрөп ҡалды. Ҡорт көслө булһын өсөн уны яҙҙан ҡарарға, ваҡытында туҡландырып, төрлө ауырыуҙарҙан дауалап торорға кәрәк, инәләренең йәш булыуы ла мотлаҡ. Тағы ла ҡорттарынан мул килем алам тиһәң, уны аҫрауға аҡсаңды йәлләмәҫкә кәрәк. Бал ҡорттары ҡушылып, буталып бөткәс, күсте көсәйтер өсөн тоҡом яңыртырға тура килде. Мин Бөрйәндән инә ҡорттар һатып алдым. Хәҙер йөҙ оя ҡортом бар. Умарталарҙы ҡышҡылыҡҡа ҡуйыр өсөн ҡура төҙөнөм, умарталыҡтың тирә-яғын кәртәләнем. Алдағы йылда бал биреүсе үлән сәсер өсөн ер эшкәртергә кәрәк. Ошоғаса төҙөлөшкә, умартасылыҡ кәрәк-яраҡтарына йыл һайын 150 мең тирәһе аҡса сығып торҙо. Быйыл ике тонна бал алһам, был һан үҙен аҡларға тейеш, Алла бирһә.



**Әйүп ЙОМАҒУЖИН, Бөрйән районы Аҫҡар ауылы:**

- Йәрминкәгә ойоштора башлағандан алып, йыл һайын етеһигеҙ фляга бал алып киләм һәм, Аллаға шөкөр, һатып бөтөп ҡайтам. Бында килеп, беренсенән, үҙебеҙҙең балдың сифатын сағыштырам, икенсенән, үҙем өсөн яңы пландар ҡорам. Бал яҡшы үткәс, былтыр хужалығымда умарта иҫәбен арттырып, 86 ояға еткерҙем. Шул бал аҡсаһына быйыл Хөкүмәт ярҙамы менән трактор һатып алдыҡ. Быйыл үҙемдең ғәйебем арҡаһында бер ни тиклем ҡорттарым ҡышын артыҡ эҫе темпуратуранан янып үлде, ә ҡоролоҡ уңышҡа зыян килтерҙе. Былтыр 3,5 тонна табыш алһам, быйыл бал 1 тонна тирәһе генә булды. Умартасының эше лә, мәшәҡәте лә бик күп инде ул. Мул уңыш алам тиһәң, бал ҡорто кеүек бер туҡтауһыҙ эшләргә, егәрле булырға кәрәк.



**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

*БЕЛГЕС КӘҢӘШЕ*

# УМАРТАСЫЛАР... ҠОЛАҒЫНА

Бал ҡорттары шундай нескә йән эйәһе, улар бөжәктәр араһында еҫкә иң ныҡ тәьҫир итеүсән. Улар алкоголь, тәмәке, хушбуй, ағыулыҡ кеүек ҡырҡыу еҫтәрҙе яратмай. Улар үҙ хужаларын танымаһалар ҙа, ҡулдарынан бал, прополис еҫе сығып торған һәм тыныс эш иткән кешене сағып бармайҙар. Бал ҡорто үҙе егәрле, таҙа, саф булғас, кешене лә тәртипкә өйрәтә. Беҙҙең башҡорт тоҡомло ҡорттарҙың ҡыҙыулығына килгәндә, был һыҙаты элекке замандарҙа уларҙың урманда ағас ҡыуыштарында, солоҡтарҙа йәшәгән ваҡыттарынан тороп ҡалған. Айыу, һыуһар кеүек хайуандарҙың һөжүм итеүенә яҡлау тәьҫире күрһәтеп, саға ул. Тап шуға ла бөгөн бал ҡорттарының иң беренсе сәскә йәбешеүе ошонон менән аңлатыла ла инде. Ә ни өсөн бал ҡорттары менән булышҡанда дымар ҡулланыла? Элек урманда янғын сыҡҡанда ҡуша солоҡтар, умарталыҡтар ҙа янған. Бындай осраҡта татлы ризыҡ хужалары үҙҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн эстәренә бал йыйып, алыҫҡа осоп китә. Шуға ла, ғалимдар раҫлауынса, төтөн еҫе килгән ваҡытта, улар бал бөрләтәүҙәрен запас аҙыҡ менән тултырып ҡалырға тырыша. Төтөн улар өсөн хәүеф сигналы булып тора. Ә кавказ, карпат тоҡомло бал ҡорттары баҫалҡы, тыныстар, әммә улар уғыры була. Ә беҙҙең ҡорттар уҫалдар, йыш айырыусан һәм иң яҡшы сифаты - йүкә сәскәһенән тиҙ генә яҡшы сифатлы бал йыйыуында. Тағы ла умарталар урынлашҡан ерҙә электр бағаналары үтһә, бал ҡорттары быға ныҡ ҡуҙғый. Электр сымдарының бал ҡорттарына кире тәьҫир итеүе фәнни яҡтан иҫбат ителгән. Һуңғы ваҡытта бал ҡорттарының күпләп ҡырылыу күренештәренә кеҫә телефондары тулҡындарының йоғонтоһо булыуы ла ихтимал. Умартасылар үҙҙәре әйтеүенсә, кеҫә телефоны менән умарталыҡҡа яҡын килгәндә, бал ҡорттары ҡуҙғый башлай. Шуға күрә лә, үҙ эшенә яуаплы ҡараған хужалар умарталыҡҡа барған саҡта телефондарын ҡалдырып китә, йә уны һүндереп ҡуя. Әлбиттә, был күренеш әлегә тикшереү үтмәгән, быға быйылғы ҡоролоҡ та сәбәпсе булып тороуы мөмкин.

**Рафиҡ НОҒОМАНОВ,**
**ауыл хужалығы фәндәре кандидаты.**

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# СӘХНӘЛӘ ГЕНӘ БУЛҺА ЛА...

## Зәки Вәлидиҙе күрәсәкбеҙ

**Кен Кизиның "Кәкүк ояһы" спектакле йыл ярым уйналмай торғандан һуң, яңынан сәхнәгә сыға. Башҡорт дәүләт академия драма театры тап ошо сәхнә әҫәре менән 25 сентябрҙә яңы ижад миҙгелен асып ебәрәсәк тә инде. Төп геройҙарҙың береһе булған индеец ролен башҡарыусы актер Хәмит Шәмсетдинов ҡапыл ауырып китеп, вафат булыу сәбәпле, был спектакль ваҡытлыса репертуарҙан төшөп ҡалғайны. Хәҙер был ролде йәш актер Ринат Баймырҙин башҡарасаҡ. Был турала театрҙың 90 йыллыҡ юбилей миҙгеленә арналған матбуғат конференцияһында әйтелде.**

Театр миҙгеле быйыл күп һанлы күнелле мәшәҡәттәргә бай булмаҡсы. Мәсәлән Күлбаев халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 90 йыл тулыу айҡанлы, уның бығаса бер тапҡыр ҙа уйналмаған "Ауыл адвокаттары" повесын сәхнәләштерергә әҙерләнә. Бәләкәй сәхнәлә иһә Санкт-Петербургтың А.С. Пушкин исемендәге Рәсәй дәүләт академия драма театры режиссеры, яҡташыбыҙ Искәндәр Сакаев Софоклдың "Эдип батша" трагедияһын ҡуйырға ниәтләй. Шулай уҡ Яңы Мәскәү драма театры режиссеры Нәркәс Искәндәрованың да башҡорт театрына яңы һулыш алып килеүе көтөлә. Ул Вуди Алендың "Парящая лампочка" тигән классик әҫәрен ҡуймаҡсы.

Ә театрҙың юбилей миҙгеле унайынан Нәжип Асанбаевтың "Зәки Вәлиди" драматик трилогияһының "Зәки Вәлиди Туған" тигән сәхнә әҫәре ҡуйыласаҡ. "Был әҫәрҙәге ваҡиғалар Зәки Вәлиди йөрөгән Башҡортостан, Урта Азия һәм башҡа төрлө күп ерҙә барғас, уны сәхнәләштереү күп ҡыйынлыҡтар тыуҙыра, - тип һөйләп китте уны сәхнәгә ҡуйыусы театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов. - Ул ғүмеренең һуңғы йылдарында Төркиәлә йәшәй һәм ғалим булараҡ, оло абруй яулай. Тап шуға ла буласаҡ спектаклдең рәссамы Таң Еникеев Төркиәлә ул йәшәгән, эшләгән ерҙәрҙе күреп, фотоға төшөрөп ҡайтыуы һәм быларҙы сәхнәлә сағылдырыуҙы мотлаҡ иҫәпләй. Унан һуң Зәки Вәлидиҙең Төркиәлә йәшәүсе балалары менән һөйләшеп, уларҙан фатиха алыу ҙа кәрәк. Халҡыбыҙҙың бөйөк шәхесе тураһында әлегәсә билдәле булмаған яҙмаларҙы, мәғлүмәттәрҙе туплап, уның кешелек сифаттарын күрһәтеү беҙҙең маҡсат булып тора. Беҙ уның тыуған ауылы Көҙәндәге музейына барып килдек тә инде. Әлегә төп геройҙы кем уйнаясағы билдәһеҙ. Мин иһә уны өс быуында күрһәтергә кәрәк, тип уйлайым. Шуға күрә лә был образды тыуҙырыу өсөн өс, хатта унан да күберәк актерҙар йәлеп ителеүе ихтимал. Актерҙар һайлаған ваҡытта беҙ уның тышҡы йөҙө оҡшашлығын эҙләүҙе маҡсат итеп ҡуймайбыҙ, Зәки Вәлиди образын башҡарыусы актер шулай уҡ шәхестең эске донъяһын асыусы көслө рухлы, бай хисле булырға тейеш".

**Әйткәндәй, Башҡорт академия драма театры ижадсылары октябрь айында Кен Кизиның "Кәкүк ояһы" спектакле менән Минск ҡалаһында үтәсәк "Панорама" Халыҡ-ара театр фестиваленә йыйына. Донъяның алдынғы театрҙары ҡатнашасаҡ был сарала улар Мәскәү һәм Санкт-Петербург театрҙары менән бергә, Рәсәй исеменән сығыш яһаясаҡ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: Айрат Абушахманов сәхнәләштергән был тамаша төрки телле театрҙарҙың "Туғанлыҡ" халыҡ-ара фестивалендә Гран-приға лайыҡ була, Башҡортостанда эшләп килгән драма театрҙары араһында тәүгеләрҙән булып "Алтын битлек" милли театрҙар фестивалендә ҡатнаша һәм Түбәнге Новгород ҡалаһында үткән "Реаль театр" фестивалендә тәнҡитселәр тарафынан иң яҡшы баһа алып ҡайта.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**



ҺЫЙЛАМАҒА ҺЫЙЫҢ БУЛҺЫН

### Таш ҡабаҡтарҙан (кабачок) әсе ҡоймаҡтар

Бер стакан йылы һөткә бер ҡалаҡ әсетке, ике ҡалаҡ шәкәр ҡомо һалып болғатҡас, ике йомортка һытып, кәрәгенсә тоҙ һибеп, бер стакан он ҡушып, туҡып, ҡабартырға ҡуйырға. Бер бәләкәй таш ҡабаҡты эре ҡырғыстан үткәреп, ҡамырға ҡушып болғатырға ла, ҡыҙған майға ҡалаҡлап һалып, бешереп алырға.

### Таш ҡабаҡтарҙан сөсө ҡоймаҡтар

Уртаса ҙурлыҡтарҙы ике таш ҡабаҡты ҡырғыстан үткәрергә, ике ҡалаҡ шәкәр ҡомо, ике йомортка, бер ҡалаҡ ҡаймаҡ, кәрәгенсә тоҙ, аш содаһы һалып болғатҡас, икешәр стакан йылы һөт менән он ҡушып, әҫе майлы табала бешерергә. Өҫтәлгә йә майлап, йә баллап, йә ҡайнатма һөртөп ултыртырға.

### Бауырҙан ҡоймаҡтар

Ярты килограмдай бауырҙы яҡшылап йыуғас, 100 грамм башлы һуған ҡушып, ит үткәргестән үткәрергә. Ике-өс йомортка, бер ҡалаҡ ҡаймаҡ, тәмenvәмәнә ҡарап тоҙ, балғалаҡтың өстән бер өлөшөндәй аш содаһы ҡушып болғатҡас, ярты литр йылы һөт менән кәрәгенсә он һалып, туҡып, майлы табала ике яғында ҡыҙҙырып бешереп алырға.

### Алманан шарлотка

Бер килограмм алманы йыуып, йоҡа итеп турарға. Дүрт йомортҡаны туҡып, бер семтем тоҙ, бәрәр стакан шәкәр ҡомо, он өҫтәп, туҡырға. Табаны майлағас, төбө йәйелгәнсе ҡамыр ҡойорға ла, туралған алманы һалып, өҫтөнә ҡалған ҡамырҙы бөткәнсе ҡойоп, духовкала бешереп алырға.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

### НИСӘ "Ә", НИСӘ "Ҫ"?

Компьютерҙа 14,500 символ-тамғанан торған башҡортса текста беҙҙең телгә хас өндәрҙең нисбәте түбәндәгесә:

Ә - 772 тапҡыр ҡабатлана.

| | |
|---|---|
| Ҡ - 191 | Ө - 145 |
| Ҙ -177 | Ү - 144 |
| Һ - 166 | Ң - 92 |
| Ғ - 162 | Ҫ - 23 |

Хәҙер инде ошо һандарға ҡарап, тексты яҙыусыға характеристика биреп ҡарайым. Асыҡ күңелле, йомарт, тиҙ генә хискә бирелеүсән, гуманитар өлкәгә яҡын тороусы, әммә бер яғы әйләнһә, ҡаты телле һәм ҡоростай ихтыярлы ла була алыусы кеше.

Үҙегеҙҙең ниндәй кеше икәнлекте белгегеҙ килһә, бер-ике биттән торған ҡыҙыҡлы ваҡиға хаҡында лаҡап йә хикәйә яҙып ебәреп ҡарағыҙ. Ә мин ул текстка ҡарап, һеҙҙең кем икәнлегегеҙҙе әйтеп бирермен. Йә, кем?

**Һәйөндөк АҪЫЛОВ.**

Утерянный студенческий билет **№07-143**, выданный **БГМУ** 01.09.07 на имя **МУСЛИМОВОЙ Гульчачак Касимовны,** считать недействительным.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, ғыбрәтләр яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТЛЕ ЙӘШӘЙ...

## еңеүҙән һәм еңелеүҙән баш тартҡандар

Сәйәсәт - ул башҡа төрлө саралар менән һуғышты дауам итеү.

**(Во Нгуен Зиап).**

Сәйәсәттә, грамматикалағы кеүек, барыһы ла ебәргән хата ҡағиҙәгә әүерелә.

**(Андре Мальро).**

Ҡатын-ҡыҙҙар йәшен һынамай. Уның өсөн быны әхирәттәре эшләй.

**(Юзеф Булатович).**

Иҫке гәзиттәрҙе генә уҡырға кәрәк. Ун йылдан һуң уларҙа яҙылған бөтөн насар яңылыҡтар көлкө тыуҙырасаҡ.

**(Жан Ануй).**

Мин үҙемдең көйөнөүҙәремде һәр ваҡыт дошмандарыма һөйләйем, улар ғына мине иғтибар менән тыңлай белә.

**(Роберт Орбен).**

Еңеү нәфрәт тыуҙыра; еңелгән кеше хәсрәт менән көн итә. Еңеүҙәрҙән һәм еңелеүҙәрҙән баш тартып, тыныс йәшәүҙе һайлағандар ғына бәхетле ғүмер кисерә.

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше йылдар буйына үҙен бар нәмәнән сиклэп аҡса йыйған. Берҙән-бер көндө уға шундай уй килә: бер йыл буйына үҙен бер нәмәнән дә сикләмәйенсә йәшәп ҡарарға кәрәк. Тик көтмәгәндә уның алдына Үлем килеп баҫа. Кеше төрлө сәбәптәр килтереп, Үлемдән тағы ла бер аҙ йәшәргә үтенеп һорай, ялбара икән, тик ул ишетергә лә теләмәгән. "Миңә өс көн булһа ла йәшәргә мөмкинлек бир, мин һиңә байлығымдың яртыһын бирермен", - тигән кеше. Үлем уны ишетмәгән дә хатта. "Ярай, миңә бер генә көн булһа ла йәшәү бир, мин һиңә йылдар буйына үҙ көсөм менән йыйған бар байлығымды бирәм". Үлемде күндереп булмаған. Үлем алҡымынан алғас, кеше ҡағыҙ битенә ошо һүҙҙәрҙе генә яҙып өлгөргән: "Әгәр ҙә һинең лайыҡлы тормош өсөн аҡсаң етә икән, байлыҡ артынан ҡыуып, ваҡыт уҙғарма. Йәшә! Минең аҡсаларым ғүмерҙең хатта бер генә сәғәтен дә һатып алырға ярҙам итә алманы..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт: Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)
Тираҙы - 5615
Заказ 3799